ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13-19 ноябрь (ҡырпағай) 2021

№46 (984)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иректә

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Тарих ҡабатланамы? 3

Герб - милләтте берләштереүсе образ, уның тарихының дауамы 8-9

Ваҡыт - аҡсамы? 10-11

Атай һәм ул фажиғәһе 12-13

ТВ-программа 14











***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 731 һум 66 тингә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, дуҫтарына яҙҙырып та бүләк итә ала. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

**?** *Үткән ай аҙағында Ҡатын-ҡыҙға көс ҡулланыуға ҡаршы көрәш көнө билдәләнде. Ошондай заманда ла был проблеманың һаман булһа хөкөм һөрөүе аптырата...*

***Зариф БАЙҒУСҠАРОВ, РФ Дәүләт Думаһы депутаты:***

Ҡайһы бер тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе буйынса Рәсәйҙә ҡатын-ҡыҙҙарҙың 25 проценты ғаиләһендә көс ҡулланыуға дусар ителеп йәшәй. Хатта был һан, әйтәйек, 25 түгел, ә 20, 10 йәки 5 "кенә" процент булған хәлдә лә - был барыбер бик ҙур. Әйе, бик күп ҡатын-ҡыҙ теге йәки был төрлө көс ҡулланыуҙан зыян күреп йәшәргә мәжбүр. Был турала белмәгән-ишетмәгән, йә булмаһа, таныштарының, күршеләренең шундай шарттарҙа йәшәүен күрмәгән кеше юҡтыр ҙа. Шул уҡ ваҡытта ғәйепле ир кеше бындай осраҡтарҙа, ғәҙәттә, яуаплылыҡтан ҡасырға маташа. Хоҡуҡ һаҡлау органдарында ла йыш ҡына "ғаилә хәлдәренә ҡыҫылмау хәйерле" тигән ҡараш йәшәп килә. Ҡайһы бер сәйәсмәндәр һәм хатта руханиҙар ҙа шундайыраҡ фекерҙә. Улар ҡатын-ҡыҙға ҡарата көс ҡулланыуға ҡаршы һәм уны яҡлаусы закон сығарыуға аяҡ салалар. Йәнәһе, дәүләт ғаилә эшенә ҡыҫылырға тейеш түгел.

Ә минеңсә, әгәр ғаиләлә енәйәт ҡылына, кеше ғүмеренә үлемесле хәүеф янай икән, ҡыҫылырға кәрәк. Мәсьәлә хатта шундай боролош алыуға тиклем барып етте: был законды ҡабул итеү ғаилә ҡиммәттәрен юҡҡа сығарасаҡ, ти улар. Бындай ҡараш бик аптырата. Ҡайһы бер руханиҙар фекеренсә, ул саҡта ир-егет өйләнмәйәсәк һәм тыуым кәмейәсәк. Әйтерһең дә, ҡатындарҙы туҡмауҙан балалар күберәк тыуырға тейеш булып сыға...

Федераль судья булып эшләгән ваҡыттарҙа миңә туҡмалған ҡатындар буйынса бик күп эштәр ҡарарға тура килде: ғәҙәттә, улар тешһеҙ, сәсһеҙ, иртә ҡартайған ҡатындар була ине. Үҙҙәре йыш ҡына ғәйепле ирҙәрен яҡларға булып китерҙәр ине, сөнки ундайҙар даими рәүештә психологик һәм физик баҫымға дусар ителеп, ҡурҡыуҙары йөҙҙәренә сыҡҡан һәм үҙҙәрен ирекһеҙҙән ғәйепле итеп тоя башлайҙар. Бындай ҡатындарға профессиональ психологик ярҙам кәрәклеге күренеп тора. Был ҡатын-ҡыҙға ҡарата кешеләрсә мөнәсәбәт түгел, улай булырға тейеш түгел. Өҫтәүенә, бындай тормоштан балалар яфалана, күңелдәре ғүмерлеккә йәрәхәтләнә. Дөрөҫ, зыян күргән ҡатындарҙың күбеһе полицияға яҙған ғаризаларын кире ала, сөнки улар иренән үс алыуынан, үҙҙәренең һәм балаларының ғүмерҙәре өсөн ҡурҡалар, балалары хаҡына нисек тә түҙеп йәшәргә кәрәк тип уйлайҙар.

Ғаиләлә көс ҡулланыуға ҡаршы закон, киреһенсә, ғаиләлә именлек, тыныслыҡ урынлаштырыуға булышлыҡ итәсәк, фажиғәле хәлдәрҙе иҫкәртәсәк. Беҙ бит хоҡуки илдә йәшәйбеҙ, беҙҙә кеше яҡлаулы булырға хоҡуҡлы. Беҙ, Дәүләт Думаһының бер төркөм депутаттары, "Рәсәйҙә ғаилә-көнкүрештәге көс ҡулланыуҙы иҫкәртеү тураһында"ғы закон проектын әҙерләүселәр, бөгөнгө тормош хәлендә был законды ҡабул итеү кәрәклегенә тағы ла нығыраҡ инандыҡ, сөнки ҡатын-ҡыҙҙарҙан уларға ҡул күтәреү осраҡтары хаҡында мөрәжәғәттәр һаны арта бара. Был хәлгә үҙкурсаланыу режимында йәшәү, йәғни оҙаҡ ваҡыт өйҙә бергә булыу, спиртлы эсемлектәр һатыу күләмен арттырыу, эшһеҙлек кеүек сәбәптәр ҙә булышлыҡ итә. Закон проектына ҡаршылар әле күп булыуға ҡарамаҫтан, беҙ был йүнәлештә эшмәкәрлекте дауам итәсәкбеҙ.

## Ә ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?

# ГӘЗИТЕБЕҘҘӘ - ТАРИХЫБЫҘ САҒЫЛЫШЫ



**"Киске Өфө" гәзитендә йыл дауамында Башҡорт тарихы йылына, башҡорттар тарихына арналған бихисап мәҡәләләр донъя күрҙе. Уларҙан бөгөн 20 һорау туплап, викторина тәҡдим итәбеҙ. Тәүгеләрҙән булып дөрөҫ яуап биреүсе кешене 7 томдан торған Башҡорт энциклопедияһы көтә! Шулай уҡ башҡалар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаç. Баш ҡатырғыста ҡатнашыусылар 2022 йылдың тәүге яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияһының күсермәһен дә ебәрергә тейеш.**

### ҺОРАУҘАР:

1. "Ысын башҡорт олатайының һәм әләсәйенең һандығында көмәндә ете батыр, ете хайуан тураһында һәм ете тылсымлы әкиәт, ете доға, ете шиғыр, ете йыр, ете йомаҡ, ете көләмәс, ун ете таҡмаҡ ята, улар әйткәндәрҙе ейәненә өйрәтә" - был юлдар башҡорт өсөн мөһим булырға тейешле ниндәй төп документтан алынған?
2. "Башҡортостандың мишәр балаһы" псевдонимы менән мөрәжәғәт ҡайҙа һәм ҡасан баҫылып сыға?
3. Башҡорт халҡының азатлыҡ көрәшен сағылдырған башҡорт телендәге тәүге төҫлө телефильмы ҡасан төшөрөлә?

(Дауамы 2-се биттә).

12+

✓ *"Рухиәт менән йәшәгәндәр яҙмышҡа буйһонмай", тигән бер аҡыллы әҙәм. Беҙҙең ошондай даими уҡыусыларыбыҙ рухиәт менән йәшәй, юғарыға ҡарап фекер төйнәй, үҙенең кемлеген, кем балаһы булыуын белә.*



Ә ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?

# ГӘЗИТЕБЕҘҘӘ - ТАРИХЫБЫҘ САҒЫЛЫШЫ

(Башы 1-се биттә).

## ҺОРАУҘАР:

4. Үҙ ырыуы тураһында кем: "Беҙҙең төп ырыуыбыҙ - Суҡлы-Ҡай, ә беҙгә яҡын ырыуҙарҙан Саңаҡлы-Ҡай, Йөрәкле-Ҡай, Таулы-Ҡай, Ҡай йәиһә Ҡайлы ырыуы составына инә", - тип яҙып ҡалдырған?

5. Ул 5 мәҙрәсәлә белем ала, XIX быуаттың 70-80-се йылдарында 4 мәртәбә Мәккәгә хаж ҡыла. Үҙе иҫән сағында иҫке төрки телендә 6 китабын нәшер итә һәм бик күп ҡулъяҙма мираҫ ҡалдыра. Уның 9 күләмле ҡулъяҙмаһы Башҡортостандың Ә.-З. Вәлиди исемендәге Милли китапханала, шунсаһы уҡ Ҡазан федераль университеты Ғилми китапханаһының көнсығыш ҡулъяҙмалары секторында, ә бер ни тиклеме Санкт-Петербургта Рәсәй Фәндәр академияһының Көнсығыш ҡулъяҙмалары институтында һаҡлана. Һүҙ кем тураһында бара?

6. 1870 йылда ул Англия компанияһы етәкселегенә күсә. 1891 йылда инглиздәр уны һата. 1902 йылда ул эшмәкәрлеген тулыһынса туҡтата. Һүҙ нимә тураһында бара һәм уның хаҡында нимә беләһегеҙ?

7. Александр Семенович Ишкилдин кем ул? Уның башҡорттарға ниндәй мөнәсәбәте бар?

8. Ике өлөштән, 10 стратегик йүнәлештән торған башҡорттар өсөн төп документ нисек атала һәм ул ҡасан ҡабул ителгән?

9. "Башҡорттар араһында ҡәбилә һәм клан берҙәйлеге, дөйөм башҡорт берҙәйлеге кеүек үк, иң юғары берҙәйлек булып, әлеге көнгә тиклем һаҡланып ҡалған" - башҡорттарҙың этник үҙенсәлеге тураһындағы был фекерҙе кем яҙып ҡалдырған?

10. "Башҡорттарҙа шундай көйҙәр күп, уларға теләһә ниндәй композитор көнләшеп ҡарар ине", - был һүҙҙәр кемдеке?

11. "Башҡорттарҙың беҙгә 1904 йылда Соколовтың китабы буйынса билдәле булған һәм өйрәнелгән тамғалары иртә төрки дәүләттәренең аҡһөйәктәре һәм хакимлыҡ итеүсе династиялары символикаһына барып тоташа". Был фекерҙе кем, ҡайҙа, ҡасан белдерә?

12. Быйыл 10-сы тапҡыр йыйын йыйған иң әүҙем башҡорт ырыуы.

13. Башҡорт телендә өс диалект булыуын, башҡорттарҙың төньяҡ-көнбайыш диалектының үҙаллы, көнбайыш диалекты булыуын нигеҙләгән, башҡорт диалектологияһы фәнен Бөтә Союз төркиәт аренаһына сығарған ғалим.

14. Башҡортостанда Шәжәрә үҙәге ҡасан ойошторолған һәм ҡайҙа урынлашҡан?

15. Белгестәр билдәләүенсә, башҡорт атының иң төп билдәләренең береһе?

16. Ғалим, социолог, тарихсы, инженер Йәҙгәр Бәшировтың башҡорт тарихына ҡағылышлы ниндәй китаптары бар?

17. Был байраҡты 2-се Башҡорт уҡсылар полкы яугирҙары теккән. Граждандар һуғышында яҡташтарыбыҙ ошо байраҡ аҫтында дошман менән алышҡан. Хәҙер ул Башҡортостандың Милли музейында һаҡлана. Ошоға тиклем был байраҡ ҡайҙарҙа һаҡланған һәм ҡайҙан ҡайтҡан?

18. "Топонимияның ижадсыһы - халыҡ, ә уның сығанағы халыҡтың үҙ ерендәге тормошо, хеҙмәте, ижады, тәбиғәтте танып белеү һәм үҙләштереү кеүәһе, уй-фекер һәм хыял донъяһы, замалар аша үткән көндәлек эшмәкәрлеге, тарихи яҙмыш юлдары. Был йәһәттән топонимика фольклорға яҡын тора". Был юлдарҙың авторы кем?

19. Ырымбур өлкәһенең башҡорт фольклорында сағылыш тапҡан берҙән-бер генерал губернатор кем?

20. Башҡорт ғәскәрҙәре музейы ҡайҙа булдырылыуы ихтимал?

КЕМ АЛЫҠ?

# АҘНА ҺАЙЫН БҮЛӘК

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының иң ҡыҙыу мәле бара. Хәйер, иң ҡыҙыу мәл, тип элек әйтә торғайныҡ. Ул замандар, йәғни ошо көҙгө айҙарҙа почтальондарҙың һәр өйгә, һәр фатирға инеп, быға тиклем яҙҙырылған баҫмаларҙы мотлаҡ яңы миҙгелгә лә оҙайтыу хәстәрлеге менән йөрөп ятыуы тарихҡа күсә - халыҡ гәзит-журнал-китап уҡыуҙан төңөлә бара, төңөлә бара, тип уфтаныла бына.**




Ә шулай ҙа дуҫтарыбыҙҙы бөтөнләй үк юғалтып бөтмәгәнбеҙ әле. Бар әле гәзит һүҙен үҙ иткәндәр, "Гәзиттә бит шулай яҙылған!" тип, һәр һүҙен гәзит һүҙе менән йөпләүселәр - улар беҙҙә ҡағыҙ баҫмаларҙың киләсәктә лә йәшәйәсәгенә өмөт уята. "Рухиәт менән йәшәгәндәр яҙмышҡа буйһонмай", тигән бер аҡыллы әҙәм. Беҙҙең ошондай даими уҡыусыларыбыҙ рухиәт менән йәшәй, юғарыға ҡарап фекер төйнәй, үҙенең кемлеген, кем балаһы булыуын белә - шуға ла уға донъяның хәтәрҙәре ҡурҡыныс түгел. Ошо хәкиҡәтте белмәй-аңғармай, аҙашып йөрөүселәр, бер туҡтауһыҙ яҙмыш һынауҙарына зарланыусылар, заман ҡуйған ҡаршылыҡтарға яраҡлаша алмай ыҙаланғандар ҙа уҡыһын ине гәзитебеҙҙе - донъялары үҙгәреп китәсәгенә иманыбыҙ камил. Гәзитебеҙҙәге һәр сығыш ундайҙарҙы рухиәт менән һуғарыр, кешелек асылын, тамырҙарын, кем булыуын, был ергә ниндәй бурыс атҡарырға килеүен аңғартыр. Беҙҙең баҫмабыҙ ошо бурысты йөкләгән.

Шулай итеп, "Киске Өфө"гә яҙылыусыларҙы бер аҙ дәртләндерергә булдыҡ әле. Яҙылыусыларыбыҙға мөрәжәғәт итеп, **2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 15-нән 21-се ноябргә тиклемге аҙнала яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең барыһына ла күренекле шағирә Зөлфиә Ханнанова китаптар бүләк итә.** Шағирә белорус яҙыусыһы Алесь Карлюкевичтың "Шубуршун һәм уның дуҫтары" тигән әҫәрен тәржемә итеп, китап итеп баҫтырып сығарған. Баҫма күберәк балаларға тәғәйенләнә. Шубуршун исемле бәләкәй генә әкиәт геройының ҙур йылғалар буйлап мажаралы сәйәхәте тасуирлана унда. Мауыҡтырғыс ваҡиғалар аша уҡыусылар күнеленә күп төрлө энциклопедик мәғлүмәт һеңдерелә. Ғилемле, ярҙамсыл, ҡыйыу йөрәкле, ихлас Шубуршун, моғайын, "Киске Өфө" гәзитен уҡыусы атайәсәйҙәрҙең балаларында ла ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыр, тип ышанабыҙ.

**Шулай итеп, әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Үткән ай ахырында Ҡатын-ҡыҙға көс ҡулланыуға ҡаршы көрәш көнө билдәләнде. Ошондай заманда ла был проблеманың һаман булһа хөкөм һөрөүе аптырата...***

*Айгөл УРАҘБАЕВА, блогер:* "Бәйләнештә"ге "Серҙәштәр" төркөмөн йыш күҙәтеп барам. Һуңғы ваҡыт бында ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәр буйынса бик ҡыҙыу бәхәстәр бара. "Ирем көн күрһәтмәй, туҡмалып йәшәйем" тип, ысынлап та ҡағылып-һуғылып йәшәүсе ҡатындар күп яҙа "Серҙәш"кә. Комментарий авторҙары бер таушытан ирҙе ғәйепләй һәм түҙеп йәшәмәҫкә, айырылырға кәңәштәр бирә башлай. Ә бит был виртуаль әхирәттәр хәлдең айышын белмәй, бары тик авторҙың яҙғаны буйынса ғына фекер йөрөтә. Бәлки, был ҡатын бик асыулы сағында, уйлап-нитеп тормаҫтан, эс бушатып алырға ғына теләгәндер ҙә, аҙаҡ, бәлки, ни өсөн өйөнән "сүп-сар сығарыуына" үкенеп ултыралыр.

Ә бына айыҡ аҡыл менән уйлап ҡараһаң, ғаилә ығы-зығыһы буштан ғына бар булмай, шулай бит? Конфликт һәр ваҡыт ике яҡлы булыуын яҡшы беләбеҙ. Шуға ла ике яҡты ла тыңламайынса тороп, дөрөҫ кәңәш биреп тә булмайҙыр. Асылда, ирҙәрҙең генә түгел, донъя көтөп йәшәгән ҡатындарҙың да төрлөһө бар. Тик эш шунда: ниндәй ҡатын, әсә һәм хужабикә ул? Мәҫәлән, бер йәш ғаиләне беләм. Ир кеше яҡшы ғына урында эшләй, эсмәй, аҡса таба, төҫкә-башҡа ла төшөп ҡалғандарҙан түгел. Ә бына ҡатынының ике күҙе ситтә. Өйҙәренә барһаң, һыу эсергә таҙа һауыты ла булмай. Түрбашы быҫраҡ, өҫтәле тулы йыуылмаған һауыт-һаба... Сығып китһә, ире уның артынан эҙләп йөрөй.

Нимә тип әйтергә итәм? Бая әйткәнемсә, ғәйеп һәр саҡ ике яҡта ла була. Юҡҡамы ни, боронғолар ҡыҙ биргәндә - кейәү яғын, килен алғанда ҡыҙ яғының ете быуынына тиклем тикшереп, барлап, шунан ғына мәсьәләне хәл иткән.

Тағы бер фекерем шул: һөйөләпмә, туҡмалыпмы йәшәүе күбеһенсә ҡатындарҙың үҙҙәренә лә бәйле. Тағы ла боронғо атабабаларыбыҙ аҡылына ҡолаҡ һалайыҡ: "Ирҙе ир иткән дә, ер иткән дә - ҡатын". Ирҙе ир итеү, уны баш тип һанлау, абруйын күтәреү етмәй бөгөн. Ә инде эшләмәй, эсеп, тауыш ҡуптарып, ҡатынына көн күрһәтмәй, ҡул күтәргән ирҙән туҡмалып йәшәргә кем һәм нимә мәжбүр итә һуң ҡатындарҙы? "Ғаилә ҡатындың түҙемлеге еткәнсә йәшәй", тигән аҡыл да бар. Әгәр тырышып та донъяң алға бармай икән, үҙеңдә ихтирам итмәгән кеше менән нинә этә-төртә, етмәһә, туҡмала-туҡмала йәшәргә?..

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәрҙән тулыһынса азат итеүҙәре ихтимал. Тейешле закон проекты Хөкүмәткә ҡарауға ебәрелгән. Әле ветерандар түләү ҡағыҙындағы сумманың тик яртыһын ғына түләй. Закон проекты ҡабул ителһә, ул йөҙ мендән ашыу кешегә ҡағыла. Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, ветерандарға өҫтәмә ярҙам күрһәтеү өсөн федераль бюджеттан йылына 1 миллиард һумдан ашыу аҡса талап ителә.

✓Башҡортостанда 33 табип үҙ вазифаһын башҡарғанда ковидтан һәләк булған. Республика Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә табиптарҙы дәртләндереү өсөн тәҡдимдәр әҙерләргә ҡушты. " Беҙҙә йыл ярым "ҡыҙыл зона"ла эшләгән табиптар бар. Байтаҡ табиптарыбыҙ ауырыны. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, 33 табип үҙ вазифалары үтәгәндә вафат булды. Хәҙер табиптарға булышлыҡ күрһәтеү бик мөһим, әлегә барыһы ла уларҙан тора", - тине Радий Хәбиров.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә ҡалаған сыҡҡанда Ағиҙел аша арҡалы күперҙең өс йылға реконструкцияға ябылыуы тураһында хәбәр итте. "Өфө халҡы беҙҙе дөрөҫ аңлаһын өсөн улар менән яҡшылап эшләргә кәрәк, - тине Радий Хәбиров баш ҡала хакимиәте башлығы Сергей Грековҡа. - Беҙ был күперҙе өҫтәлмә күперҙән оҙағраҡ, өс йылға яҡын эшләрбеҙ. Бәлки, ваҡытын ҡыҫҡартырбыҙ. Был - ҙур күләмле эш".

✓Майҙаны 1000 квадрат метрҙан ашыуыраҡ гипермаркеттарға һәм башҡа сауҙа биналарына вакцинация тураһында сертификат, ярты йыл эсендә сирҙе үткәреү йәки прививка эшләтергә ярамауы хаҡында белешмә (ПЦР-тест менән бергә) менән генә инергә рөхсәт ителә. Оператив штаб ултырышында ошондай ҡарар ҡабул ителде. Билдәләнеүенсә, ошондай сауҙа биналарына көнөнә меңләгән кеше килә.

✓Хөкүмәт вице-премьеры Рөстәм Моратов хәбәр итеүенсә, республиканың система барлыҡҡа килтергән предприятиеларында эшселәрҙең 80 проценты прививка яһатҡан. Беренсе урында - сәнәғәт компаниялары һәм ауыл хужалығы ойошмалары. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 18 декабрҙән эш биреүселәр прививкаһыҙ хеҙмәткәрҙәрҙе хеҙмәт хаҡын һаҡламайынса эшкә индермәү хоҡуғына эйә була (вакцина яһатырға ярамауы хаҡында белешмәһе булмаһа).

*КӨНАУАЗ*

# ТАРИХ ҠАБАТЛАНАМЫ?

**Вирусолог, Рәсәй Фәндәр академияһы мөхбир-ағзаһы, профессор Петр Чумаков мәжбүри вакцинация яҡлы булыуы хаҡында белдерҙе. "Рәсәй радиоһы" эфиры аша ул коронавирустан вакцинаға ҡаршы кешеләрҙе тәнҡитләп сығыш яһаны. Уның һүҙҙәренсә, илдә бөгөн тажзәхмәттең дельта штамы көсәйә бара, ә уға ҡаршы һөҙөмтәле көрәшеү өсөн бөтөн халыҡтың 80 проценты прививка яһатырға тейеш. Шул саҡта ғына вирустың яңынан-яңы штамдары үрсеүен туҡтатып буласаҡ. "Әле вакциналауға ҡаршы кешеләр аҙаҡ, уларҙы прививка ҡаҙатырға мәжбүр иткәндән һуң, рәхмәт кенә әйтәсәктәр",- ти ул.**



Кем һуң ул Петр Чумаков? Үҙенең был ҡәтғи фекерен нимәгә нигеҙләнеп яҡлай ул? Петр Михайлович бөгөн коронаға ҡаршы вакциналарҙың береһе - КовиВакты етештереүсе ғилми үҙәк ғорурлыҡ менән исемен йөрөткән легендар ғалим-вирусолог Михаил Чумаковтың улы. Михаил Чумаков (1909-1993) әлеге ғилми үҙәккә нигеҙ һалыусы һәм уның тәүге директоры булған. Тарих ҡабатланмай, тиҙәр, ләкин ул яңы урауҙар үтеп, үҙе хаҡында яңыртылған вариантта ҡабат ҡабат иҫкә төшөрөп тороусан. Бынан 70 йыллап элек донъяны ҡурҡыныс эҙемтәләре буйынса бөгөнгө тажзәхмәттән һис кәм булмаған һәм хатта унан да күркынысыраҡ хәүеф килеп баҫа - полиомиелит. Был сирҙән үлем кимәле 10-дан 20 процентҡа тиклем тәшкил итә, ә сирләгәндәрҙең яртыһын фалиж һуға. Бөтөн Ер йөҙө халыҡтары өмөтләнеп табиптарға һәм ғалимдарға баға: үлемесле вирустан кисекмәҫтән вакцина талап ителә. 1955 йылда махсус рәүештә Фәндәр академияһының Полиомиелит институтын асалар һәм 1953 йылғы "табиптар эше" шауҡымында золом ҡорбаны булыуҙан саҡ-саҡ тороп ҡалған йәш ғалим Михаил Чумаковты ошо институт директоры итеп тәғәйенләйҙәр. 1956 йылда өс совет ғалимын - Сталин премияһы лауреаты, Фәндәр академияһы ағзаһы Михаил Чумаков, уның арҡаҙашы һәм ҡатыны, вирусолог Мария Ворошилова һәм Ленинград ғалимы Анатолий Смородинцевты океан аръяғы ғалимдары менән берлектә вакцина мәсьәләһен хәл итеү өсөн АҠШ-ҡа командировкаға ебәрәләр.

Әйткәндәй, 1921 йылда АҠШ-тың буласаҡ президенты Франклин Рузвельт тап ошо вирустан зарарланып, инвалид арбаһына ултырырға дусар ителә. Американан ҡайтып, бер-ике йыл үтеүгә, Чумаков етәкселегендә полиомиелиттан ғүмерлеккә тотороҡло иммунитет булдырыусы препарат уйлап сығарыла һәм оҙаҡ та үтмәй, етештерелә лә башлай, ә Америка был йәһәттән бындай ҡыйыу аҙымға барырға батырсылыҡ итмәй. Чумаков иһә тәүәккәлләй: меңәрләгән балалар ғүмере өсөн шәхси яуаплылыҡ тоя ғалим. Ләкин беҙҙең илдә әҙер препарат ҡулланыу тапҡансы, бик күп ҡаршылыҡтарға осрай. Вакцинаның кеше һаулығы өсөн бер ниндәй зыяны юҡлығы ҡат-ҡат иҫбатланыуға ҡарамаҫтан, Һаулыҡ һаҡлау министрлығы һәм медицина буйынса башҡа чиновниктар прививканы ҡулланыуға ҡәтғи ҡаршы төшә. М.Чумаков үҙенең бөтөн "фантазияһын" эшкә егеп, туп-тура ул саҡтағы Министрҙар Советы Рәйесе урынбаҫары Анастас Микоян кабинетына барып инергә мәжбүр була. Ниһайәт, 1959-1960 йылдарҙа күмәк вакцинациялау башлана һәм 1961 йылға ил халҡының 80 проценты прививка эшләтә. Полиомиелит менән сирләү кимәле тәүге йылда уҡ 200 тапҡырға кәмей һәм тағы алты йылдан был сир менән зарарланыусылар һаны ни бары 60 кешегә тороп ҡала. Михаил Чумаковты хаҡлы рәүештә кешелекте полиомиелиттан ҡотҡарыусы тип йөрөтәләр.

Бөгөнгө хәл күп йәһәттән үткән быуаттың әлеге 60-сы йылдары ситуацияһын хәтерләтә, тик был юлы вакцинаны мөмкин тиклем һөҙөмтәлерәк ҡулланыуға түрәләр тарафынан түгел, ә халыҡ араһында ҡаршылыҡ күрһәтелә. Ҡиммәтле ваҡыт ҡулдан ысҡындырыла, ти Петр Чумаков, сөнки илдә вакцинациялауҙың әкрен барыуы вирустың яңынан-яңы варианттары үрсеүгә сәбәп булып тора. Шул арҡала ғалимдар һәм табиптар прививкалау күләмен 60-тан 80 процентҡа тиклем халыҡ иҫәбенә арттырырға мәжбүр булдылар. Мәсьәләне хәл итеү артабан да һуҙыла барһа, әлеге күрһәткес, һис шикһеҙ, 90 процентҡа ла барып баҫасаҡ, ти П.Чумаков. Ғалим атаһының эш тәжрибәһе һәм уның иҫ китмәле илһөйәрлек, кешелеклелек, гражданлыҡ позицияһынан сығып, үлемесле сирҙән ҡотолоу юлын фәҡәт вакцинацияла күрә һәм уға ҡаршыларҙың дәғүәләрен абсурд тип атай.

**Интернет материалдарын файҙаланып, Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ?

***Үткән ай ахырында Ҡатын-ҡыҙға көс ҡулланыуға ҡаршы көрәш көнө билдәләнде. Ошондай заманда ла был проблеманың һаман булһа хөкөм һөрөүе аптырата...***

***Вәсилә РӘХМӘТУЛЛИНА, урындағы үҙидара органы хеҙмәткәре:*** Эйе, пандемия шарттарында бөгөн тормошобоҙҙа урын алып килгән бөтөн проблемаларыбыҙ юҡҡа сыҡҡан һымаҡ тойолһа ла, бигүк улай ҙа түгел икән шул: эскән кеше эсеүен, ғаиләһен ынйытыуын дауам итә, ундайҙарға вирус ни ҙә, эпидемия ни. Үҙҙәре үк вирус ише яһил һәм әрһеҙгә әйләнеп бөткәндәр, тимәк. Коронавирус эпидемияһы хакимлыҡ итә, кешелек йәшәү менән үлем араһында көрәшә; күргән-белгәндәр, кемдәрҙеңдер яҡындары, туғандары мәңгелеккә китә... Бер-берендең ҡәҙерен белеп, имен тыуған һәр көнгә ҡыуанып йәшәр саҡ та бит, юҡ. Алкоголь ҡорбандары һәм һуғыш суҡмарҙарын был да хатта туҡтата алмай: эсеп, элеккесә ғаиләһендә янъял ҡуптарыуҙарын белә улар. Белгестәр әйтеүенсә, тап ошо һуңғы ике-өс йыл эсендә, киреһенсә, көнкүрештә эскелек осраҡтары күбәйгән һәм ирҙәренән туҡмалып йәшәүсе ҡатындарҙан мөрәжәғәттәр арта төшкән.

Махсус тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, 2011-2019 йылдарҙа Рәсәйҙә үлтерелгән 66 процент ҡатын-ҡыҙҙың ғүмере ғаиләлә көс ҡулланыу арҡаһында өҙөлгән. Баҫылып сыҡҡан суд ҡарарҙарынан асыҡланыуынса, ошо ваҡыт арауығында йөрәге тибеүҙән туҡтаған 18 547 ҡатындың 12 209-ы иренән йә башҡа яҡынынан туҡмалыуҙан донъя ҡуйған. Күпме был, әҙме? Тикшеренеү материалдарында ошондай сағыштырыу килтерелә: 10 йыл буйына барған Афған һуғышында, мәҫәлән, бөтәһе 14 427 совет һалдаты һәләк булған. Бынан сығып, шулай тип әйтергә генә ҡала: беҙҙәге байтаҡ ҡына ғаиләләрҙәге мөхит тә һуғыш яланынан бер ҙә кәм түгел. Тимәк, ҡатындар ғүмеренә үлемесле хәүеф менән янаусы урын - уларҙың донъя көткән, балалар үҫтергән йорто. Минең өйөм - минең ҡәлғәм, тип әйтә алмай, тимәк, улар. Аптырамаҫлыҡмы был?

Белгестәр әйтеүенсә, Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙары - донъяла иң яҡлауһыҙы. Бөгөн бит иҫерек йә наркотик тәьҫиренән аҡылын юйған ир-егеттең көнләшеүҙән һәм үс алыу ниәтенән бысаҡ, балта, мылтыҡҡа тотоноуы ғәҙәти хәлгә әйләнде. Бынан ике йыл элек Учалылағы тап шундай ҡанлы фажиғә бөтөн илгә фаш булғайны. Яҡлау эҙләп күршеләренә ҡасып ингән ҡатынын, күрше ҡатынды атып үлтереп, уның ирен яралап, полиция майорын атҡан иҫерек ир был енәйәтен бәләкәй балаларҙың күҙ алдында эшләй. Бынан сығып, шуны әйткем килә: ҡалаларҙа, ярай ҙа, ошондай осраҡтарҙа полиция ла, ашығыс ярҙам да килеп етә; өҫтәүенә, ҡалаларҙа махсус социаль үҙәктәр ҙә эшләй: иҫерек ир туҡмағынан бер ҡат кейем, яланаяҡ һәм балаһын эләктерә һалып ҡасҡан ҡатындарға ваҡытлыса баш төртөрлөк урын - социаль-психологик үҙәктәр бар, тип уҡығайным. Унда бер айҙан алып ярты йылға тиклем йәшәп тороу, белгестәр кәңәше ярҙамында киләсәк тормошто үҙгәртеп ҡороу мөмкинлеге бар, исмаһам. Ә ауыл ҡатындары бындай осраҡта ҡайҙа барһын? Улар бөтөнләй яҡлауһыҙ! Һарай йә мунсаһына, бик булмаһа, әлегесә күршеһенә инеп һыйына, тик, күренеүенсә, был да ҡотҡара алмай уларҙы. Етмәһә, өҫтәмә ҡорбандарға сәбәпсе булалар.

Ауыл ҡатындары социаль яҡлауға мохтаж. Исмаһам, уларҙы ошо йәһәттән ауыл хакимиәте, участка полицияһы, урындағы депутаттар, ҡатын-ҡыҙ советтары, ағинәйҙәр һәм ир-егеттәр ҡорҙары үҙ ҡурсалауына алһын ине. Үкенескә, эскелек, һуғыш-талаш, тиран ир хакимлыҡ иткән ғаиләләр яҙмыш ҡарамағына ташланған...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Хөкүмәтенең Өфөлә һәм Екатеринбургта ҡала инфраструктураһын үҫтереүҙе финанслауға 1,1 миллиард һумдан ашыу аҡса бүлеүе хаҡында билдәле булды. Өфөлә аҡсаның бер өлөшө Киров һәм Дим райондарында 23,4 саҡрым оҙонлоҡтағы һыу үткәргес һалыуға йүнәлтелә. Был иһә 16 миллион квадрат метр торлаҡ төҙөргә һәм биләмәне коммуналь инфраструктура менән тәьмин итергә мөмкинлек бирергә тейеш.

✓Башҡортостандан АҠШ-ҡа дөйөм ауырлығы 11 тоннанан ашыуыраҡ алты партия башҡорт балы ебәрелде. АҠШ Рәсәй балын күпләп һатып алыусыларҙың береһе булып тора, уҙған йылдарҙа Башҡортостандан да бал оҙатылды. "Татлы ризыҡ Бремен ҡалаһының (Германия) Quality Services International GmbH халыҡ-ара лабораторияһында тулыһынса тикшерелде, ул импортер илдең талаптарына тап килә", - тип хәбәр иттеләр матбуғат хеҙмәтенән.

✓Өфөлә "Ҡурай даны" икенсе милли телепремияһы тапшырыла. Заманыбыҙҙың төп геройҙарының исемдәре 3 декабрҙә киске сәғәт 7-лә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында "Ҡурай даны" икенсе милли телепремияһы менән бүләкләү тантанаһында иғлан ителә, еңеүселәр интернетта тауыш биреү юлы менән билдәләнә. Награда үҙ эшенең оҫталарына, һөнәрселәргә, аграрийҙарға, эшҡыуарҙарға, ижади лидерҙарға, шулай уҡ теге йәки был өлкәлә уңышҡа өлгәшкән ғаиләләргә тапшырыла.

✓"БашРТС" йәмғиәте октябрь йомғаҡтары буйынса йылылыҡ һәм эҫе һыу өсөн иҫәпләүҙе тамамланы. "Уҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда, дөйөм йорт йылылыҡ энергияһын иҫәпләү приборы булған йорттарҙа түләү хаҡы бер аҙ артты. Был 2021 йылдың октябрендә тыштағы һауа температураһының түбәнерәк булыуына бәйле, - тип белдерҙеләр "БашРТС"-та. - Иҫәпләгес булмаған йорттарҙа иһә норматив айлыҡ иҫәпләүҙәр йылытыу осоронда йәғни алдағы һигеҙ айҙа бер үк күләмдә була".

✓"Шүлгәнташ" дәүләт ҡурсаулығының музей-экскурсия комплексы үҙ эшен ваҡытлыса туҡтата - 2021 йылдың 8-21 ноябрендә экскурсиялар уҙғарылмай. Ҡунаҡ йорттары ла эшләмәй. Бындай ҡарар Бөрйән районындағы ҡатмарлы эпидемиологик хәлгә бәйле ҡабул ителде. Комплекстың эш режимына үҙгәрештәр индергәндә ҡурсаулыҡ хакимиәте был хаҡта үҙенең рәсми сығанаҡтарында хәбәр итәсәк.

✓ *Әле Силәбе өлкәһе менән сик башлыса урмандар, һыу сығанаҡтары һәм өлөшләтә ауыл хужалығы биләмәләре аша үтә. Совет власы осоронда аҫаба башҡорт ерҙәре күршеләргә күскән.*



ҠЫҪҠАСА

# ЯҢЫ КҮПЕР АСЫЛДЫ

✓ **Хәбәр ителеүенсә, баш ҡалабыҙ Өфөнөң көньяҡ ҡапҡаһы булған Ағиҙел йылғаһы аша яңы күпер файҙаланыуға тапшырылды.** Объектты асыуҙа БР Башлығы Радий Хәбиров, ҡала хакимиәте башлығы Сергей Греков, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Павел Качкаев, шулай уҡ подрядсы ойошмалар етәкселәре ҡатнашты. Яңы күпер хәрәкәткә тағы ла өс һыҙат өҫтәне. БыҒаса ике күперҙән тәүлегенә 125 мең автомобиль үтһә, хәҙер уларға көсөргәнеш бер ни тиклем кәмейәсәк. Объект үҙенең технологик үҙенсәлектәре йәһәтенән уникаль. Уны хәрәкәттә ятмайынса ике күпер араһында төҙөнөләр. Оҙонлоғо - 688,8 метр. Дөрөҫ ҡулланғанда һәм тейешенсә хеҙмәтләндереп торғанда яңы күперҙең хеҙмәт итеү осоро 100 йыл тип гарантиялана, әммә ғәмәлдә был мөҙҙәт тағы ла оҙағыраҡ булырға ла мөмкин. Яңы күпер "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" милли проекты үтәлеше барышында төҙөлдө. Уның дөйөм хаҡы 3,5 миллиард һум тәшкил итә.

✓ **Ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәре көнөндә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Уңыш-2021" конкурсының 20 еңеүсеһенә Lada Niva автомобиле асҡыстарын һәм сертификаттар тапшырҙы.** "Быйылғы ҡоролоҡ ауыл хужалығының бәкәленә һуҡты, шуға ҡарамаҫтан, беҙ ауыл сәнәғәтенә ярҙам күрһәтәбеҙ, һуңғы йылдарҙа аграр техника паркын яңыртыуға мөһим әһәмиәт бирәбеҙ, йыл һайын 300 яңы трактор һәм комбайн һатып алабыҙ. Былтыр 10 миллиард һумлыҡ техника алһаҡ, быйыл был маҡсатта 8,5 миллиард һум тотонолдо. Ауылдар бындай масштабты күптән күргәне юҡ ине", - тине Радий Хәбиров. Төбәк етәксеһе шулай уҡ республика агросәнәғәт комплексына ярҙам күрһәтеүҙе дауам итәсәген, ә ауыл халкының дәүләт программалары буйынса тейешле субсидиялар алаҫаһын белдерҙе. Декабрҙә 2020 йылға бурыс буйынса иҫәп-хисап эшләү планлаштырыла. Уңыш йыйыуҙа иң яҡшы күрһәткестәргә өлгәшкән механизаторҙар һаны йылдан-йыл арта бара. 2019 йылда сарала 420 кеше ҡатнашһа, былтыр был һан 460 була. Быйыл иһә еңеүсе исеменә 490 механизатор көс һынаша. Улар араһында белем биреү учреждениелары студенттары ла бар.

✓ **Рәсәйҙә 8 ноябрҙән вакцинация тураһында яңы сертификаттар индерелә. Яңы сертификат рус һәм инглиз телдәрендә электрон форматта автоматик рәүештә тултырыла.** Был прививканан һуң өс көндән дә һуңға ҡалмайынса башҡарылырға, ә элекке сертификаттар 2022 йылдың 1 мартына тиклем үҙгәртелергә тейеш. Яңы сертификатта тулы исем-шәриф, тыуған көн, енес, адрес, страховка номеры, медицина страхоукалау полисы, документ тултырылған көн күрһәтелә. Шулай уҡ унда ревакцинация, прививка яһатырға ярамауы, COVID-19 сирен үткәреү тураһында мәғлүмәт була. Бынан тыш, сертификатта QR-код өсөн урын ҡарала. Ауыл ерендә йәки алыҫ биләмәләрҙә йәшәгәндәргә документты Рәсәй субъектының һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге башҡарма властары тапшырырға тейеш. Рәсәй граждандары өсөн коронавирусҡа ҡаршы прививка тураһында сертификат һәм QR-код бер йыл урынына алты ай ғына ғәмәлдә була.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЕРҘӘРЕБЕҘ КИРЕ ҠАЙТА



**Рәсәй Федерацияһы субъекттары - Силәбе өлкәһе менән Башҡортостан Республикаһы араһындағы сиктәрҙе билдәләүҙе һүрәтләү тураһындағы килешеүгә ярашлы, Силәбе өлкәһе Башҡортостанға сиктәш территорияның бер өлөшөн республикаға ҡайтара.**

"Башҡортостан менән Силәбе өлкәһе сигендә республика өсөн ҙур тарихи әһәмиәткә эйә территория бар. XVIII быуатта был урындарҙа Тәкәй - башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаев тыуған ауыл булған, - ти БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. - Фәнни донъяла уның аныҡ урыны тураһында һаман да бәхәстәр бара. Мәғлүм булыуынса, 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышынан һуң Шайтан-Көҙәй улусының барлыҡ ауылдары ла тиерлек яндырылған. Шуға ҡарамаҫтан, документтар һәм археологик табыштар эҙләнеү даирәһен тарайта. Ғалимдар тарихи әһәмиәтле ерҙәр Силәбе өлкәһе менән сиктәш территорияны ла үҙ эсенә алған, тип иҫәпләй. Күршеләр менән фекер алышыуҙар һәм кәңәшләшеүҙәрҙән һуң был ерҙәрҙе Башҡортостанға биреү тураһында килешеүгә өлгәшелде".

Салауат районының өлөшләтә сит өлкәлә урынлашҡан Первомайский ауылы ла тулыһынса Башҡортостан сигенә ҡайтарыла, тип белдерҙеләр Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығында. Әле Силәбе өлкәһе менән сик башлыса урмандар, һыу сығанаҡтары һәм өлөшләтә ауыл хужалығы биләмәләре аша үтә. Совет власы осоронда аҫаба башҡорт ерҙәре күршеләргә күскән, Балаҡатай, Ҡыйғы, Салауат, Нуриман, Иглин, Архангел, Белорет, Әбйәлил, Баймаҡ райондары, Сибай ҡалаһы Силәбе өлкәһе менән сиктә тороп ҡалған. Әбйәлил районы хәҙер Магнитогорск агломерацияһына инә.

Шулай итеп, ике субъект араһында 1330 километрға һуҙылған административ-территориаль сикте билдәләү тамамланған. Яҡтарҙың фекер айырмалығы юҡ. Юғары дәүләт органдары алып барылған эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә Килешеү төҙөлгән. Хәҙер ул төбәк законы менән раҫланырға тейеш. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары бындай ҡануниды яҡын арала үтәсәк пленар ултырышта ҡараясаҡ. Республиканың Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы Силәбе өлкәһе менән яңы сиктәр буйынса закон проектын әҙерләй.

фекерҙәмен. Әгәр беҙ хәлгә иғтибар итмәһәк, Аҡ йорт алдында ҡом сығара башларҙар", - тине Радий Хәбиров.

Ҡырмыҫҡалы районында үткән халыҡ йыйынында ҡатнашыусы Хөкүмәт вице-премьеры Азат Бадранов: "Халыҡ ғәҙел асыулана, тип әйтә алам, күлдең әһәмиәте бик ҙур, был - күптәрҙең ял итеү урыны, районда иң ҙуры. "Ибраһим" ойошмаһы 2015-2018 йылдарҙа уҡ лицензиялар алған, район хакимиәте сәнәғәт үҫеше, завод төҙөү, ҡырсынташ сығарыу өсөн башҡа урындар ҙа тәҡдим иткән, ләкин компания әлегә баш тарта. Ведомство-ара комиссия район хакимиәтенә күлдең һаҡлана торған объект булыуы тураһында статус бирергә тәҡдим итте", - тип билдәләне.

Радий Хәбиров республиканың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Урал Искәндәровты ведомствоның ошо йүнәлештә һүлпән эшләгәне өсөн тәнҡитләне. "Ҡырмыҫҡалы районынан бик күп ялыуҙар килә, бөтә районды аҡтарып сыҡҡандар. Беҙгә карьерҙар кәрәк, әлбиттә, республикала ҙур юл төҙөлөшө алып барыла. Ләкин бөтә эштәр лицензияларға ярашлы алып барылырға, бөтә шарттар үтәлергә тейеш", - тине Башҡортостан Башлығы. Республика етәксеһе Ер аҫтын файҙаланыусылар эшмәкәрлеге мәсьәләләре һәм ер аҫтын файҙаланыу өлкәһендә хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеү буйынса ведомство-ара комиссияһына Ҡырмыҫҡалы районын контролгә алырға ҡушты. Ике айҙан экология министры Ҡырмыҫҡалы районында ниндәй эштәр башҡарылғаны хаҡында мәғлүмәт еткерергә бурыслы. Иглин, Өфө һәм башҡа райондар ҙа иғтибар үҙәгенә алына.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# КҮЛДЕ ҺАҠЛАРҒА!

**Ҡырмыҫҡалы районында Оло Талпаҡ күлендә карьер эшкәртеүгә ҡаршы йыйылыш үтте. Урындағы халыҡ райондың "Ҡыҙыл китап"ҡа ингән флора һәм фауна булған иң ҙур күлен эшкәртергә йыйыныуҙары менән риза түгеллеген белдерҙе.**

Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ҡырмыҫҡалы районының Оло Талпаҡ күле янында бер ниндәй ҙә карьер булмай, тип белдерҙе һәм Хөкүмәт премьер-министры урынбаҫары Азат Бадрановҡа пробеманы юридик яҡтан хәл итеү юлын табырға ҡушты. "Бындай объекттарға тейергә ярамай, тигән

# ЮЛДАР КҮҘӘТЕЛӘ

**Республикала федераль трассаларҙа 3 саҡрым һайын фотовидеотеркәү камералары ҡуйыла.**

Быйыл туғыҙ айҙа Башҡортостанда автоһәләкәттә 353 кешенең ғүмере өҙөлгән. Тағы 3 302-һе төрлө йәрәхәттәр алған. Республика Дәүләт автоинспекцияһы начальниғы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Владимир Севастьянов һүҙҙәренсә, үлемесле юл-транспорт ваҡиғаларының төп сәбәбе - автомобилдәрҙең бәрелешеүе һәм йәйәүлеләрҙе тапатыу. "Ун ҡалала һәм районда авариялар, ә 24 муниципалитетта кешеләр үлеменә килтергән авариялар һаны артҡан. Федераль трассаларҙа үлемесле аварияларҙың артыуы борсой, - тип билдәләне Севастьянов. - Хәлвәҡиғалар ял алдынан һәм эшләмәгән көндәргә тура килә. Быйыл ғына 11,5 мендән ашыу кеше рулдә иҫерек килеш тотолған. Уларҙың ғәйебе буйынса 256 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, һөҙөмтәлә 54 кеше һәләк булған, 338-е йәрәхәттәр алған".

Билдәләнеүенсә, юл-транспорт ваҡиғаларының күпселеге Өфөлә, Баймаҡ, Белорет, Туймазы, Ишембай райондарында, Сибайҙа һәм Октябрьскийҙа теркәлә. Аварияларҙы кәметеү буйынса Радий Хәбиров етәкселегендәге кәңәшмәлә белгестәр хәбәр итеүенсә, юлдарҙа үлем осраҡтарын иҫкәртеү өсөн светофорҙар, билдәләр, ҡоймалар, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы фотовидеотеркәү комплекстары ҡуйыла, япма ремонтлана. Быйыл федераль юлдарҙа 800 камера монтажлана, был ғәмәлдәгеләре менән бергә 1 800 комплекс була. Бынан тыш, федераль трассаларҙа 100 өҫтәмә фотовидеотеркәү комплексы ҡуйылды. 2022 йылдың 1 мартына тиклем тағы ла ошондай 50 камера урынлаштырыла. "Республикалағы федераль трассаларҙа 2022 йылдың башына өс саҡрым һайын юл ҡағиҙәләрен боҙоуҙарҙы теркәү комплекстары торорға тейеш", - тине Башҡортостандың Транспорт дирекцияһы етәксеһе Мансаф Низакаев.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров иҫерек водителдәр менән көрәшеү буйынса мәғлүмәт-аңлатыу эштәрен көсәйтергә һәм юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен үтәүҙе контролдә тоторға ҡушты.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Дим районында Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранты иҫәбенә көрәш һәм алыш төрҙәре буйынса яңы спорт залы асылды. Унда насар ишетеүсе (һаңғырау) балалар өсөн бүлексә лә бар. Әле спорт залында һаңғырауҙар өсөн дзюдо секцияһы эшләй башлаған, киләсәктә каратэ секцияһын асыу планлаштырыла, сөнки бында 4 спорт төрө: дзюдо, каратэ, бокс, кикбоксинг буйынса 8 тренер эшләй.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтендә йәмәғәт транспортында пассажирҙар өсөн QR-код индереү мәсьәләһе ҡаралы. "Ҡарарҙы республиканың оператив штабы ултырышына сығарабыҙ", - тине Өфө мэры Сергей Греков ҡала хакимиәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә. Бынан алда Дөйөм Рәсәй автомобиль транспорты хеҙмәткәрҙәре профсоюзының республика ойошмаһы ҡала мэрияһына йәмәғәт транспортында коронавирусҡа ҡаршы вакцинация тураһында сертификаттарҙы һәм QR-кодтарҙы тикшерергә кәрәк, тигән тәҡдим менән мөрәжәғәт иткәйне.

✓Өфөнөң 17-се клиник дауаханаһында коронавирус йоҡторған 16 бала дауалана. Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин хәбәр итеүенсә, яңы тыуған өс сабый - ауыр хәлдә реанимацияла, башҡа балаларҙың хәле тотороҡло. Йөклө ҡатындарға 12-се аҙнанан прививка яһатырға мөмкин, шулай уҡ ауырға ҡалғансы прививка эшләтергә тәҡдим итәлә, тип тә билдәләне министр. "Анализ күрһәтеүенсә, вакцина яһатҡан әсәнән тыуған сабыйҙарҙа антиматдәләр бар", - тине министрлыҡ етәксеһе.

✓"Мега" сауҙа үҙәгендә йәнә күсмә вакцинация пункты асылды. Эш ваҡыты - көндөҙгө сәғәт 2-нән киске 8-гә тиклем. Бында табип, прививка эшләү, прививкаланғандарҙың хәлен күҙәтеү бүлмәләре бар. Пункт медицина хеҙмәткәрҙәре Республика мәғлүмәт аналитика системаһына һәм Федераль регистрға мәғлүмәттәр индерә алһын өсөн интернет менән тәьмин ителгән.

✓Өфөнөң Салауат Юлаев майҙанында пиксель шыршыны - байрамдың төп символын ҡуйыуға әҙерлек эше башланды. Шыршының бейеклеге - 32 метр. Белгестәр әйтеүенсә, бындай конструкцияны йыйыу өсөн 10-14 көн кәрәк. "Өфөнөң барлыҡ байрам майҙансыктарының исемлеге төҙөлә һәм ноябрь уртаһына раҫлана", - тип хәбәр иттеләр баш ҡала хакимиәтенән.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЯҢЫ ЙЫЛҒА ӘҘЕРЛӘНӘБЕҘ

**Ноябрь каникулдарынан һуң ҡала хакимиәтендә сираттағы оператив кәңәшмә үтте. Билдәләнеүенсә, ошо бер аҙна эсендә республикала ла, баш ҡалала ла әһәмиәтле ваҡиғалар булған. Уларҙың иң мөһиме, әлбиттә, Ағиҙел йылғаһының ике күпере араһында һалынған яңы күперҙең сафҡа индерелеүе.**

Төҙөләүселәр, проекттар тигәндән, бөгөн баш ҡалала "Сифатлы хәүефһеҙ юлдар" милли проекты сиктәрендә эре капитал һалыуҙы талап иткән проекттар тормошҡа ашырыла. Был хаҡта Төҙөләш, юлдарҙы һәм яһалма ҡоролмаларҙы ремонтлау буйынса идаралыҡ начальнигы Константин Паппе һөйләне. Быйыл, мәҫәлән, 28 километр автомобиль юлдары норматив торошҡа килтерелгән, был 163000 квадрат метр асфальт-бетон ҡатламы менән ҡапланған тигән һүҙ. Яңы түшәлгән юлдарға 2000 квадрат метр майҙанда термопластик билдә һалынған.

Шулай уҡ кәңәшмәнең көн тәртибендә эпидемиологик хәл төп мәсьәлә булып торҙо. БР буйынса Роспотребнадзор идаралығы етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина белдереүенсә, коронавирус инфекцияһы менән сирләүселәр һаны 27 меңдән ашып китһә, шулай уҡ миҙгел сире булып һаналған ОРВИ менән ауырыуҙың эпидемиологик сиге үтелгән. Ҡала хакимиәтенең эштәр идарасыһы Әлфирә Баҡыева билдәләүенсә, Өфөлә ковидҡа ҡаршы вакцинаның беренсе компоненты граждандарҙың 76 проценты алһа, икенсе компонентын 61 процент алған. 60 йәште үткән һәр икенсе кеше вакцина яһатҡан. Эшләп йөрөүселәрҙең 79 проценты прививкалинған. Әйткәндәй, каникул осоронда 45 меңдән ашыу ойошма һәм учреждениела Роспотребнадзорҙың ковидҡа ҡаршы сикләүҙәре һәм талаптарының үтәлеше тикшерелгән, 1865 ҡағиҙә боҙоу осрағы асыҡланған, 1147 протокол төҙөлгән. Йәмәғәт туҡланыуы ойошмаларының һәм күңел асыу учреждениеларының киске 11-ҙән иртәнге 6-ға тиклем ябылыуы тураһындағы 28 октябрҙә ҡабул ителгән талапҡа 141 ойошма әләгә. Улар буйынса 1179 тикшереү үткәрелгән һәм 55 талап боҙоу осрағы асыҡланған, өс административ протокол төҙөлгән. Шулай уҡ 5 ноябрҙән йәмәғәт транспортында битлек режимын һаҡлауҙы тикшереү буйынса эшмәкәрлек көсәйтелгән.

Шул уҡ ваҡытта янғынға ҡаршы көрәш хеҙмәте янғын хәүефһеҙлеге тураһында иҫкәртә башланы, сөнки ут менән һаҡһыҙ эш итеү, йылытыу ҡорамалдарын ҡулланыу ҡағиҙәләрен боҙоу янғындың төп сәбәбе булып тора. Әйткәндәй, быйыл Өфөлә янғындар былтырғыға ҡарағанда 5 процентҡа кәмерәк күҙәтелгән (1861) һәм быны халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барыу һөҙөмтәһе тип билдәләргә мөмкин.

Тағы ла: баш ҡалала Яңы йыл сараларына әҙерлек башланды.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ЙӘШТӘР ҺҮҘЕ

# БАШҠОРТСА...

## дөрөҫ һөйлә, дөрөҫ яҙ

**Башҡортса дөрөҫ һөйләү, матур яҙыу оҫталығы һәм быныҡ киң мәғлүмәт сараларында сағылышы тураһында белергә теләгән Башҡорт дәүләт университеты студенттары өсөн "Киң мәғлүмәт сараларында башҡорт теле" тигән курстар ойошторолдо. Өҫтәмә белемде башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетында алырға мөмкин.**

Өҫтәмә дәрестәргә быйыл факультеттың 13 студенты йөрөргә теләк белдерҙе, мин дә улар араһында. Декан Гөлфирә Абдуллина башланғысы менән ойошторолған курстарҙы уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫар Рәмилә Саньярова алып бара. "Һуңғы йылдарҙа БДУ-ның журналистика бүлегендә башҡорт төркөмөнә абитуриенттар ҡабул ителмәй ине. Был башҡорт телендәге киң мәғлүмәт саралары өсөн маҡсатлы рәүештә журналистар әҙерләү мөмкинлеге лә юҡ, тигән һүҙ. Ошо бушлыҡты тултырыу өсөн беҙ филология йүнәлешендә белем алыусы башҡорт бүлеге студенттарына тәғәйенләп курстар ойошторорға булдыҡ. Башҡорт журналистикаһы өлкәһендә тәжрибә туплаған ағай-апайҙарының кәңәштәрен тыңлау, аҙна һайын улар менән күҙмә-күҙ аралашыу мөмкинлеге алыу йәһәтенән курстарҙың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ", - ти яңы эш йүнәлеше тураһында Гөлфирә Риф ҡыҙы.

Аҙнаһына ике тапҡыр үткән дәрестәрҙә төрлө жанрҙа башҡортса текстар яҙырға, уларҙы дөрөҫ баҫым ҡуйып һәм тыңлаусыны йәлеп итерлек итеп уҡырға өйрәнәбеҙ, киң мәғлүмәт саралары менән дә яҡынданыраҡ танышыу мөмкинлегебеҙ бар. Сөнки теория һәм практика беҙҙә әйҙәп алып барыла: дәрестең тәүге яртыһында башҡорт теле ҡағиҙәләрен тәрәндән өйрәнәбеҙ, икенсеһендә - матур яҙыу, тасуири уҡыу оҫталыҡтарына төшөнәбеҙ, республиканың алдынғы киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре менән осрашабыҙ. Әлегә дүрт дәрес үтте, әммә бик күп файҙалы мәғлүмәт алып өлгөрҙөк. Башҡортостан юлдаш телевидениеһы хәбәрсеһе Азат Ғәлиуллин, "Юлдаш" радиоһы алып барыусыһы Нурзилә Усманова һәм "Киске Өфө" гәзитенең яуаплы сәркәтибе Сәриә Ғарипова менән фәһемле әңгәмәләрҙә ҡатнаштыҡ. Ваҡытында Башҡорт дәүләт университетында белем алған һәм үҙ юлдарын тапҡан йәш белгестәр журналист һөнәре нигеҙҙәре, эш тәжрибәләре, кәңәштәре менән уртаҡлашты. "Өҫтәлмә белем алған студенттар менән танышҡас, киләсәктә тап киң мәғлүмәт сараларында журналист булараҡ үҫешер, күҙҙәре янып торған йәштәр барлығын күреп шатландым. Хатта киләсәгенде был өлкә менән бәйләмәһәң дә, үҙ өҫтөңдә эшләү, һәләттәреңде үҫтереү өсөн курстар яҡшы оҫталыҡ майҙаны. Сөнки һәр алған белем, тәжрибә, шәхестәр менән ҡыҙыҡлы осрашыуҙар эҙһеҙ үтмәй. Шулай уҡ курстарҙа телмәрҙе шымартыу, байытыу буйынса практик өләш булғанда тағы ла шәп булыр ине", - тине осрашыу һуңында "Юлдаш" радиоһы хеҙмәткәре Нурзилә Усманова.

Беҙ, "Киң мәғлүмәт сараларында башҡорт теле" курсында шөғөлләнеүселәр, дөрөҫ телмәр тотоу һәм яҙыу оҫталығы көндәлек тормошта ла бик кәрәкле булыуына инандыҡ. Был дәрестәр киң мәғлүмәт сараларында туған телебеҙ үҫенсәлектәрен ҡулланырға ғына түгел, журналистиканың ынғай һәм кире яҡтарын асыҡларға, киләсәктә үҙ юлыбыҙҙы дөрөҫ һайларға ла ярҙам итәсәк, тип ышанабыҙ.

**Нурия ҒИЛМУЛЛИНА,**
**БДУ студенты.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# МӘҒЛҮМӘТ ҺАТ ТА...

**Аҡса эшләүҙең төрлө юлы бар. Ләкин барыһы ла эре эшҡыуар булып китә алмай. Мин - шундайҙарҙан. Аҡса ла яратам, уны эшләүҙең төрлө юлдарын да табам, иллә мәгәр ҡағыҙ һәм отчеттарға батып, ҙур күләмдәге эшҡыуарлыҡҡа тотонорға теләк юҡ. Шуға күрә үҙемде әллә ни ыҙалатмай ғына, төп эшемә зыян килтермәйенсә генә, өҫтәмә килем алыу юлдарын һәр саҡ эҙләйем һәм табам.**

Хәҙер бөтә эшмәкәрлек интернетҡа бәйле, тиһәм дә хата булмаҫ. Мәғлүмәтте лә шунан ҡарайбыҙ, кәңәштәнәш тә уҡыйбыҙ, хатта кейәү йәки кәләште лә интернет мөмкинлектәрен файҙаланып тапҡандар бихисап. Әй интернетты аҡса эшләү әмәленә әйләндергәндәр тураһында әйтергә лә түгел - уларҙың һаны иҫәпһеҙ. Мин дә глобаль селтәрҙә йыш гиҙәм, әммә ваҡытымды бушҡа уҙғармайынса аҡса эшләйем.

Килем алыу юлым мәғлүмәти өлкәлә аралашсы ролен ҡайтып ҡала. Мәҫәлән, төҙөләш менән шөғөлләнгән эшҡыуарҙарға ла, ҙур күләмдә эшмәкәрлек алып барған компанияларға ла төҙөләш материалдары кәрәк. Һәр кем сифатлы, әммә шул уҡ ваҡытта иң осһоҙ материалдар эҙләй. Ләкин барыһының да интернетта ҡайҙа ниндәй материалдың осһоҙораҡ икәнен эҙләп ултырыу мөмкинлеге юҡ - уларға төҙөләштә алып барырға кәрәк, ә кемдер кәрәкле мәғлүмәтте эҙләй белмәй. Эйе, икһеҙ-сикһеҙ интернет киңлектә "аҙашмаҫ" өсөн дә һәләт кәрәк. Ошо саҡта мин уларға ярҙамға киләм. Ҡайһы урында (ҡалала, икенсе төбәктә, хатта башҡа илдә) төҙөләштә кәрәк иң осһоҙ материал хаҡында мәғлүмәт табам һәм уларға һатам. Яңылыш ишетмәнегеҙ, мәғлүмәт һатам - материалдың сифаты, хаҡы, алдыртыу юлдары, ниндәй күләмгә ниндәй ташлама яһаясаҡтарын, даими клиентҡа әйләнгәндә ниндәй бонус биреүҙәрен һәм башҡа төрлө мәғлүмәт йыям да клиентыма тәҡдим итәм. Күмәртәләп алыусы эшҡыуарҙар ошо юл менән үҙҙәренә кәрәкле материалды күпкә арзаныраҡ һатып алыу мөмкинлегенә эйә була. Шулай уҡ мин уларға әллә күпме буш ваҡыт "бүләк" итәм, йәғни бөтә мәғлүмәти тәьминәтте үҙ өҫтөмә алам. Хәҙер үҙемдең даими клиенттарым байтаҡ, уларҙан ишетеп, яңылары ла килеп тора.

Аҡса эшләүҙең был юлы бер аҙ ваҡыт, эҙләгән материалды яҡшы белеүҙе (мәҫәлән, электр сымдарының ғына әллә нисә төрө бар), ныҡышмалылыҡ, интернетты һәйбәт белеүҙе, коммуникаль булыуҙы, яуаплылыҡ талап итә. Әгәр ҙә вәғәҙә иттең икән, килешелгән сәғәткә, өҫтөнә таш яуып торһа ла, тейешле мәғлүмәтте сығарып һалырға тейешһең. Шулай уҡ уңышҡа өлгәшеүҙең нигеҙендә кеше менән тиҙ генә уртаҡ тел таба белеү сифаты, үҙеңдең эшмәкәрлегеңде "һатыу" оҫталығына эйә булыу ҙа ята.

Мәҫәлән, ошо арала ғына Өфөләге төҙөләш менән булыусы ҙур компанияға электр сымдарын һатып алыуҙың иң отошло урыны тураһында мәғлүмәт һаттым. Был килешеүҙән алған килем 5 мең һум тәшкил итте. Минеңсә, буш ваҡытта ғына шөғөлләнгән эшмәкәрлек өсөн әҙ аҡса түгел.

Әйткәндәй, был шөғөлдә тик Өфөлә генә ҡулланырға була, тип уйлау төптө хата. Әлеге лә баяғы ҡул аҫтында интернеты булған компьютер, ноутбук йәки телефон булһа, әллә ҡайҙа йәшәп шөғөлләнергә мөмкин. Таныштарға тәҡдим итеп ҡарарға була, унан инде, бер аҙ тел үткерләнгәс, ҙур баҙарға ла юл асыла.

**Райман МӨХӘМӘТЙӘНОВ.**
**Өфө ҡалаһы.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Невроз

❖ Был ауырыуҙан халыҡ дауаһы көн дә ашарҙан алда ярты стакан үлән төнәтмәһе эсергә кәңәш итә. Уны әҙерләү өсөн 20 грамм бөтнөк япрағы, 25 грамм валериана тамыры, 50-шәр грамм һары ҡандала үләне (донник лекарственный) һабағы һәм энәлек (боярышник) сәскәһе кәрәк. Йыйылманың 2 ҡалағына 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, төнәтергә һәм һөҙөргә.

### Нервылар ҡуҙғығанда

❖ Цикорий сәскәһенән әҙерләнгән сәй тынысланырға ярҙам итә, ул йөрәк ритмын йайлата. 2 ҡалаҡ ваҡланған цикорий үләненә (сәскәһе менән бергә) ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минут талғын утта йәки быуҙа тоторға. Һыуынғансы төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр яртышар стакан йылымыслатып эсергә.

### Һуған ҡабығы

❖ Бөйөр һәм бөйәл ҡыуыҡында таштарҙан яҡшы ярҙам итә. Дауаны әҙерләү өсөн бер ус һуған ҡабығына 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, талғын утҡа ҡуйып, саҡ ҡына ҡайнай башлағас уҡ алырға. Шунан һыуынғансы төнәтеп, һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр 100-әр мл эсергә. Был рәүешле дауаланғанда хәл 3-4 көндән яҡшыра башлай, шулай ҙа үҙегеҙҙе нисек тойоуға ҡарап тағы бер нисә көн төнәтмә эсеүҙе дауам итергә була. Һуған ҡабығы төнәтмәһе оло йәштәгеләрҙең тире торошон да яҡшырта.

### Ҡурылдай астмаһы

❖ 100 грамм йорт раузаһы таж япраҡтарын һәм 10 бөртөк юл япрағын ваҡлап ҡушырға, ваҡ ҡырғыстан үткәрелгән ярты килограмм ҡабаҡ һәм 1 литр ҡоро ҡыҙыл шарап өҫтәргә. Әҙерләмәне ҡайнар хәлгә еткерергә, 1 тәүлек төнәтергә, һөҙөргә - бәлзәм әҙер. Ҡурылдай астмаһынан ашарҙан алда көнөнә 5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ йылытып эсергә. Бәлзәмде һыуыҡҡыста һаҡларға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА**
**әҙерләне.**

✓ *Әруахтарыбыҙҙың тереклектә ҡылған гонаһтарын кисереүен һорап Аллаһ Тәғәләгә доға ҡылыу, мохтаж кешеләргә улар исеменән саҙаҡа биреү ҙә Бәйғәмбәребеҙ тарафынан бойоролған, сауаплы ғәмәлдәр.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Башҡорттарҙың йорт йыһазлау ғәҙәттәре малсылыҡ менән көн күргән күскенселәргә хас торлаҡта - тирмә өй, тирмәлә яралған. Йәй генә түгел, һыуыҡ осорҙа ла тирмәлә йәшәгән саҡтарҙа уның ҡап уртаһында, сағыраҡ тапҡырында таштарҙан йәки балсыҡтан яһалған түңәрәк усаҡ урынлашҡан, уның өҫтөнә ҡаҙан өсөн таған аҫылған. Ишек ҡаршыһында, усаҡ артында, һандыҡтар эргәһендә ҡәҙерле ҡунаҡтар өсөн урын - түр урынлашҡан.

Тирмәнең иҙәне кипкән үлән, үрелгән септә, өҫтөнән кейеҙ менән ҡапланған. Ҡунаҡтар өсөн тәғәйенләнгән өлөшөндә һуғылған йөн балаҫтар, һырылған түшәктәр йәйелгән, яҫтыҡтар һалынған. Кәрәк-яраҡ тирмәнең ситe буйлап теҙелгән. Кейем йә мөлкәт һалынған һандыҡ өҫтөнә йәки махсус эшләнгән тәпәш аҫлыҡ - аяҡтарҙа түшәкте көндөҙгөгә ыҡсым ғына итеп өйөп ҡуйғандар: һырылған юрған һәм түшәктәр, кейеҙгә ҡапланған һуғылған балаҫтар, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн нағышланған сергеләр, яҫтыҡтар. Байҙарҙың бындай тартҡы менән тартып ҡуйылған урындары бер нисә булған. Ашарға йыйылған мәлдә һандыҡтар эргәһенә ашъяулыҡ йәйгәндәр, батмусҡа ҡуйылған самауыр ултыртылған, семәрле таштабаҡ йәки бәләкәй вазаларҙа бал, май ҡуйылған. Соҡоп эшләнгән ҙур табаҡтарҙа аш алып килгәндәр. Ҡунаҡтарҙы зауыҡлы ағас һауыттарға ҡойолған ҡымыҙ менән һыйлағандар.

Тирмәнең уң яғы хужалыҡ өсөн тәғәйенләнгән. Бында лар, бәләкәй шкаф, ҡатыҡ һәм айран тәпәндәре, ҡабыҡ ҡаптар, ишелгән кәрзиндәрҙә йомортҡа һәм һөт ризыҡтары һалынған тәпәш кәштәләр теҙелгән. Төрлө ҙурлыҡтағы ағас һауыттарҙа он, ярма һәм башҡа әйберҙәр һаҡланған. Был өлөш ғәҙәттә ҡатындар яғы тип йөрөтөлгән һәм туҡылған йәки ситса шаршау менән бүленгән. Тирмәнең килгән кешегә асыҡ яғында кирәгә буйлап кейем, ишек эргәһендә эйәрҙәр, егеү кәрәк-ярағы һәм башҡа хужалыҡ әйберҙәре эленеп торған.

XIX быуатта башҡорт йәйләүҙәрендә булып киткән ғалимдар боронғо ғәҙәттәргә ярашлы биҙәлгән тирмәләрҙе күргән. Уларҙы Европа кешеһе өсөн ғәҙәти булмаған көмбәҙле торлаҡта еңеллек һәм иркенлек тойолоуы ғәжәпләндергән.

"Тирмә... - ярым шар формаһындағы һәм эс яҡтан көмбәҙ түшәмле киң генә түңәрәк зал рәүешендәге күсермәле йорт", - тип яҙа үткән быуат урталарында этнограф П.И. Небольсин. Был торлаҡ ысынлап та иркен булған - диаметры 5-тән 8 метрға тиклем, кирәгәнең оҙонлоғо 2 метрға тиклем еткән, унан уҡ - көмбәҙ хасил иткән ағастар һуҙылған.



**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

**Ике йылға яҡын элек башланып, бөгөнгө көндә бөтә Ер шары халҡын тетрәтеп килгән тажзәхмәт сире донъялағы әллә күпме кешенең ғүмерен ҡыйҙы инде. Сәйер, әммә әҙәм балаһы һәр нәмәгә күнегеүсән. Баштараҡ Ҡытайҙа йә Ҡушма Штаттарҙа көнөнә фәләнсә кеше шул сирҙән үлгәнлеге хаҡында ишетеп, аптырап төшә инек. Ә хәҙер шундай статистик һандарға иғтибар ҙа итмәйбеҙ тиерлек. "Рәсәйҙә бөгөн бер меңдән, ә Башҡортостанда утыҙҙан ашыу кеше үлде", тигәнерәк хәбәрҙәрҙе беҙ "Фәләнсә кеше донъяға килгән" тигән һымағыраҡ ҡына ҡабул итә башланыҡ.**



# МӘЖЛЕСТӘРГӘ ЙӨРӨМӘЙ ТОРОҒОҘ!

Хөкүмәтебеҙ әленән-әле сикләү режимы индереп тора тороуға. Күптәребеҙ ул сикләүҙәрҙе үтәп йөрөргә тырыша. Әммә сир йоҡтороусылар һаны ҡабаттан арта башлауы һиҫкәндерә. Инфекцияға ҡаршы көрәш тик табиптарҙан ғына түгел, ә барыбыҙҙан да тырышлыҡ талап итеүе тураһында бик уйлап еткермәйбеҙ, ахыры. Эшкә, уҡыу йорттарына, мәктәпкә йөрөүҙәрҙе туҡтатыу - оло проблема булыуы билдәле. Һәр төрлө предприятиеларҙың эштәрен бер аҙ ғына ваҡытҡа сикләү ҙә илебеҙҙә сәнәғәт үҫешенең аҡһай башлауын тойҙора. Шуға ҡарамаҫтан, хөкүмәтебеҙ һәр төрлө каникулдар ҙа уйлап сығара. Быны һәммәбеҙ дөрөҫ аңларға һәм һәр йәмәғәт урындарында битлек режимы, башҡа сикләүҙәр һаҡланып килеүен тейешенсә ҡабул итергә тейешбеҙ.

Мине тағы бер һорау ныҡ борсой: ни өсөн ауылдарҙа, ҡалаларҙа ла күп кенә милләттәштәребеҙ һаман булһа ҡунаҡмунаҡ йыйып, төрлө мәжлестәр үткәреүҙе кисектереп тормай? Туғанлыҡ бәйләнештәрен һаҡлау, яҡындар менән аралашыу, һис һүҙһеҙ, файҙалы һәм сауаплы. Әммә пандемия осоронда бына шундай йыйындарҙы туҡтатып торорға кәрәк ине ул. Берәй яҡының вафат була икән - туғандар, ауылдаштар йыйылышып, уны һуңғы юлға оҙатыу тигән йоланы, әлбиттә, урап үтеп булмай. Ә бына яҡынынды ерләгәндән һуң тағы ла аяттар уҡытыу өсөн йыйылышып ултырыуҙар әлеге сирҙең артабан да таралыуына булышлыҡ итеүсе сәбәп булыуы мөмкин икәнен онотмаһаҡ ине.

"Аяттар ҙа үткәрмәй башлаһаҡ, беҙҙең мосолманлығыбыҙҙан нимә тороп ҡала?" тип ғәжәпләнеүселәр ҙә булыуы мөмкин. Эш тап ана шунда ла: ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күптәр мосолман булыу тик шунан ғына ғибәрәт тип һанай, әммә мосолманлыҡтың иң мөһим, иң кәрәк фарыздарын танырға теләмәй. Ә бит үҙеңде мосолман тип һанайһың икән, иң беренсе нәүбәттә Ислам дине терәктәрен инҡар итмәү, йәғни намаҙ, ураҙа кеүек фарыз ғәмәлдәрҙе үтәү кәрәк. Ошо хаҡта һүҙ алып бара башлаһаң, күптәрҙең хатта тыңлағыһы ла килмәй. Сөнки дин ҡанундарын белмәүселәр күпселек, ә белергә теләмәүселәр - тағы ла күберәк. Әлбиттә, әруахтарыбыҙҙың тереклектә ҡылған гонаһтарын кисереүен һорап Аллаһ Тәғәләгә доға ҡылыу, мохтаж кешеләргә улар исеменән саҙаҡа биреү ҙә Бәйғәмбәребеҙ тарафынан бойоролған, сауаплы ғәмәлдәр. Әммә уның өсөн йыйылышып ултырыу мотлаҡ түгел. Мәрхүм ата-әсәңә Ахирәттә яҡшы булһын тиһәң - өйөңдә генә ултырып, улар өсөн Раббыбыҙҙан һора (нисек һорарға белмәй икәнһең, ауыл имамынан өйрән). Мәрхүмдәрҙең йә үҙеңдең исемеңдән саҙаҡа бирергә уйлайһың икән - битлегеңде генә кейә һалып, яҡындағы мәсеттең йәшнигенә алып барып төшөр, йә булмаһа, ана шул Аллаһ йортон бағыусы хәҙрәттең үҙенә биреп кит. Сөнки мәсеткә кәрәк-яраҡ алыу, электрға, газға түләүҙәр барыһы ла ана шул имамдың өҫтөндә бит. Мәсет һәр саҡ хәйриә аҡсаһына мохтаж, тимәксемен.

Үлемесле сир яныбыҙҙа ғына йөрөп ятҡан ваҡытта үҙебеҙҙе ҡурҡыныс аҫтына ҡуймайыҡсы! Ғәҙәттә, ана шул мәжлестәргә тап оло йәштәгеләр йыйылыусан. Әлеге тажлы вирус та оло кешеләрҙе айырыуса "ярата" икәнен һәммәбеҙ ҙә беләлер, моғайын (һуңғы осор ул хатта йәштәрҙе лә аямай башланы). Ҡунаҡта ултырған кешеләр, әлбиттә, битлекһеҙ һәм бер-береһе менән яҡын аралаша. Шундағы егермеләгән кеше араһында бер генә сирле әҙәм булһа ла, барыһына ла ауырыу йоғоу ҡурҡынысы бар. Хәҙрәттәребеҙгә лә еңелдән түгел. Саҡырғас, әлбиттә, кеше һүҙен йығырға баҙнат итмәй, мәжлестәргә йөрөй инде улар, тип аңлайым мин үҙемсә. Хәтерегеҙҙәлер, былтыр яҙ көндәре хатта ирҙәр өсөн фарыз булған йома намаҙына мәсеттә йыйылыуҙы ла ҡуйып торҙоҡ. Һәр мосолман йома намаҙы урынына үҙ өйөндә өйлә намаҙы уҡыу менән генә сикләнде.

Бына шундай ҡурҡыныс янап тороуға ҡарамаҫтан, әле бында, әле тегендә кешеләрҙең юбилей, хатта туй табындарына йыйылыуҙарын ишетәһең. Туйһыҙ ҙа һин дә мин йәшәп алып китергә һәм уны күпмелер ваҡыттан һуң да үткәрергә була. Ана бит, былтырҙары миллиардлаған халыҡлы Ҡытай илендә ҡандай киҫкен тора ине ошо мәсьәлә. Нисек кенә ауыр булһа ла, улар үҙ хөкүмәте ҡуйған сикләүҙәр режимын тотҡас, хәҙер ул илдә бындай сир юҡ кимәлендә.

Бигүк ғәҙәти булмаған был мәҡәләмде бәғзеләрҙең оҡшатып етмәүен дә күҙаллайым. Әммә миңә ошо афәт ҡорбаны булғандар йәл. Йәндәй күргән балаларыңдың, балдан татлы ейән-ейәнсәрҙәреңдең үҫеүен, уларҙың шат уйнағандарын күреп, һөйөнөп ғүмер итә башлаған мәлдә генә үҙеңдең битарафлығың арҡаһында кинәт кенә сиргә һабышып, был донъяны ташлап китеүе ҡыҙғаныс бит. Ғәҙәттә, сирлеләр реанимация бүлегендә үлә, шунлыҡтан, һуңғы минутында янында ауыҙыңа һыу тамыҙып ултырыусы яҡындарыңдың була алмауы ла, кәфенләнмәгән көйө "ҡара пакетта" ерләнеүе лә үкенесле... Кәрәкмәгән шундай йыйындарҙан тыйылайыҡ, хөрмәтле яҡташтар! Ваҡытында вакцинацияланыу зарурлығы хаҡында ла онотмайыҡ.

**Айытбай ВӘЛИЕВ.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# МИН ҮҘЕМДӘ...

## башҡортлоҡто яратам



**Был көндәрҙә мин дә Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу сараһында ҡатнаштым һәм үҙемде башҡорт балаһы булараҡ тарихҡа теркәнем.**

Мин Мәскәүҙә йәшәйем һәм минең эргәмдә, дуҫтарым араһында урыҫ, татар, йәһүд, сыуаш һәм Рәсәйҙә йәшәгән башҡа милләт вәкилдәре бар. Оло ғорурлыҡ һәм тулҡынланыу менән үҙемде "Башҡортмон, ялан-бөрйән ырыуы вәкилемен" тип әйтәм һәм һәр ваҡыт хуплау һүҙҙәре ишетәм.

Минең тыуған яғым Көйөргәҙе районы Ялсыҡай ауылына ҡараған ялан-бөрйән ырыуының тарихына күҙ һалғанда, унда бик күп билдәле яҡташтарыбыҙҙы күрергә була. Улар араһында ҡурайсы, сәсән, яҙыусы, шағир, хеҙмәт һәм һуғыш геройҙары, йәмәғәт эшмәкәрҙәре бар. Мәҫәлән, ятраҡан яҙыусыларым Рәшит Солтәнгәрәев, Ғәлим Хисамов, башҡорт профессиональ музыкаһына нигеҙ һалыусы Ғәзиз Әлмөхәмәтов, шулай уҡ профессиональ башҡорт музыкаһын, айырыуса ҡурайҙы үҫтереүгә ҙур көс һалған Айрат Ҡобағошовтар - минең яҡташтарым. Был исемлектә шулай уҡ үҙемдең олатайымды, Социалистик Хеҙмәт Геройы Шәүәли Вахитовты ла телгә алыр инем. Уны ваҡытында бөтә ил яҡшы белде. Хәҙер ҙә Мәскәүҙә уны белгән кешеләрҙе йыш осратам.

Ҡыҫҡаса әйткәндә, башҡорттарҙың үҙҙәренең бай тарихы һәм мәҙәниәте, бөйөк үткәне, матур бөгөнгөһө һәм шулай уҡ үҙенә генә хас донъяға ҡарашы һәм ҡабатланмаҫ философияһы бар. Мин үҙемдә башҡортлоҡто яратам, үҙемдең туған телемде яратам, сөнки ул 4000 йыллыҡ тарихы булған легендар "Урал батыр" эпосын һаҡлаусы. Башҡорттоң ҡабатланмаҫ халыҡ йырҙары - оҙон көйҙө ҡурайҙа яңғыратырға яратам. Башҡорт теле - моң, ҡумыҙ, ҡурай теле бит ул! Ошондай тылсымдан нисек ситләшергә мөмкин!

**Марсель ВАХИТОВ,**
**РФ Федераль Йыйылышы Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитет аппараты етәксеһе урынбаҫары.**

✓ *Ҡытай хроникаларындағы "гэшу" тип аталып йөрөтөлгән ҡәбилә атамаһы башҡорттарҙың ҡошсо ырыуының боронғо төрки тамырҙарын күҙалларға мөмкинлек бирә.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ҠОШСОЛАР, ҺЫҘҒЫЛАР, ӨПӘЙҘӘР - ТӨНЬЯҠ БАШҠОРТТАРЫНАН БУЛАБЫҘ



Тарихи Башҡортостандың төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш зонаһында уртаҡ этник һыҙаттары менән башҡа бер ырыуҙарҙан айырылыбыраҡ торған башҡорт ырыуҙары формалаша. Улар араһында ҡошсо, һыҙғы һәм өпәй ырыуҙары бар, улар быуаттар дауамында территориаль яҡтан йәнәш йәшәп, тығыҙ этник бәйләнештә була. Батша Рәсәйендә ҡабул ителгән административ бүленешкә ярашлы, ошо ырыуҙарҙың аҫаба биләмәләре Ҡошсо (Кушчинская/ Кущинская), Һыҙғы (Сызгинская) һәм Өпәй (Упейская) улустары тип аталған. Был ерҙәр Башҡортостандың хәҙерге Мәсетле, Свердловск өлкәһенең Красноуфимск һәм Түбәнге Серге райондарына ҡарай. Төньяҡ зонала уларҙан башҡа Өфө-Шигер, Терһәк, Салйоғот улустары, Кама буйынан килгән ғәйнә башҡорттары шулай уҡ үҙҙәренең аҫаба ерҙәрендә көн итә.

Ҡошсо, һыҙғы, өпәй ырыуҙары төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының заманында үтә абруйлы һәм ҡеүәтле булған Әйле этник ырыуҙар берләшмәһенә (ҡәбиләһенә) инә. Шулай ҙа ҡошсоларҙың билдәле бер осорҙарҙа Ҡатай түбәһенә ҡарауы хаҡында ла тарихи документтар бар. Әммә, ошо дәүергә хас булғанса, рус хакимиәте һәр бер башҡорт ырыуын айырым, үҙаллы этник төркөм рәүешендә теркәп, ырыуҙар союзы (берләшмәһе) хаҡында әллә ни ентекле мәғлүмәт ҡалдырмаған.

Билдәле башҡорт тарихсыһы, этнограф Раил Ғүмәр улы Кузеев әле һүҙ барған төньяҡ башҡорттары ырыуҙары тарихы хаҡында байтаҡ ҡына мәғлүмәт туплай алған. Ғалим ҡошсо ырыуының тарихи тамырҙарын Үҙәк Азия тарафтарында формалашҡан боронғо төркиҙәр менән бәйләй. Ул "Тан-шу" ҡытай хроникаһында нушиби исемле этник берләшмәгә ингән 5 ҡәбиләнең береһе "гэшу" тип аталыуына иғтибар иткән, ул берләшмә Көнбайыш Төрки ҡағанытының (603 - 704 йылдар) төп өлөшөн тәшкил иткән "ун уҡлы төркиҙәр"ҙән була. Ориенталистика (Көнсығыш халыҡтарын өйрәнеү) өлкәһендәге билдәле тикшеренеүселәр Э.Шаванна һәм Лев Гумилёв ҡытайса гэшу тип аталған төрки ҡәүеменең боронғо төркиҙәрҙең Хойто-Тамир (Монголия) ташъяҙмаһында теркәлеп ҡалған кушу ҡәбиләһе исеменә тап килеүен билдәләйҙәр. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр фекеренсә, исеме аныҡ билдәле булмаған төрки хәрби юлбашсыһы тарафынан ташҡа соҡоп теркәтелгән руник яҙмаының бер өлөшөндә "... йылдың... туғыҙынсы айында Кушуйыла мин ҡолдар алдым...", тигән һүҙҙәр асыҡланған. Азия төркиҙәре тарихын бик ентекле өйрәнгән ғалим Л.Н. Гумилёв тарихи реконструкция алымы нигеҙендә был ташъяҙмала Билге ҡағандың басмылдарға һәм башҡа көнбайыш төрки ҡәүемдәренә хәрби поход менән барып, уларҙың баш ҡалаһы булған Бешбалыҡты алыуы хаҡында мәғлүмәт теркәлгән, тип иҫәпләй. Ғалим Хойто-Тамир ташъяҙмаһының үҙе асыҡлай алған вариантын да килтерә: "В год обезьяны (720) в седьмой месяц двадцать... к табгачам [имперцам] ходили. В девятом месяце года [того же] кушуйские черные головы я раздавил [прижал]; осенью на табгачей... пошел с войском. Так много блага... [тюрки?], воюя, да не будут разбиты".

Күренекле совет тарихсыһы А.Н. Бернштам да был ташъяҙмала теркәлгән ҡәүем атамаһының "Ҡушу ҡарабаштары" тигәнде аңлатыуы хаҡында яҙа.

Көнсығыш халыҡтары тарихында киң билдәле булған төрки юлбашсыһы Кюль-тегинға арналған Орхон ташъяҙмаһында бына шундай юлдар бар (руссаға тәржемәлә): "Сев на белого коня героя Шалчи (Алп Шалчи), он произвел атаку. Убил (многих) из народной массы тюргешей и покорил (оставшихся). Снова (или назад) двинувшись... он сразился с Кушу-тутуком, его мужей он всех перебил, его дома и имущество без остатка все доставил (себе)".

Бында ниндәйҙер бер төрки ҡәүеменең Кушу-тутук исемле яу башлығы хаҡында иҫкә алына. Тутук - төрки халыҡтарында билдәле булған титул, уның этимологияһын "тутмак" ҡылымы һәм "оҡ" йәки "уҡ" исеме аша еңел аңлатып була. Төркиҙәрҙә тутмаҡ - тотоу, оҡ/уҡ уҡты йәиһә ҡәүем, ырыуҙы аңлата. А.Н. Бернштам билдәләүенсә, "тутуктар - ырыу-ҡәбиләләрҙең арҙаҡлы заттары вәкилдәре". Мәғәнәһенә ярашлы, тутук - ырыу-ҡәбиләне "тотоп тороусы", йәғни, ырыу башы була. Тимәк, Кушу-тутук төрки ҡошсолары ҡәүеме юлбашсыһы булған.

Ошо мәғлүмәттәр боронғо ҡошсо ҡәбиләһенең Көнбайыш Төрки ҡағанатының баш ҡалаһы Бешбалыҡтан төньяҡтараҡ, Алтай тауҙарының көньяҡ һырттарында көн итеүе хаҡында фараз итергә ерлек бирә. Икенсе бер тарихсы Н.А. Аристов та Тяньшань ҡырғыҙҙары составында кущу (кошчу) атамалы этник төркөм булыуын иғтибарға ала. Билдәле булған тарихи сығанаҡтарға таянып, этнолог Р.Ғ. Кузеев та ошондай һығымтаға килә: "Әгәр ҙә кушчу (ҡошсо) этнонимын ҡытай сығанаҡтарындағы гэшу ҡәбиләһе менән идентификациялау дөрөҫ булһа, ул саҡта VI-VII быуаттарҙа ҡошсолар төркиҙәрҙең Урта Азиялағы экспансияһында ҡатнашып, Көнбайыш Төрки ҡағанатының бер берәмеге булып торған".

Йәнә, рус хакимиәте чиновниктары тарафынан төҙөлгән бер документта ҡошсо ырыуы башҡорто Көҙәш (Козяш) Рахманғолов "старшина Кушуйской волости", тип теркәлгән. Бында башҡортарҙың "ҡошсо" тигәне боронғо төркисә "кущу/кушчу" һәм әүәлерәк төҙөлгән рус документтарындағы "кушу"ға тап килеүен инҡар итеп булмай. Тимәк, Ҡытай хроникаларындағы "гэшу", төрки ташъяҙмаларындағы "кушу", тип аталып йөрөтөлгән ҡәбилә атамаһының рус сығанаҡтарындағы "кушу/кушчи" менән тап килеүе башҡорттарҙың ҡошсо ырыуының боронғо төрки тамырҙарын күҙалларға мөмкинлек бирә. Башҡорттарҙан башҡа, шул уҡ боронғо ҡәбиләнең ошо этноним менән аталып йөрөтөлгән этник төркөмдәре ҡырғыҙ һәм үзбәктәрҙең ырыу-ҡәбилә номенклатураһында ла бар.

Ҡошсо башҡорттарына биләгән территориялары бик яҡын булған тағы ла ике этник төркөм - һыҙғы (ҫыҫҡы) һәм өпәй ырыуҙары әлеге көнгә тиклем һаҡланып ҡалған. Рус документтарында улар биләгән аҫаба ерҙәр Һыҙғы (Сызгинская волость) һәм Өпәй (Упейская волость) улустарына ҡараған.

Р.Ғ. Кузеев фекеренсә, һыҙғы һәм өпәй ырыуҙары - башҡорт халҡының иң боронғо этник төркөмдәренең береһе, әммә уларҙың тарихи килеп сығышы хаҡында аныҡ ҡына мәғлүмәттәрҙе табыуы үтә ҡыйын. Шул уҡ һыҙғы ырыуының тәү тарихы буйынса яҙма сығанаҡтар ҡалмаған, шуға күрә был осраҡта бары тик археология, этнонимия, генография аша табылған мәғлүмәттәргә һәм риүәйәттәргә генә һылтанып була.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



## ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

1943 йылда 3-сө гвардия армияһы командующийы вазифаһын биләгән генерал-лейтенант Д.Д. Лелюшенко һуғыштан һуң "Москва - Сталинград - Берлин - Прага. Записки командарма" исемле хәтирәләр китабын баҫтыра. Ул ошо китабында 7-се гвардия корпусының Донбастағы фажиғәһе хаҡында ла иҫкә ала. Был осраҡлы хәл түгел. Корпустың, шул иҫәптән уның составында һуғышҡан 16-сы гвардия дивизияһының рейдтан сыҡҡанда аяуһыҙ күп юғалтыуҙарға дусар булыуында уның үҙенең дә, уның ҡул аҫтында үтә аҡрын хәрәкәт иткән башҡа частарҙың (уларҙың командирҙарының) туранан-тура яуаплылығын бер нисек тә инҡар итеп булмай. Хәйер, 1941 - 1942 йылдарҙа ла булдыҡһыҙ командирҙарҙың һуғыш шарттарында үҙҙәренең яугирҙарын тейешле кимәлдә ойоштора һәм идара итә алмауҙары арҡаһында йөҙәр меңләгән совет һалдаттары һәләк була, миллиондарса кеше әсиргә алына.

Күрәһең, ошо трагедия хаҡында иҫкә алып, Д.Д. Лелюшенко нисек булһа ла аҡланырға тырышҡан кеүек. Командующий бына нимәләр яҙа: "... Дошман бында бер туҡтауһыҙ яңы көстәрен, Манштейн яҙғанса, Ростов эргәһенән 1-се танк армияһының 17-се танк дивизияһын ғына түгел, ә 22-се танк һәм 304-се пехота дивизияларын һәм башҡа соединениеларын килтерҙе.

Дошмандың күпкә өҫтөн көстәре менән көсөргәнешле алыштар ҡыҙа барҙы. Корпусты һуғыш припастары һәм яғыулыҡ менән тәьмин итеп булырлыҡ өҙөклөк ябылды, корпус ҡамауҙа ҡалды. Әммә, ауыр хәлгә ҡарамаҫтан, атлыларҙың һуғышсан рухы һынманы. Беҙ, хәрәкәтсән отрядтар ярҙамында корпус менән бәйләнешкә инеп, уға һуғыш припастары һәм яғыулыҡ менән ярҙам итеү өсөн 6 көн дауамында саралар күрергә тырыштыҡ. Әммә дошман үҙенең танк соединениелары менән беҙҙең юлды япты. Ул саҡта 3-сө гв. армияһы бөләкәйләнде, өҫтәлмә көстәр килмәне һәм ял итә лә алманы. Дошман 7-се гвардия атлы корпусын танкылар һәм мотопехота менән ҡыҫа башланы һәм һауанан нык бомбаға тотто. Корпусты ҡотҡарыу өсөн тиҙ арала сара күрергә кәрәк ине.

Корпусты ҡамауҙан сығарыу һәм армияның төп көстәренә ҡушыуға рөхсәт һорағас, фронт командованиеһы, әгәр корпустың хәле насарая икән, ул саҡта партизан хәрәкәттәренә күсһен, тип яуап бирҙе. Әммә ошондай хәрәкәткә күсеү мөмкин түгел ине, сөнки корпус рейдта йөрөгән урын үтә асыҡ ине: урмандар ҙа, сауҡалыҡтар ҙа юҡ. Тик ҡайһы урындарҙа шахта коперҙары һәм терриконлар һерәйеп тора, етмәһә, ҡыш мәле".

17 - 18 февралдә корпус ҡаты алыштар алып барҙы. 16-сы гвардия дивизияһы (элекке 112-се Башҡорт дивизияһы) оборона тотҡан позицияларға дошман пехотаһы ябырыла. 60-сы гвардия полкы эскадрондары, дошман һалдаттары бик яҡын араға килеп етеүгә дәррәү ут аса, һөҙөмтәлә һуғыш яланында фашистарҙың 400-гә яҡын һалдат һәм офицеры яралана һәм һәләк була. Әммә немецтарҙың башҡа частары Дебальцево станцияһының төньяҡ ситендә оборона тотҡан 62-се атлы полкҡа ташлана. 2 полкҡа яҡын дошман һалдаттары беҙҙең яугирҙар оборона тотҡан позицияның бер өлөшөн баҫып алыуға өлгәшә, улар инде еңеү үҙҙәренең яғында, тип ышана. Әммә тап шул саҡта уларға беҙҙең реактив установкалар (катюшалар) көслө ут аса, немецтар сигенә, ә һуңынан уларҙың күбеһен 62-се полк эскадрондары юҡ итә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Һәр башҡорт "Сыңғыҙнамә дәфтәре" тураһында хәбәрҙарҙыр. Унда Сыңғыҙхандың барлыҡ бейҙәргә символдар биреүе тураһында бәйән ителә. Йәғни беҙ ошо булған символиканы геральдикала ҡулланабыҙ.*



ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

**Рәсәйҙә беренселәрҙән булып башҡорт ырыуҙары үҙҙәренең гербын эшләй башлауы һәм, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының уны юридик яҡтан нығытып ҡуйырға ниәтләүе тураһында барыбыҙ ҙа хәбәрҙар. Бөгөн герб беҙҙең өсөн дәүләтселек символы һәм ул дәүләтте таныу билдәһе лә. Ә бына ырыуҙар гербы ниндәй мәғәнәгә эйә? Рәсәй геральдистары советының идара ағзаһы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы Геральдика комиссияһы ағзаһы, тарих магистры, тарихсы-генеалог Кирилл ПЕРЕХОДЕНКО менән башҡорт ырыуҙары хаҡында әңгәмәләшәбеҙ.**

**Һеҙ геральдика менән шөғөлләнәһегеҙ һәм башҡорт ырыуҙарының тиҫтәнән артыҡ гербын эшләгәнһегеҙ. Ә ырыу гербтарын эшләү өсөн ҡануниәт базаһы бармы, ғөмүмән, эш нисек башланды?**

- Беҙҙең илдә дәүләт, ил, ведомство һәм территориялар гербтарын эшләү ҡануниәт менән көйләнә. РФ Президенты ҡарамағында Геральдика советы бар, улар экспертиза үткәрә һәм гербтарҙы теркәй. Шәхси, ғаилә, ырыу гербтарыүтеүгә өлгәшһәк - был ҙур ҡаҙаныш буласаҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, төрлө урындарҙа шәхси ырыу геральдикаһын бер төрлө эшләргә, бер төрлө талаптарға тап килтерергә һәм теркәү үтергә тырышалар. Бындай тәжрибә Мәскәү өлкәһендә, Марий Илендә һәм тағы бер нисә субъектта бар. Ләкин был даими күренеш түгел. Башҡортостан Республикаһы был йәһәттән беренсе була, йәғни шәхси геральдиканы дәүләт кимәленә сығара ала. Ул үҙенсәлекле символ, әммә уның нимә аңлатҡаны бары тик ниндәйҙер башҡорт төркөмө йәки йәмғиәте, шулай уҡ борондан тамғалар менән ҡулланған халыҡтар өсөн генә аңлайышлы. Әммә киңерәк, юғарыраҡ, йәғни дәүләт йәки донъя кимәленә сығыу тураһында һүҙ алып барғанда, был тамғалар символикаһы үҙендә ниндәй мәғлүмәт йөрөткәне аңлашылмай. Был осраҡта урта быуаттарҙа Европала барлыҡҡа килгән геральдика ярҙхеҙмәт емеше күренә. Әле республикала гербтары эшләнгән ырыуҙар уны дәүләт һәм муниципаль символдар менән бер рәттән ихлас ҡуллана.

**Ҡайһы бер ырыуҙар гербтарын ҡабул итмәүе тураһында ла ишетелеп ҡалды, йәғни улар гербтарын ырыу йыйынында раҫламаны…**

- Ысынлап та, мең ырыуы гербын йыйында раҫламаны. Беҙ улар менән осрашып һөйләштек, фекер алыштыҡ. Концепция кимәлендә барыһы ла аңлашыла, әммә визуаль образдар кимәлендә кешеләрҙә һорауҙар тыуа. Был шулай булырға тейеш тә, сөнки уларҙың зауығы, донъяны ҡабул итеүе төрлөсә. Герб эшләгәндә беҙ һәр саҡ ырыу халҡының фекеренә иғтибар итәбеҙ һәм уларҙың кәңәштәрен рәссам үҙенсә эшләйәсәк, әммә һүрәтләү буйынса ул бер үк герб. Гербтың логотиптан айырмаһы шунда: беҙ логотипта нимәнелер бер-ике миллиметрға шылдырһаҡ йәки үҙгәртһәк, ул дөрөҫ логотип булмай. Ә герб һүрәтләнешендә ижадҡа ҙур урын бар. Әле эшләнгән гербтар ҙа эталон түгел. Шуға күрә, һүрәтләнешенә ярашлы төрлө ижади конкурстар үткәрергә мөмкин: рәсми ҡабул ителгән герб рәсми документтарҙа ҡулланылһа, һүрәтләнеше буйынса киң фантазияға урын ҡалдыра.

Бында шуны ла билдәләп китергә кәрәк: йыйындарҙа герб эскизын тәҡдим итеп, беҙ "Юҡ, беҙгә герб кәрәкмәй", тигән ҡаршылыҡтар менән күҙмә-күҙ осрашманыҡ. Барыһы ла уның кәрәклеген аңлай. Билдәле булыуынса, бер

# ГЕРБ - МИЛЛӘТТЕ БЕРЛӘШТЕРЕҮСЕ ОБРАЗ,

## уның тарихының дауамы

на килгәндә, улар әлегә йолалар рәүешендә һаҡланған, сөнки ырыу геральдикаһы традицияһы беҙҙә 17-се, хатта унан алдағы быуаттарҙан йәшәп килә. Ләкин улар туранан-тура дәүләт тарафынан көйләнмәй. Әммә Башҡорт ырыуҙары гербтары буйынса проектты беҙ киләсәктә уның дәүләт көйләүенә алынырға тейешлеген күҙаллап башланыҡ.

Бер ни тиклем алға китеп шуны әйтергә теләйем: бында ниндәй процесс бара? Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты менән берлектә тәүҙә уның ҡарамағында Геральдика комиссияһы төҙөнөк. Ул гербтарҙы эшләү принциптарын эшләне һәм киләсәктә Ҡоролтайҙың Геральдика комиссияһының экспертизаһын үткән гербтар БР Башлығы ҡарамағындағы Геральдика советына теркәү үтеүгә тапшырылырға тейеш. Был инде федерация субъекты кимәлендәге дәүләт теркәүе тигәнде аңлата. Әлегә Рәсәй кимәлендәге теркәү үтеү тураһында һөйләргә иртәрәк, әммә субъект кимәлендә теркәү Тик быны нисек дөрөҫ итеп эшләү буйынса күп һорауҙарҙы һәм мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк. Эш күп, әммә киләсәктә ул хәл ителер тип ышанам.

**Ырыу гербын эшләгәндә нимәгә төп иғтибар бүләһегеҙ, төп урынға нимәне ҡуяһығыҙ?**

- Башҡорттарҙың ырыу геральдикаһын эшләгәндә төп принцип булып беҙҙең ниндәйҙер яңылыҡ асыуыбыҙ тормай, ә тап тарихи тамырҙарға мөрәжәғәт итәбеҙ һәм тарихи ысынбарлыҡты күҙ уңында тотабыҙ. Башҡорттарҙа борон-борондан тарихи символика: тамға, ҡош, оран, ағас булған.

Һәр башҡорт, моғайын, "Сыңғыҙнамә дәфтәре" тураһында хәбәрҙарҙыр. Унда Сыңғыҙхандың барлыҡ бейҙәргә символдар биреүе тураһында бәйән ителә. Бер нисә ырыу үҙенең ағасына, ҡошона, оранына, тамғаһына һәм кольчугаға (һауыт) эйә була. Йәғни беҙ ошо булған символиканы геральдикала ҡулланабыҙ.

Бында нимәгә иғтибар итергә кәрәк: тамғаларға. Тамға - амға килә лә инде. Ул дөйөм донъя мәҙәниәтенә әүерелде һәм хәҙер символдар теле донъяның һәр ерендә аңлашыла, тиергә мөмкин. Беҙҙең заманда күп символдар онотолған һәм беҙ традицион башҡорт символикаһын традицион геральдика рәүешендә, Башҡортостанда ғына түгел, унан ситтә лә аңлайышлы булырлыҡ кимәлдә ҡабаттан тергеҙәбеҙ. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының башлаған проекты ла тап башҡорт халҡының мәҙәни мираҫының донъяла танылыулы булыуына өлгәшеүҙе күҙаллай, сөнки башҡорттар бит Башҡортостан Республикаһында ғына түгел, донъяның төрлө мөйөштәрендә лә йәшәй. Минең күреүемсә, был проектты халыҡ ҡабул итте, сөнки ул уларға аңлашыла, улар гербта үҙенә яҡын булған ағасын, ҡошон, оранын, тамғаһын күрә. Икенсенән, герб - ул матур, уникаль. Әҙер герб - ул тамамланған эш түгел, ул эштең башы ғына әле. Артабан уны нисек ҡулланалар, ул киң таралыу аламы - бына шунда инде иҫәпкә алабыҙ, кәрәк урындарҙа төҙәтеүҙәр индерәбеҙ. Эшләнгән вариантты халыҡ күрҙе лә, шунда уҡ ҡабул итте, раҫланы тип булмай, был бик һирәк күренеш, ошо кимәлгә еткәнсе уны камиллаштырырға кәрәк. Икенсе яҡтан, беҙ, йәғни ырыу гербтарын эшләүселәр - сит кешеләр. Гербтарҙы эшләрҙән алда крайҙың, ырыуҙың тарихы менән танышабыҙ, тарихи әҙәбиәт уҡыйбыҙ, аңларға, асылына төшөнөргә тырышабыҙ, әммә һәр саҡ сәпкә тейҙереп булмай. Әлбиттә, халыҡ фекерен иҫәпкә алып, төрлө варианттар эшләргә, еренә еткерергә тура килә, әммә был эш процесы. Бында шуны аңларға кәрәк: герб - ул ырыуҙың символы, ул бер тапҡыр ғына ҡабул ителә һәм артабан ғүмер буйы шуның менән йәшәргә кәрәк буласаҡ.

Гербта ҡыҙыҡлы бер мәл бар, ул - һүрәтләү. Йәғни бер һүрәтте күрәбеҙ һәм уның аныҡ билдәләнгән формалары бар, мәҫәлән, йәшел яланда үҫкән ҡайын ағасының ботағында ҡош ултыра. Ошо һүрәтләү буйынса уны төрлө нисә йыл элек Башҡортостандың муниципаль район-ҡалаларының да гербтары эшләнде һәм халыҡ уның нимә икәнлеген аңлай, ә ырыуҙар гербы - ул милләт, халыҡ тарихының дауамы.

**Ырыуҙар гербы Сыңғыҙнамаға һәм шәжәрәләргә нигеҙләнеп эшләнә, тинегеҙ. Ә бына ҡайһы бер тарихсылар, кемдәр икәнен әйтеп тормайыҡ, был тарихи документтарҙы миф тип ҡабул итә, йәғни башҡорт тарихының ошо яҙмаларға нигеҙләнгән өлөшө - ул тарих түгел, ә миф ҡына, имеш…**

- Бында нимәгә иғтибар итергә кәрәк: беҙҙең рәсми документтар менән раҫланған тарихыбыҙ менән бер рәттән, ауыҙ-тел ижадына (фольклор) нигеҙләнгән тарих та бар. Бәлки, ундағы ваҡиғалар һәм геройҙар ысынбарлыҡта булмағандыр ҙа, әммә улар халыҡ хәтерендә һаҡланған. Мәҫәлән, ниндәйҙер легенда 18-се быуатта тәүге тапҡыр теркәлгән икән, тимәк, ул ошоға тиклем оҙаҡ йылдар телдән-телгә күсеп килгән бит. Һәм


















✓ *Ошо эшкә тотонғас, мине аптырыуға һалған хәл булды - ул Башҡортостандың беҙҙән алыҫ районынан көйәнтә, тырмалар эшләп биреүҙе һорап яҙыуҙары. Ул райондарҙа бындай әйберҙәр эшләүселәр юҡ икән.*



терҡәлгәндән алып ул рәсми документҡа әйләнә. Әйтәйек, Сыңғыҙхан был тамғаларҙы, символдарҙы бирмәгән дә икән, ти, әммә уның тарихта терҡәлеп ҡалыуы - ул халыҡ тарихының бер дәлиле. Был осраҡта беҙгә был тарихи ваҡиғаның булыу-булмауы мөһим түгел, ә ырыуҙарҙың уны ҡабул итеүе мөһим. Был символдар бер нисә быуат дауамында йәшәгәнен беләбеҙ. Ә был легендар ваҡиғаның нисек үтеүе, уның яҙылғанға тап килеү-килмәүе принципиаль түгел, был ваҡиғаның халыҡ тарихының айырылғыһыҙ бер өлөшө булыуы әһәмиәтле һәм ул 100 процент халыҡ тарихы булып тора ла.

**Дәүләтселек үҙенең символикаһы - гербы, гимны, флагы менән айырыла, йәғни үҙенең дәүләт булыуын раҫлай. Ә бына Сыңғыҙхан башҡорттарға символдар - оран, тамға, ҡош, ағас бүләк иткәс, шул заманда уҡ башҡорттарҙың үҙ дәүләтселеге булған тип әйтергә буламы?**

- Мин башҡорт тарихы буйынса белгес түгел, әммә башҡорттарҙың дәүләтселеге күпкә алдараҡ барлыҡҡа килгән тип уйлайым. Теләһә ниндәй халыҡтың тарихтың ниндәйҙер этабында үҙен законлаштырыу ихтыяжы тыуа. Йәғни, ул әллә ҡайҙан бер нигеҙһеҙ түгел, ә рәсми рәүештә барлыҡҡа килә. Һәр халыҡтың дәүләтселеге иҫәбе башланған нөктәһе була. Башҡорттар власть һәм территория символдарын Сыңғыҙхандан ала. Дәүләтселек - ул халыҡ берләшкәнсе даими үҫешә барған оҙайлы процесс.

**Башҡорт Википедияһы ирекмәне булараҡ, ошондай һорауҙы бирмәй булдыра алмайым: башҡорт ырыуҙарының гербтарын Википедияла ҡулланыу өсөн уның ирекле ҡулланыу лицензияһы булырға тейеш, йәғни копирайт түгел, ә CreativeCommons. Ошо үҙегеҙ эшләгән гербтарға ирекле лицензия бирә алаһығыҙмы?**

- Әгәр рәсми гербтар тураһында һүҙ алып барһаҡ, Граждандлыҡ кодексына ярашлы, рәсми ҡабул ителгән гербты ҡулланыу хоҡуғы уны раҫлаған ойошмаға күсә. Ырыуҙар геральдикаһына килгәндә, хәл-торош шундай уҡ, йәғни беҙ герб эшләйбеҙ һәм уны ырыуға тапшырабыҙ. Артабан инде ырыу гербын нисек ҡулланыуҙы ырыу үҙе хәл итә. Беҙ уны нисек дөрөҫ ҡулланыу тураһында методик кәңәштәр әҙерләйәсәкбеҙ. Әммә герб - ул асыҡ тарих. Беҙ, әлбиттә, герб авторҙары булып ҡалабыҙ, әммә уны ҡулланыу хоҡуғын һаҡламайбыҙ. Авторлыҡ хоҡуғы тураһында ниндәйҙер документ эшләрбеҙ, Википедияға ҡуйыу мәсьәләһен дә хәл итеп булыр тип уйлайым.

**Башҡортостанда, ғөмүмән, эш барышында нимә хәтерегеҙҙә ныҡлы урын алды?**

- Был проект - уникаль проект, сөнки ул ырыуҙар символикаһы булараҡ, Рәсәйҙә беренсе тапҡыр булдырыла. Шуға күрә уны геральдика талаптары яғынан тел тейҙергеһеҙ итеп эшләү зарурлығы тыуа. Ул башҡа халыҡтар өсөн өлгө булып торасаҡ. Үҙем 1996 йылдан, ә 2004 йылдан геральдика буйынса ныҡлы эшләйем, әммә башҡорт ырыуҙары аҡһаҡалдары кеүек аҡыллы, ентекле уйлаусан кешеләрҙе күргәнем булманы. Бик йыш гербтар буйынса фекер алышыуға 10-20 кеше йыйылабыҙ һәм һөйләшеү килеп сыҡмай, һәр кем үҙенекен һөйләп тик ултыра. Башҡортостанда иһә халыҡ аңлап, беҙ тәҡдим иткәнде уйлап эш итә. Килешмәгән осраҡта, үҙҙәренең фекерен етди нигеҙләй. Улар беҙҙе белгес күреп тыңлаһа, беҙ уларҙың фекеренә гербтың булласаҡ хужалары итеп ҡолаҡ һалабыҙ. Был - илдә бик һирәк осраған һөҙөмтәле аралашыу.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Герб, әләм кеүек үк, ул кешеләрҙе берләштерә торған һәм берләштерә алған визуаль образ. Ул илһөйәрлек тәрбиәләүҙә лә ҙур роль уйнай, сөнки бәләкәйҙән үҙ ырыуының символын күреп үҫкән балала ҡыҙыҡһыныу тыуа - тәүҙә ул матур һүрәт күрә, һуңынан унда нимә төшөрөлгәне тураһында һораша, уға ырыу тарихын һөйләйҙәр, тәүҙә ул аңламай, әммә үҫә килә аңлай башлай, йәғни тыуған ил тойғоһо бәләкәйҙән һалына. Үҫкәс инде уның алдында, кем мин, ҡайҙан мин, тигән һорауҙар тормаясаҡ. Бигерәк тә бөгөн бик күп уҡырға яратмаған, йәғни символдар менән генә эшләргә өйрәнгән яңы быуын үҫкәндә был бик уңайлы", - тине әңгәмә барышында Кирилл Викторович. Уның һүҙҙәрен ҡеүәтләп, иншалла, тиергә генә ҡала. Милләтте, халыҡты берләштереүсе ысулдар һәм алымдарға беҙ ҡуш ҡуллап риза, айырмаһындар, бүлгеләмәһендәр генә...**

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА әңгәмәләште.**




ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ

# АҒАС ОҪТАЛАРЫ ҺАНАУЛЫ

**Ҡул йылыһы биреп, күҙ нуры түгеп ағастан эшләнгән әйберҙәрҙең абруйы ҙур. Ысынлап та, сифатлы һәм күркәм ҡул эше һәр саҡта ла ҙур һорау менән ҡулланылған һәм артабан да шулай буласаҡ. Ундай әйберҙәр һәр береһе үҙенсәлекле, эш процесы ҡатмарлы, бәләкәй генә бер деталде эшләү ҙә ҙур оҫталыҡ талап итә. Башҡорттар элек-электән төрлө ағастың ниндәй әйбер эшләүгә яраҡлы булыуын төплө белеп эш иткән, шуға күрә әле лә һәр ғаиләлә быуындан-быуынға ҡомартҡы рәүешендә тапшырылып килгән, ләкин сифатын һис ташламаған ағас әйберҙәр күп һаҡлана. Ағас эше менән булыусы оҫталар күп түгел хәҙер. Әммә барҙар. Белорет ҡалаһында Азамат ЗАҺИҘУЛИН атлы ошондай һөнәрмән ир-егет йәшәй. Уның ағастан эшләнгән әллә күпме төрлө әйберен бөтә интернет халҡы күптән белә һәм ихлас һатып ала.**




**Интернеттағыларға һеҙҙең эштәрегеҙ яҡшы таныш. Был эшкә тотоноу нисек килеп сыҡты?**

- Ағас эше менән 2020 йылда шөғөлләнә башланым. Уға тиклем дә ҡыҙыҡһыныуым ҙур ине, ләкин һәр нәмәнең үҙ ваҡыты тигәндәй, тотонорға ҡул теймәй торҙо. Һәм, ниһайәт, былтыр тәүәккәлләнем. Ағастан төрлө әйберҙәр булдырыу төп эшем түгел, ә күңел һалып башҡарған шөғөлөм.

Тәүге эшләгән әйберем һандыҡ булды. Уны таҡтанан, үҙем белгәнсә эшләнем, ҡасау менән биҙәнем, буяп ебәрҙем. Күңелдә булғас, бик теләп тотонғас, был эшем арыу ғына килеп сыҡты. Шулай ҙа һәр өлкәләге кеүек үк, ағас эшенә тотоноу теләге генә әҙ, уның бөтә нескәлектәрен аңлау һәм белеү өсөн күп өйрәнергә кәрәк. Һәр әйберҙең үҙенең эшләү ысулы ғына түгел, ә нескәлектәре лә бар. Мәҫәлән, батман, тәпән эшләү серҙәренә төшөнөр өсөн Бөрйән районы Ғәлиәкбәр ауылында йәшәүсе Самат ағайға барҙым. Ул бер ҡыйынһынмай, киң күңеллелек күрһәтеп, үҙе белгән бөтә эшләү рәүешен аңлатып бирҙе. Ҙур рәхмәт һүҙҙәремде еткерәм уға.

Интернет заманында йәшәгәс, уның файҙаһын күрә белеү ҙә кәрәк. Ҡулым бер аҙ оҫтарып, эшләгән әйберҙәремдең сифатлы булыуына ышанғас, уларҙы интернеттағы сәхифәмә һалдым. Халыҡ электән ата-бабаларыбыҙ ҡулланған һауыт-һаба, хужалыҡта кәрәкле башҡа әйберҙәрҙе бик йылы ҡабул итте, хуплау һүҙҙәрен әйтте. Тәүге заказдар ҙа килде. Шулай итеп, шөғөлөмдө килем килтереү рәүешенә лә әйләндерҙем.

**Ассортиментығыҙ бай ғына күренә. Ниндәй әйберҙәр эшләүҙе юлға һалдығыҙ?**

- Әлеге ваҡытта батман, тәпән, көйәнтә, тырма, һандыҡ, көбө һәм башҡа әйберҙәр эшләйем. Ваҡ-төйәк әйберҙәрҙе күпләп эшләргә мөмкин булһа ла, батман, тәпән, көбө, һандыҡ кеүек ағас эштәренә ваҡыт та күберәк китә, ҡул көсө лә әҙ түгелмәй һәм уларҙы ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә күпләп етештереп тә булмай.

Шулай уҡ сыбыртҡы үрәм. Һандыҡты яратып эшләйем. Ҡарап тороуға ябай ғына күренһә лә, дүрт яҡлап таҡта сөйләнең дә, аҫтына таҡта беркетеп, ҡапҡас ҡуйҙың түгел һандыҡ эше. Уның да үҙенә генә хас үҙенсәлектәре, нескәлектәре бар. Был эште илке-һалҡы башҡарып булмай, һандыҡ матур, ыҡсым, сифатлы булһын өсөн бөтә оҫталыҡты, күңелде һалырға кәрәк. Һандыҡтарҙы кәләшем йәки Наҙгөл ҡыҙым матур һүрәттәр менән биҙәй.

Һуңғы аралағы эштәремдең береһе - көбө. Был һауыттың башҡорттарҙа ҡулланылышы ҙур - унда ҡымыҙ ҙа бешәләр, буҙа ла ҡоялар, бал да һаҡлайҙар һәм башҡалар. Көбө эшләү серҙәрен быйыл "Ете егет" тапшырыуы ҡатнашыусылары менән дә бүлештем.

**Ағас менән эшләгәндә һеҙҙең өсөн иң мөһиме нимә?**

- Сифат. Минән әйбер алған кешенең хәтере ҡалмаһа ине тием. Әйберҙәремде риза булып ҡулланһындар, тип теләйем. Минән эшләтеп алған һәр әйберҙең, бәләкәй булһынмы ул, әллә ҙурмы, һәр өйҙә киң ҡулланылыш табыуын теләйем.

**Теге йәки был әйберҙе эшләү өсөн ағастарҙың да төрлөһө кәрәктер, моғайын. Ғөмүмән, ағас эшенең үҙенсәлектәре тураһында ла ишетергә ине.**

- Эйе, әйткәнемсә, ағас эшенең нескәлектәре күп. Мәҫәлән, тәпән эшләгәндә төбөнә һәм ҡапҡасына уҫаҡ йәки йүкәнән ҡоро таҡта кәрәк. Ә хәҙер, баҡтиһәң, ҡоро таҡта табыуы ауыр икән.

Һәр уйлаған әйберҙе уның өсөн тип әҙерләгән ағастан эшләп сығарып та булмай. Ағас йә эшләгән саҡта, йә инде киптергән ваҡытта ярылып сыға. Мәҫәлән, тәпән өсөн тәғәйенләнгән ағастың эсен соҡоп алып, төбөн ҡуйғас, уны ике ай самаһы еләҫ, әммә үтәнән-үтә ел һуҡмаған урында киптерергә кәрәк. Әгәр ҙә ошо ваҡытта сатнап ярылһа, әллә күпме хеҙмәтең, эшең юҡҡа сыға.

Тәпәнде - йүкә, һандыҡты - ҡарағайҙан, көйәнтәне ҡарама, йыла ағасынан эшләйем. Әйткәндәй, көйәнтә эшләүҙе бер туған ағайым Фаил өйрәтте.

Ошо эшкә тотонғас, мине аптырыуға һалған хәл булды - ул Башҡортостандың беҙҙән алыҫ районынан көйәнтә, тырмалар эшләп биреүҙе һорап яҙыуҙары. Ул райондарҙа бындай әйберҙәр эшләүселәр юҡ икән. Магазиндағы тимер тырма менән эшләүе ауыр, бесән йыйғанда еңел генәһе кәрәк, тип яҙҙылар.

**Ғәҙәттә, ҡулы эш белгән кеше бер шөғөлдә генә туҡтап ҡалмай...**

- Солоҡсолоҡ менән шөғөлләнәбеҙ. Үҙемдең тыуған ауылым Ноҡатта ошо йүнәлештә эш алып барам. Был эштең айышына Бөрйән районы Ҡотан ауылында йәшәүсе Айҙар исемле егет төшөнөргә ярҙам итте, рәхмәтем ҙур уға. Солоҡсолоҡҡа тотонғас үҙем өсөн күп яңылыҡ асам. Мәҫәлән, законға ярашлы, солоҡто үҫеп ултырған ағасты соҡоп эшләргә ярамай, ә айырым түмәрҙә яһалғанды ағасҡа күтәреп нығытып ҡуйырға ғына мөмкин.

Ғаиләң һинең менән бер уйҙан, бер төптән һәм ынтылыштан булмаһа, ниндәй эштә лә алға китеш булмаясаҡ. Был йәһәттән үңдым - ҡатыным Зәйнәбтең һәр ваҡыт ниәттәремде хуплап, күңелемде үҫтереп ебәреүе миңә көс бирә. Уның менән өс бала тәрбиәләйбеҙ, улар ҙа ҡул араһына инеп бара. Ҡатыным үҙе буҙа ҡайната, уны һатыуға ла эшләй. Ғаиләм, ятраҡан эшем, ихлас башҡарған шөғөлдәрем менән бәхетлемен.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Азамат "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ", тигән мәҡәләнең бар асылына тура килеп, мәғәнәһен тулыһынса асып биреүсе. Уның кеүек оҫталар һәр саҡта ла һанланған һәм ҙурланған, сөнки барыһына ла бындай һәләт бирелмәй. Шул һәләтте үҫтереп, ҡулланып йәшәүе уны ғына түгел, ә унан әйберҙәр алып ҡыуанған һәр кемде бәхетле итә.**

**Гөлназ МАНАПОВА.**

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

**Ишеттегеҙме? Яңы банк тураһында, тим. Дөрөҫөрәге, ул яңы банк түгел, әлмисаҡтан бирле бер туҡтауһыҙ эшләй. Төн уртаһында сәғәт уктары ун икелә осрашҡас, һеҙҙең иҫәпкә теп-теүәл 86400 һум аҡса күсә. Америкала шул күләмдә долларҙар күсә, тиҙәр... Әле беҙгә ул аҡса бирәмегенең исеме лә, курсы ла мөһим түгел, иң мөһиме, ул Ер шарындағы Әҙәм балаларының һәммәһенә лә күсә. Шул аҡсаны бер тәүлек эсендә тотоноп бөтөргә кәрәк, сөнки төн уртаһында ул аҡса юҡҡа сыға һәм уның урынына, әлеге лә баяғы, 86400 һум кеҫәгә төшөп тә ята. Хәрриәт! Ул аҡсаны нисек дөрөҫ тотонорға һуң? Быныһы инде һәр кемдең шәхсән эше, кем берәү әйтмешләй, аҡсаларҙың еҫе юҡ һәм аҡса бер ваҡытта ла күп булмай. Уйланығыҙ, йәмәғәт, уйланығыҙ. Мин иһә күптән уйланам. Сөнки... ул бирәмек - беҙҙең иҫәпкә көн дә бушлай күсеп торған 86400 секунд ваҡыт...**

# ВАҠЫТ - АҠСАМЫ?

Бөгөн, кешеләр араһындағы мөнәсәбәт күп осраҡта аҡса менән иҫәпләнгән мәлдә, ваҡытты һумдар менән сағыштырып уйлау мейене көсөргәнешлерәк эшләтә. Уйлап ҡарайыҡ әле, ваҡыт ҡәҙерлеме, әллә аҡса бирәмегеме? Ваҡыт үлсәме алдараҡ барлыҡҡа килгәнме, әллә аҡса бирәмегеме? Риторик һорау, тиер, күптәр. Ярай, улайһа аҡса менән иҫәпләшеү барлыҡҡа килеү тураһында кинәйәне иҫкә төшөрәйек. Аҡса менән иҫәпләшеү, туранан-тура булмаһа ла, кешенең ваҡытҡа ҡарата, ғөмүмән, бөтөн нәмәгә лә мөнәсәбәтен үҙгәртеүе көн кеүек асыҡ. Шулай итеп, шундай бер кинәйә.

...Ҡолдарына шымартылған таш тотҡан эшселәр яй ғына бер-береһенең артынан атлай. Дүрт шеренгалыҡ ҡолдар теҙеме саҡрымдан ашыу оҙонлоҡҡа һуҙылған. Таш сығарған урындан төҙөлөп ятҡан ҡалаҡәлғәгә шул тиклем арауыҡ. Ҡайҙа ҡарама, һаҡсылар - һәр ун ҡолға берәү. Бер яҡ ситтә, шымартылған таштарҙан һалынған ун өс метрлыҡ бейеклектәге яһалма тау башында Кратий эш барышын дүрт ай буйына күҙәтеп ултыра. Уны бер кем дә борсомай, уйҙарын бүлмәй. Ҡолдар ҙа , һаҡсылар ҙа үҙ яҙмышына күптән күнгән, ысынбарлыҡты нисек бар, шулай ҡабул итеп өйрәнгәндәр, Кратийға иғтибар ҙа итмәйҙәр. Ә ул үҙ уйҙарына сумған. Дәүләт ҡоролошон шундай итеп үҙгәртергә кәрәк - киләһе мең йыллыҡтарҙа ла Ер шарындағы барлыҡ кешеләр - ҡолдар ҙа, дәүләт башлыҡтары ла жрецтарға хеҙмәт итергә тейеш. Кратий дүрт ай дауамында тик шул турала ғына фекер туплай.

Тышҡы ҡиәфәте менән үҙенә оҡшаған икенсе берәүҙе үҙенең урынына ҡалдырып, Кратий тәхетенән аҫҡа төштө, паригын систе, өҫ кейемен алыштырып кейҙе һәм... һаҡсылар башлығына ҡолдарына бығау һалырға бойорҙо. Хәҙер ул башҡа ҡолдарҙан бер ние менән дә айырылмай. Жрец Нард исемле иң йәш, көслө бер ҡолдоң эргәһенә баҫты. Ул күптән инде был егеттең башҡаларҙан айырылып тороуына иғтибар иткәйне. Нардтың ҡарашында ниндәйҙер аңлашылып етмәгән өмөт тойғоһо сағыла, башҡалар кеүек төшөнкөлөккә бирелеп, башын түбән эймәгән. Уның йөҙө ҡай саҡ үтә уйсан, ҡай саҡ аңлашылмаған тойғоларҙан балҡып китә. "Тимәк, был егеттең ниндәйҙер маҡсаты бар", тигән фекергә килгәйне Кратий. Әле уйҙарының дөрөҫлөгән тикшереп ҡарарға булды.

Ике көн буйына ул Нардты күҙәтте, ашаған ваҡытта ла, йоҡларға ятҡанда ла эргәһендә булырға тырышты. Өсөнсө көндө йоҡларға ятҡас та, Кратий, уфтанып, Нард ишеткәндәй итеп: "Был тормош ғүмер буйы шулай дауам итерме икән ни?", - тине. Йәш ҡол ҡапыл тетрәнде, күршеһе ягына боролоп ятты. Уның күҙҙәрендә ярһыу осҡондар балҡый ине.



- Юҡ, былай оҙаҡ дауам итмәйәсәк. Минең аныҡ планым бар. Һин, бабай, шул маҡсатты тормошҡа ашырыуҙа миңә ярҙам итәсәкһең, - тине ул шыбырлап ҡына.

- Ниндәй план? - тигән булды Кратий, иҫе китмәй генә иҫнәп.

Нард ярһып, ышаныслы итеп аңлата башланы:

- Һин дә, мин дә тиҙҙән азат кеше буласаҡбыҙ, ҡоллоҡтан ҡотоласаҡбыҙ. Иҫәпләп ҡарағанһың бармы, бер ҡолға ун һаҡсы ҡуйылған. Беҙгә аш бешергән ун биш ҡатын-ҡолға ла бер һаҡсы. Алдан килешеп, бер үк ваҡытта һөжүм итһәк, беҙҙең еңеү көн кеүек асыҡ. Беҙҙең ҡулда бығау булһа ла, һаҡсылар ҡоралланған булыуға ҡарамаҫтан, еңеү беҙҙең яҡта буласаҡ. Әмәлен тапһаң, бығауҙарҙы ла ҡорал урынына ҡулланып була. Һаҡсыларҙы ҡоралһыҙландырып, бығауҙарҙы уларға тағасаҡбыҙ.

- Эх, һин, йәш егет, - тине Кратий, көрһөнөп. - Һинең планың аҙағына тиклем уйланып бөтмәгән. Эйе, һаҡсыларҙы ҡоралһыҙландырып була. Әммә Хаким иртәгә үк улар урынына яҡшыраҡ ҡоралланған яңы ҡәүем ебәрәсәк, баш күтәргән ҡолдарҙы ҡанға сумдырып язалаясаҡ.

- Юҡ, бабай, мин был турала яҡшылап уйлағанмын. Беҙ ғәскәр илдән ситтә булған ваҡытта һөжүм итәсәкбеҙ. Был ваҡыт етеп килә. Һиҙеһеңме, ғәскәрҙе яңы походҡа әҙерләйҙәр, өс айлыҡ аҙыҡ запасы туплайҙар. Тимәк, өс айҙан ғәскәр кәрәкле урынға барып етеп, һуғыш башлаясаҡ. Һөжүм ваҡытында армия хәлһеҙләнәсәк, әммә еңәсәк, баҫып алынған халыҡ иҫәбенә ҡолдар һанын арттырасаҡ. Беҙгә нәҡ өс айҙан, һуғыш башланған көндә һөжүм итергә кәрәк. Былдағы боролош тураһындағы хәбәрҙе сапҡындар тик бер айҙан ғына алып барып еткерәсәктәр. Хәлһеҙләнгән армия кире әйләнеп ҡайтҡансы тағы өс айҙан артыҡ ваҡыт үтәсәк. Дүрт ай эсендә ғәскәрҙе ҡаршы алыуға беҙ әҙер буласаҡбыҙ - беҙҙең ғәскәр Хаким ғәскәренән кәм булмаясаҡ, ҡоллоҡҡа төшкәндәр ҙә беҙҙең яҡҡа сығасаҡ. Мин барын да алдан уйланым, ҡарт.

- Ысынлап та, егет, һинең план буйынса һаҡсыларҙы ҡоралһыҙландырып, армияны ла еңергә була. Ә артабан ҡолдар ни эшләр ҙә, һаҡсылар, һалдаттар ни ҡыйратыр?

- Әлегә мин был турала төптән уйлағаным юҡ. Әммә ҡолдар ҡабат ҡол булыуҙан ҡотоласаҡ, - быны мин яҡшы аңлайым. Элек ҡол булмағандар ҡолға әйләнер, моғайын, - тип, Нард уйының аҙағын ышаныслыһыҙ ғына тамамлай.

- Ә еңеүҙән һуң жрецтар кем буласаҡ, ҡолмо, әллә ирекле-ме?

- Жрецтармы? Мин был турала уйлағаным юҡ. Миненсә, улар әлеге хәлендә ҡалырға тейеш, сөнки жрецтарһыҙ ҡолдар ҙа тыңлай, уларҙың һүҙенә хакимдар ҙа ҡолаҡ һала. Әлбиттә, уларҙы аңлауы ҡыйын, әммә уларҙан артыҡ зыян юҡ. Әйҙә, Аллалар тураһында һөйләһендәр, ә беҙ үҙ ғүмеребеҙҙе иксек матур итергә үҙебеҙ белербеҙ.

- Әлбиттә, матур тормошҡа бер ни ҙә етмәй, - тип яуаплай хәйләкәр жрец.

Әммә Кратий был төндә керпек тә ҡаҡмаған. Ул уйға батҡан. "Әлбиттә, егеттең планы тураһында фирғәүенгә хәбәр итеп, уны язаға тарттырырға була, - тип фекер йөрөткән ул. - Әммә был ғына хәлде үҙгәртмәйәсәк, ҡол һәр саҡта ла ҡоллоҡтан азат булыу тураһында хыялланасаҡ. Нард кеүектәр яңынан тыуасаҡ. Тимәк, дәүләт эсендәге хәүеф бер ваҡытта ла бөтмәйәсәк". Кратийҙың төп бурысы - ерҙәге бар халыҡты буйһондороп, ҡол итеү. Әммә ҡурҡытып, көс менән генә кешене мәңге ҡоллоҡта тотоп булмай. Һәр айырым кешегә, бөтөн халыҡтарға ла йоғонто яһағандай алым уйлап табырға кәрәк. Кешеләрҙең аңын томалап, уларға ҡоллоҡтоң иң ҙур ҙур бәхет икәнен күңелдәренә мәңгелеккә һеңдерергә кәрәк. Яңы программа уйлап табып, халыҡтарҙың үсешен Кратий теләгәнсә генә, хата юлдан ебәреп, ысынбарлыҡты бутап күрһәтеү зарур. Жрецтың фекерләү тиҙлеге арта бара, ул хатта ҡолдарындағы бығауҙарын да онота. Һәм ҡапыл, йәшен ялтлағандай, Кратийҙың аңында яңы программа хасил була. Әле ул уның асылына, фекеренең һәр өлөшөнә төшөнөп тә бөтмәй, әммә яңы программа шул хәтлем киң масштаблы булыуын, бөтөн Ер шарын солғап аласағын яҡшы төшөнә ул һәм үҙенең бөтөн ер йөҙөнә хужа буласағын асыҡтан-асыҡ тоя.

Аяҡ-ҡулы бығаулы килеш һәндерәлә ятҡан жрец үҙ аңының көсөнә үҙе һоҡлана. Таң һарыһынан ҡолдарҙы эшкә ҡыуған ваҡытта мин һаҡсылар башлығына күҙ ҡыҫасаҡмын. Ул мине ситкә алып китәсәк һәм бығауҙарымды сисәсәктәр. Тыныс ҡына ултырып, мин яңы программаның һәр өлөшөн яңынан уйлап сығасаҡмын һәм кешелек донъяһы бөтөнләй икенсе юлдан китәсәк. Башҡа һыймаҫлыҡ уй бит был! Бары бер нисә һүҙ әйтәсәкмен... һәм бөтөн донъя миңә буйһонасаҡ, минең уйым алдында баш эйәсәк. Аллаһы Тәғәлә, ысынлап та, кешегә Йыһандағы иң ғәйрәтле көс биргән. Кеше уйынан да көслөрәк нәмә юҡ был донъяла. Тик уйҙы һүҙгә әйләндерә белергә кәрәк. Шул саҡта ғына ул тарих ағышын үҙгәртерлек көскә эйә. Һүҙҙе ваҡытында әйтә белергә лә кәрәк. Иртәгә әйтмәһәм, һуң буласаҡ, сөнки ҡолдар баш күтәрергә әҙерләнә. Ысынлап та, Нардтың планы тормошҡа ашырлыҡ итеп уйланылған. Әммә мин бер кәлимә фекерем менән генә уны ла, уның тоҡомдарын да мәңгер йылға ҡол хәлендә ҡалдырасаҡмын. Шулай уйлай Кратий, үҙ фекеренән ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерә.

Иртәнсәк Кратийҙың ымы буйынса һаҡсылар башлығы уның бығауҙарын сисә. Икенсе көнөнә үк жрецтар башлығы үҙе янына ҡалған биш жрецты һәм фирғәүенде саҡыра. Телмәрен ул былай башлай:

- Хәҙер минең ауыҙымдан сыҡҡан һүҙҙәрҙе бер кем дә яҙып алырға ла, башҡаларға һөйләргә лә тейеш түгел. Һеҙҙән башҡа мин уны бер кемгә лә һөйләмәйәсәкмен. Мин ерҙә йәшәгән бөтөн кешеләрҙе фирғәүенебеҙҙең ҡолона әйләндерәсәк ысул уйлап таптым. Быны күп һанлы ғәскәр менән дә, оҙайлы һуғыштар юлы менән дә эшләп булмай. Әммә мин уны бер кәлимә фекер менән тормошҡа ашырасаҡмын.

Артабан Кратий һәр һүҙенә баҫым яһап, телмәрен дауам итә:

- Минең һүҙҙәрҙән һуң ике көн дә үтмәҫ, был донъяның ҡырҡа үҙгәреүенә үҙегеҙ шаһит булырһығыҙ. Ҡарағыҙ, аяҡ-ҡулы бығаулы мәңгерләгән ҡол көн һайын таш ташый. Уларҙы бихисап һаҡсы һаҡлай. Беҙ быға тиклем ҡолдар һаны ни тиклем күп булһа, дәүләт тә шул тиклем көслөрәк була тип уйлай инек. Әммә ҡолдар һаны арҡан һайын дәүләт өсөн уларҙың баш күтәреү ихтималлығы ла арта бара. Көндән-көн беҙ яҡшыраҡ ҡоралланған һаҡсылар һанын арттырырға мәжбүрбеҙ. Ҡолдар файҙаларак эшләһен өсөн уларҙы яҡшыраҡ туйындырырға кәрәк. Шуныһы улар ауыр физик эште башҡара алмаясаҡ. Әммә улар барыбер ялҡау, етмәһә, баш күтәреү тураһында хыялланалар. Хәҙер һаҡсылар ҙа ялҡаулана бара. Ҡарағыҙ, уларҙың ҡулындағы ҡамсылар элекке кеүек шыйлап тормай. Әммә минең һүҙҙәрҙән һуң ҡолдар йүгереп йөрөп эшләйәсәк. Иң мөһиме - уларға һаҡсылар ҙа кәрәкмәйәсәк. Һаҡсылар иртәгәнән үҙҙәре ҡолға әйләнәсәк. Быны бер юл менән генә эшләп була. Бөгөн әңер төшкән мәлдә һәр кемгә фирғәүендең указын уҡып ишеттерергә кәрәк. Ул былай яңғырай: ***"Иртәгәнән башлап бөтә ҡолдарға ла тулы ирек бирелә. Төҙөлеш урынына алып килгән һәр таш өсөн иреклe кешеләргә берәр һум аҡса түләнәсәк. Аҡсаны аҙыҡ-түлеккә, кейем-һалымға, торлаҡҡа, ҡиммәтле һарайҙарға алмаштырырға мөмкин. Иртәнән башлап һеҙ барығыҙ ҙа азат кешеләр".***

Кратийҙың телмәрен тыңлап бөткәс, жрецтарҙың иң олоһо былай ти:

- Кратий, һин Иблис тоҡомонан. Һинең уйың ерҙә йәшәгән халыҡтарҙың булмышын ҡара һөрөм кеүек ҡаплаясаҡ.

- Ярай, мин демон булайым. Киләсәктә Кратий уйлап тапҡанды демократия тип атаясаҡтар, - ти ул.

Указдың йөкмәткеһен әңер төшкәс, ҡолдарға уҡып ишеттерәләр. Улар үҙ ҡолаҡтарына үҙҙәре ышанмай шаҡ ҡата. Күптәр төнө буйы йоҡламай, алдағы бәхетле тормош тураһында уйлана, яңы пландар ҡора. Икенсе көнөнә жрецтар менән фирғәүен шымартылған таштарҙан өйөлгән яһалма

✔ *Хаммурапи закондарҙы йомшарта һәм ҡоллоҡто бурыс ҡаплау өсөн 3 йыл бушлай эшләү менән алмаштыра. Бынан тыш, аҡсалата штрафтар түләү ҙә ҡарала. Тимәк, аҡса шул ваҡыттан уҡ язалау сараһына ла әйләнә.*



тау башына менеп, ни булырын күҙәтә. Улар, ысынлап та, шаҡ ҡатырлыҡ күренештең шаһиты була. Ирек алған менәрләгән ҡол бер-береһен тапай-тапай йүгереп йөрөп таш ташый. Хәллерәктәре хатта икешәр таш күтәргән. Кисәге һаҡсылар ҙа, ҡолдар менән буталып, таш ташыуға күскән. БыҒауҙарҙан ҡотолоп, үҙҙәрен ирекле тойған ҡолдар тиҙерәк күберәк аҡса туплап, бәхетле тормош ҡорорға тырыша.

Кратий ҙур ҡәнәғәтлек тойғоһо кисереп, уй-хыялының нисек тормошҡа ашыуын тағы бер нисә ай күҙәтә. Уйлағаны юш килеүгә ҡыуана ул. Әммә үҙгәрештәр ул уйлағандан да артығыраҡ булып сыға. Йүнселерәктәр төркөмдәргә бүленеп, ташты арбаларға тейәп ташый башлай. Уларҙың хатта ялға туҡтарға, тамаҡ ялғарға ла ваҡыты юҡ. Шуға күрә аҡса хаҡына һыу ташып эсереүселәр, аш бешереүселәр барлыҡҡа килә. Табиптар ҙа хәҙер үҙ ярҙамын тик аҡса иҫәбенә башҡара, имгәнгәндәргә элеккеләй ярҙам ҡулы һуҙа, тик бушлай түгел. Юлдағы хәрәкәтте яйға һалыусылар барлыҡҡа килә. Тиҙҙән, тәртип булһын, тип, ирекле ҡолдар үҙҙәренә яңы түрәләр, судьялар һайлай башлай. Ирекле кешеләр өсөн был тормошта йәшәүҙең мәғәнәһе үҙгәрә. Йөкмәткеһе лә үҙгәрә, әммә асылы шул килеш ҡала. Менәр йылдар дауамында тиргә батып, элекке ҡолдар йүгерәтлай таш ташый... Уларҙың тоҡомдары мәғәнәһеҙ йүгереүҙе һаман да дауам итә...

Был кинәйә. Ә бына быныһы тарих. Беҙҙең эраға тиклем 1750 йылдар тирәһендә Хаммурапи батша-фирғәүен ваҡытында аҡса әйләнеше үҫеше банктар асырға мөмкинлек бирә. Бурысты ҡаплау проценты бик юғары була һәм 100 процент тәшкил итә. Бурысын ҡаплай алмағандарҙы иркенән мәхрүм итеп, ҡолға әйләндерәләр. Әммә, күпселектә крәҫтиәндәр менән һөнәрселәр бурыстарын ҡаплай алмай интеккәнгә күрә, Хаммурапи закондарҙы йомшарта һәм ҡоллоҡто бурыс ҡаплау өсөн 3 йыл бушлай эшләү менән алмаштыра. Бынан тыш, Хаммурапи Кодексы буйынса тән язаһы менән берлектә аҡсалата штрафтар түләү ҙә ҡарала. Тимәк, аҡса шул ваҡыттан уҡ эш хаҡы ғына түгел, язалау сараһына ла әйләнә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәмәғәт, башта әйтелгән 86400 һанын иҫләйһегеҙме? Нимә ҡәҙерле, аҡсамы, әллә ваҡытмы? Ғөмүмән, ваҡытты аҡса берәмеге менән үлсәп буламы? Ваҡыт - аҡсамы, ысынлап та? Әллә?.. Был һорауҙарға яуап бирер алдынан Тереза-Әсә әйткән һүҙҙәрҙе иҫтә тотайыҡ: "Әгәр ҙә кешеләрҙе үлтереү өсөн уйлап табылған ҡоралдарға тотонолған аҡсаларҙы кешеләрҙе ашатыу, ҡотҡарыу һәм тәрбиәләү өсөн ҡулланғанда донъя ни тиклем матур булыр ине!"**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

*АФАРИН!*

# ҮҘЕГЕҘҘЕ ҺӘМ ТУҒАНДАРЫҒЫҘҘЫ ҺАҠЛАҒЫҘ!



**Премьералар йәшәтә театрҙарҙы. Бәлки, йәшәртәләр ҙә әле. Премьера - ул ниндәйҙер бер драма әҫәренең тәүбашлап сәхнәгә аяҡ баҫыуы ғына түгел, театрға яңы һулыш, саф һауаға бәрәбәр иләҫлек килеүе лә.**

Сибай ҡалаһында Баныу Ҡаһармановәның "Шахтер" исемле драмаһы буйынса спектакль буласағы тураһында афишалар күренгәс, театр һөйөүсе тамашасылар ана шул саф һауаға өмөт иткәндәрҙер. Ни тиһәң дә, хәүефле осорҙа йәшәйбеҙ. Яңы һулыш, киләсәккә ынтылыш кәрәк бөгөн. Һәм алдан уҡ әйтәйек, тамашасыларҙың өмөтө аҡланды, спектакль сәхнәгә ышанғыслы аҙымдар менән аяҡ баҫты, күңел түрҙәренә үтеп инде.

Тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына сюжетҡа ҡоролған әҫәр һымаҡ. Ҡатыны (Зәлиә Хафизова) иренең (Венер Сөнәғәтов) ҡесәһенән алтын балдаҡ һатып алыу тураһында тауар чегы тапҡан. Әлбиттә, ыҙғыш сыға. "Миңә булмағас, һөйәркәңә алғанһың", - ир ҡатынының логикаһы шулай. "Айырылышабыҙ!" Ир - эшкә, ҡатыны Төркиәгә ял итергә оса. Әммә был тормоштағы һәр беребеҙ ҡылған ғәмәлдәрҙең осраҡлы түгел икәнен аңларға ваҡыттыр. Шахтала авария! Ғаилә башлығы забойҙа көпләнеп ҡала. Ҡотҡарыу эштәре һөҙөмтә бирмәй, ир һәләк була.

Урамда туҡтатып һораһалар, драманың йөкмәткеһен ҡыҫҡа ғына ошолай һөйләр инем. Ә сәхнәлә был драма, бәлки, трагедиялыр ҙа әле, оҙон-оҙаҡ барған һымаҡ тойола. Көсөргәнешлек артҡандан-арта барып, күҙҙән йәштәр атылып сыға. Моңһоу уйҙар солғап ала, яҡын туғандар иҫкә төшә. Уларҙың был тормошта ни тиклем дә ҡәҙерле икәне аңлашыла. Бигерәк тә сәхнәгә төп геройҙың әсәһе (Башҡортостандың халыҡ артисы Рәмилә Хоҙайғолова) сыҡҡас, хис-тойғолар шартлау кимәленә етә. Ысынлап та, психолог драма был! Әҫәрҙе сәхнәгә сығарыусы ҡуйыусы-режиссер Дамир Ғәлимов таусылар ҡалаһы кешеләренә яҡындан таныш сюжетты һайлап яңылышмаған. Рәсәйҙең һәм Ҡалмыҡстандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Валерий Яшкулов рәссам-ҡуйыусы һөнәренең спектаклдә юғары кимәлгә күтәреүҙә ни тиклем дә кәрәкле икәнен иҫбат иткән. Йәш композитор Илсаф Вәдүтов сәхнәләге көсөргәнешлекте музыкаль биҙәлеше менән көсәйткән.

Бер тынала ҡарала спектакль. Саф тын менән ҡарала. Яңы һулыш күңелдә киңәйтә. Бөтә урамды яңғыратып: "Үҙегеҙҙе һәм туғандарығыҙҙы һаҡлағыҙ!", тип ҡысҡырғы килә.

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

*БАШҠОРТ ЮМОРЫ*

# ЙЫЛАЙЫР МӘҘӘКТӘРЕ

**Һәр районлың, һәр ауылдың үҙенә күрә лаҡап тыуҙырыусы кешеләре була. Уйлап сығарылмаған, ә тормош-көнкүрештән алынған хәл-ваҡиғалар, телдән-телгә ҡуйыртылып, өҫтәмә биҙәк-төҫтәр менән байытылып, артабан хатта берәй әҙәби әҫәргә лә инеп китә. Беҙҙең Йылайыр яҡтарында ла мәҙәк әҙәмдәр бихисап. Әле мин шуларҙың бер нисәүһенең мәҙәген "Киске Өфө"нө уҡыусыларға ла еткермәксемен. Яҡташтарымдың хәтерен ҡалдырмау, уларҙы халыҡ алдында рисуай итмәү маҡсатында исемдәрен үҙгәртеп алдым һәм ауылдарын да атамайым. Әгәр кемдер үҙен таныһа, мине ғәфү итһен һәм үпкәләмәһен. Маҡсатым һеҙҙән көләү түгел, ә башҡорт юморының бер өлгөһө менән таныштырыу ғына.**

### "Күргәс, күрҙек, ти инде..."

Элек, колхоз-совхоздар гөрләп торған саҡта, йәйге бесән осоронда өмәләр үткәреү ғәҙәте бар ине. Эш хаҡы яҙылмаһа ла, өмәлә ҡатнашырға теләүселәр бик күп булды. Берҙән, совхоз тәшкө аш мәлендә барыһын да бушлай ашата, өҫтәүенә, ике-өс кешегә бер "аҡ баш" ҡуя. Унан килеп, күмәкләшеп күңел асыуҙар, уйын-көлкө, йыр-бейеү үҙе ни тора! Мәҙәк хәлдәр ҙә йыш була ундай көндәрҙә - аҙаҡ ғүмерең буйы шуларҙы иҫләп, дуҫ-иштәреңә һөйләп кинәнәһең.

..."Аҡ баш"ты артығыраҡ һалып ташлағандарҙырмы, әлеге өмәләрҙең берендә Хөббөниса инәй менән Әүхәт ағай, үткәндәр хаҡында һөйләшеп ултыра торғас, илаша башлағандар, ти. "Күрҙек бит, Әүхәткәйем, күрҙек", - тип сенләй икән Хөббөниса инәй. "Күрҙек шул, апай, күрҙек", - тип уға ҡушыла икән тегеһе. Эргәләрендә йөрөгән ун йәштәр тирәһендәге Әхмәт быларҙы аңлай алмай, аптыраштa ҡала: "Шундайын да ҡурҡыныс нимә күрҙеләр икән?"

Ауылға ҡайтҡас та атаһынан белешмәксе була Әхмәт һәм: "Атай, Хөббөниса инәй менән Әүхәт ағай нимә күргәндәр ул? Берберeһенә илай-илай һөйләнеләр..."- ти. Эштең нимәлә икәнен артыҡ төшөнөп тә етмәгән атаһының яуабы ҡыҫҡа була: "Уның нимәһен һорайһың, балам, күргәс, күрҙек, инде..." Һорауына йүнле яуап ала алмаған Әхмәт тегеләр күргәндәрҙе атаһының да күреүенә бөтөнләй аптырап ҡала. Әхмәт әле лә ошо һорауына яуап таба алмай, ти, ә "Күргәс, күрҙек инде" тигән лаҡап әле лә телдә йөрөй.

### "Мәксүдә үлгән..."

Асыҡ күҙ менән йоҡлаған кешеләрҙе күргәнегеҙ бармы? Булмаһа, артабан иғтибарлыраҡ булығыҙ, юғиһә, ошоға оҡшаш хәл һеҙҙең менән дә булыуы бик ихтимал.

...Бесән өҫтө. Борон бесәндә яланда ятып эшләй инек бит. Гөлбәғиҙә инәй кашауар булып йөрөй. Бер көн тәшкө аштан һуң, кешеләр бесәнлеккә китеп бөткәс, ҡыуышҡа инһә, Мәксүдә апай бер үҙе генә салҡан төшөп ята икән. Ауыҙы, күҙҙәре асыҡ, үҙе ҡыбырламай ҙа. Гөлбәғиҙә инәй баҙап ҡала: "Мәксүдә, Мәксүдә, ни ҡыланып ятаһың?" Тик йәш ҡыҙ өндәшмәй. Тамам ҡурҡыуға төшкән Гөлбәғиҙә инәй тышҡа атлыға һәм бесәнселәр янына йүгерә. "Уй, Хоҙайым, ни генә булды икән, Мәксүдә үлгән дә ҡуйған. Әсәй генәһенә ҡалайтып әйтәбеҙ инде", - тип күҙ йәштәре аша һамаҡлай икән инәйебеҙ. Бөтә кеше ҡыуышҡа йүгерә. Килһәләр, Мәксүдә апай һаман шул килеш ята. Шул саҡ эштең нимәлә икәнлеген һиҙеп алған бер егет Мәксүдә апайҙың ауыҙына иләп кенә күрән (тел ҡыбырлаған һайын төпкә тартылыусы үлән) тыға.

Иҫһеҙ булып йоҡлап ятҡан Мәксүдә апай сәсәй-сәсәй тороп ултыра ла, үҙен уратып алған кешеләргә ҡарап, аптырап китә. Ауылдаштары әле булһа уның асыҡ күҙҙәр менән йоҡлауы тураһында телдән төшөрмәй һөйләй.

### "Даңғыр-дөңгөр иһа-һай..."

Ишле генә ғаиләле Шәмсетдин ағай урыҫ ауылына күсеп бара. Тәү осор балалары урыҫса бер ауыҙ һүҙ белмәй аҙаплана. Шулай ҙа тора-бара телде аңлай башлай балалар. Уртансы улдары Мирғәле нәҡ шул осорҙа лаҡапҡа ҡала ла инде.

Бер көн ҡырҙа ат эҙләп йөрөгән Мирғәлегә ауылдарындағы урыҫ ағай тап була. "Чего ищешь, малайка?" тип һорай урыҫ. Һорауҙы аңлаһа ла, Мирғәле ни тип яуапларға белмәй тора: "Даңғыр-доңгор, иһа-һай", - тип аңлата. Аҙаҡ Василий Степанович ауылда ирҙәргә һөйләй: "Вот у Шамсетдина малай боевой растет. Не пропадет он никогда. Не сумел сказать лошадь, зато "Дангир-дунгир ига-гай" говорит..."

...Шулай Мирғәлегә "Даңғыр-доңғор иһа-һай" ҡушаматы йоғоп ҡалды.

### "Бына лежит, зуб держит..."

Тел арҡаһында сыҡҡан тағы бер мәҙәк хәлде һөйләп китәйем әле. Күрше ауылдағы Әскәп инәй, үгеҙ егеп, баҙарға юллана. Әммә Спутник ауылына етәрәк үгеҙе сығынлай ҙа ҡуя бит быныһ. Улай итә Әскәп инәй, былай итә. Әммә тиҫкәре үгеҙ, тәртә араһына төшөп ята ла, телен арҡыры тешләп, тик ята икән. Һис торғоҙормон тимә. Аптыраған инәй Спутниктағы белешенә килә: "Ызнакум, помоги, - ти. - Бына лежит, зуб держит, никак шагать итмәй..." Аңлап етмәһә лә, Степан ҡарт Әскәп инәйгә эйәрә. Килһә, үгеҙ һаман ята икән. Эштең айышына төшөнгән бабай әмәлен тиҙ таба - үгеҙҙең ҡойроҡ аҫтына ут төртә... Йомошон йомошлап ҡайтҡас, ҡыуана-ҡыуана үҙе һөйләгән Әскәп инәй был хәлде әхирәттәренә.

**Мотал РӘМОВ.**
**Йылайыр районы.**

✓ *17 йыл ижад дәүерендә театрҙа ҡуйылған дүрт тиҫтәнән ашыу сәхнә әҫәрҙәре, өс тиҫтәгә яҡын роль, ҙур көс түгелеп асылған театр техникумы, яҙылған бихисап мәҡәләләр - былар барыһы ла 1937 йылда бер көн эсендә юҡҡа сыға.*



ИНТЕРНЕТТАН



# НИҢӘ БАШ АУЫРТА?

■ Йыш баш ауыртыуының сәбәбе ҡояш яҡтылығы, тимәк D, B витаминдары һәм коэнзим Q10 етешмәүҙән булыуы ихтимал. Ҡояшта йөрөү мөмкинлеге һирәк эләгә икән, был витаминдарҙы ризыҡтар ярҙамында тулыландырырға мөмкин, ти ғалимдар. D витамины балыҡ һәм йомортҡала бар. B витамины - рибофлавин дөгөлә, йомортҡала һәм һөттә бар, рибофлавин нервы системаһының эшенә, күреү һәләтенә, метаболизм процестарына ыңғай йоғонто яһай. Коэнзим Q10 бауырҙа була һәм ул шәкәрҙәрҙе энергияға әүерелдерә. Лаборатор тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, хроник баш ауыртыуы менән яфаланыусыларҙа тап ошо матдәләрҙең норманан түбән булыуы асыҡланған.

■ Ғалимдар беренсе тапҡыр аҙ хәрәкәтләнеүҙең иҡтисади эҙемтәләрен баһалап ҡараған һәм байҙар һәм ярлылар араһында бер принципиаль айырма тапҡан. Билдәләнеүенсә, түбән социаль кимәл ялҡаулыҡ менән бәйле, улар шулай уҡ аҙ хәрәкәтләнә лә икән. The Lancet журналы яҙыуынса, ғалимдар 142 илдән йыйылған мәғлүмәттәрҙе анализлаған. Айырыуса аҙ хәрәкәтләнеү һөҙөмтәһендә ҡаҡшаған сәләмәтлекте кире нығытыу өсөн тотонолған сығымдарға иғтибар бирелгән. Халыҡтың түбән физик әүҙемлеге донъя иҡтисадына йылына 67,5 млрд һумға төшә. Йәки һаулыҡты нығытыу өсөн кешеләр ошо күләмдә аҡса тотона. Ғалимдар әйтеүенсә, был минималь һан, ысынында иһә һан тағы ла ҙурыраҡ булыуы ихтимал. Сумманың 40 проценты АҠШ-ҡа тура килә.

■ Табиптар аҙ хәрәкәтләнеүҙе бер ҡасан да хупламаны. Айырыуса ҡатын-ҡыҙҙар хәүеф төркөмөндә, тип белдерә АҠШ-тың Корнелл университеты ғалимдары. Йышыраҡ ултырыу, аҙ йөрөү ҡатын-ҡыҙ затын тура мәғәнәһендә үлтерә, ти улар. Эштәрендә көнө буйы ултырыусыларға ғәҙәттә йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәре, йөрәктең ишемик ауырыуы, яман шеш йышыраҡ янай. Бынан тыш, был артыҡ ауырлыҡ йыйыуға алып килә, был да сәләмәтлеккә насар йоғонто яһай. 35 йәштән ҡатын-ҡыҙ мускул массаһын юғалта башлай, менопауза башланғас, был процесс тағы ла әүҙемләшә. Шуға ла тән ҡартаймаһын өсөн даими рәүештә физик күнегеүҙәр эшләргә кәрәк.

■ Америка ғалимдары плацебо эффекты ысынбарлыҡта бар, тип раҫлай. Һүҙ бер ниндәй тәьҫир көсө булмаған ялған таблеткалар тураһында бара. Баҡтиһәң, бындай дарыуҙар баш ауыртыуынан, хатта Паркинсон ауырыуынан "дауалай" икән. Йәғни, табип ҡушҡан дарыуҙарҙы эскәс, сирленең организмында ла, аңында ла үҙгәрештәр барлыҡҡа килгән. Иң ҡыҙығы, пациенттар дарыуҙарҙың ялған икәнен белмәгән дә. Паркинсон менән ауырыусылар ҙа традицион дарыуҙар урынына плацебо алғас, үҙҙәрен еңелерәк тойоуы раҫланған. Ауырыған кеше дарыу эскәс, үҙенең һауығырына ышана, шуға ла бындай ыңғай һөҙөмтәләр була.

■ Ябай мәтрүшкә составындағы май инфекциялар менән антибиотиктарға ҡарағанда ла яҡшыраҡ "көрәшә". Британия ғалимдары билдәләүенсә, был майҙа карвакрол тигән матдә бар, ул эсәк эшмәкәрлеген боҙоусы паразиттарға, бәшмәк инфекцияларына ҡаршы антисептик булып тора. Иң ҡыҙығы, карвакролды 18 төрлө антибактериаль препарат менән сағыштырып, был матдәнең уларға ҡарата көслөрәк булыуы асыҡланған.

ЗОЛОМ ТАРИХЫНАН

# АТАЙ ҺӘМ УЛ ФАЖИҒӘҺЕ



**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына нигеҙ һалған Вәлиулла Мортазиндың исеме республика халҡына яҡшы таныш. Был шәхестең исеме театрҙың 100 йыллыҡ тарихына арналған ике томлыҡ китапта ла, Булат Йосопов төшөргән "Беренсе Республика" фильмында ла үҙәк урынды биләп тора. Бөгөнгө күҙлектән ҡарағанда уның шәхесе насар өйрәнелмәгән, тип әйтергә лә мөмкин кеүек. Вәлиулла Мортазиндың эшмәкәрлеге хаҡында һүҙ алып барғанда миндә гел генә бер һорау тыуҙы: "Ғаилә хәле нисек булды икән? Балалары булғанмы? Әгәр балалары булһа, аталары халыҡ дошманы булараҡ хөкөм ителгәс, уларҙың яҙмышы нисек булды икән?"**

Был һорауға яуап табыр өсөн күп кенә эҙләнеүҙәр алып барҙым. Ниһайәт, 2016 йылда Үзбәк исемле улы барлығы хаҡында белдем. Вәлиулла Мортазиндың тәүге ҡатыны актриса Мәрфүғә Мортазина. Оҙаҡ ауырығандан һуң ул 1929 йылда вафат була. "Башҡортостан" гәзитенең 1929 йылдың июнь һанында ошо уңай менән некролог баҫылып сыға. Шул уҡ һанда Татар академия драма театрынан килгән ҡайғы уртаҡлашыу телеграммаһы ла баҫылған. Телеграмма театр етәксеһе Вәлиулла Мортазин исеменә һуғылған һәм унда ошондай юлдар бар: "Ҡатынығыҙ Мәрфүғә Мортазинаның ваҡытһыҙ вафат булыуы сәбәпле һеҙҙең һәм улығыҙ Үзбәктең тәрән ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ". Тимәк, 1929 йылда уның Үзбәк исемле улы булған. Ҡайһы ҡалала, нисәнсе йылда тыуған ул Үзбәк Мортазин? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был һорауҙар хәтһеҙ ваҡыт яуапһыҙ ҡалды. 2018 йылда Вәлиулла Мортазинға ҡарата асылған енәйәт эшен өйрәнеү мөмкинлеге барлыҡҡа килде. Уның 1937 йылда ғаилә хәле былай тип күрһәтелгән: ҡатыны (икенсе ҡатыны - **Авт.**) Зәйнәб Сафиуллина - йорт хужабикәһе, улы Үзбәк - 1914 йылғы, әлеге көндә Нерчинск ҡалаһында Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итә. Икенсе улы Моторға 6 йәш, өсөнсө улы Маратҡа 3 йәш, ҡыҙы Розаға 1 ай. Роза 1937 йылдың 9 сентябрендә тыуа.

Мортазин Вәлиулла Ғайназар улы тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт. *1885 йылда Ырымбур губернаһының Ырымбур өйәҙе, Морaптал улусы, Иманғол ауылында тыуа. Йәшләй етем ҡалып, олатаһы ғаиләһендә үҫә. 1902 йылда Иманғолдоң башланғыс урыҫ-башҡорт мәктәбен тамамлай һәм Ырымбур ҡалаһына юллана, ҡалала химчисткала эшләй. 1907 йылдың 19 майында сәхнәлә беренсе ҙур ролен уйнай - А. Островскийҙың "В чужом пиру похмелье" комедияһы буйынса "Ғалимдар һәм ахмаҡтар" тип ҡуйылған спектаклдә Ибраһим ролен башҡара.*

*1907 йылдан алып 1915 йылғаса эшмәкәрлеге татар театры менән бәйле. 1915 йылдың аҙағында Ырымбурҙа "Ширкәт" труппаһын ойоштора. Труппаның етәксеһе булараҡ, актерҙар составын туплай, репертуар булдыра, спектаклдәр ҡуя, рус теленән пьесаларҙы тәржемә итә. Халыҡ телендә был труппа "Мортазин-Иманский театры" тип йөрөтөлә. "Иманский" тигән псевдонимды тыуған ауылы Иманғолдан ала һәм 1916 йылдан алып сама менән 1922 йылға тиклем йөрөтә.*

*Вәлиулла Мортазиндың 1920 йылға тиклемге эшмәкәрлеге Ырымбур менән бәйле: башта Башҡорт Милли хәрәкәте, аҙаҡ Беренсе Ҡыҙыл Армия штабындағы милли театр етәксеһе.*

*Башҡорт дәүләт академия драма театрының тыуған көнө тип 1919 йылдың 4 декабре күрһәтелгән. Был дата Башҡортостан Мәғариф комиссариатының Оло Коллегия ултырышы менән бәйле. Коллегия "Актер Вәлиулла Мортазин - Иманскийҙы Ырымбурҙағы труппаһы менән Стәрлетамаҡҡа сәнғәт бүлеге хеҙмәткәре итеп саҡырырға" тигән ҡарар сығара. Ә, асылда, Вәлиулла Мортазин театр менән 1920 йылдың мартында ғына идара итә башлай.*

*1922 йылдың 14 апрелендә Стәрлетамаҡта уға тантаналы рәүештә "Халыҡ артисы" исеме бирелә. 1926 йылдың башынан Башҡорт музыка техникумы етәксеһенең урынбаҫары булып эшләй. 1929-1930 йылдарҙа Өфөнөң тегеү фабрикаһы эшселәре араһында драма түңәрәген, бәләкәй формалағы башҡорт театрын ойоштора. Шул уҡ йылда фабрика ойошмаһынан партияға кандидат итеп ҡабул ителә.*

*1930 йылда Мәскәүҙә үткән СССР Халыҡтарының Сәнғәт олимпиадаһының дөйөм жюри составына инә.*

*1935 йылдың 10 ғинуарында Башҡортостан АССР-ының Үҙәк Башҡарма Комитеты һәм Халыҡ Комиссарҙары Советы "Вәлиулла Ғайназар улы Мортазинға РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы исемен биреүҙе юлларға, бынан тыш уны еңел машина менән бүләкләргә" тигән ҡарар сығара. Еңел автомобиль менән бүләкләнә, әммә РСФСР-ҙың Наркомпросы В. Мортазинға "РСФСР ҙың атҡаҙанған артисы" тигән исемде биреүҙән баш тарта.*

*1936 йылдан 1937 йылдың сентябренә тиклем В. Мортазин - БАССР Совнаркомының сәнғәт эштәре буйынса идара етәксеһенең ярҙамсыһы булып эшләй.*

Башҡорт дәүләт театры менән Вәлиулла Ғайназар улы Мортазин 17 йыл яҙмыш бүлешә. Башҡорт сәхнәһенә сыҡҡан һәр ролде, унда эшләгән һәр артисты, театрға килгән һәр тамашасының күңел торошон хәстәрләп үткән 17 йыл ғүмер... 17 йыл ижад дәүерендә театрҙа ҡуйылған дүрт тиҫтәнән ашыу сәхнә әҫәрҙәре, өс тиҫтәгә яҡын роль, мең бәлә менән ойошторолған күсмә труппа, ҙур көс түгелеп асылған театр техникумы, яҙылған бихисап мәҡәләләр, тәржемә ителгән пьесалар, хөкүмәт эше - былар барыһы ла 1937 йылдың сентябрь айында, бер көн эсендә, юҡҡа сыға. Иҫтәлеккә, тип төшөлгән фоторәсемдәрҙә йөҙҙәр ҡараға буяла, афишалар яндырыла, программалар юҡ ителә, яҙылған мәҡәләләр гәзит биттәренән ҡырҡып ташлана. Кисәге коллегалар, күптәнге дуҫтар, өмөтлө һәм өмөтһөҙ уҡыусылар - хөкөм итеүсегә әйләнә.

Өфөнөң Крупская урамындағы 3-сө һанлы йорттоң 13-сө фатирын НКВД хеҙмәткәрҙәре 20 октябрҙә төнгө сәғәт ун берҙә шаҡыйҙар. Өс сәғәттән ашыу тентеү үткәргәндән һуң, 50 биттән ашыу шәхси документтар, төрлө гәзит-журналдарҙа баҫылған мәҡәләләр тупланған дүрт папка, ролдәр күсереп яҙылған дәфтәрҙәр, театр тураһында материалдар йыйынтығы, шәхси китапханала булған 109 китапты алып сығып китәләр. Башта ҡаты итеп ишек шаҡыуҙарына ҡурҡып уянған, аҙаҡ өйҙәренә хәрби кейемдәге кешеләрҙең килеп тулыуын күҙәткән өс йәшлек Марат менән алты йәшлек Мотор, әлбиттә, бер нәмә лә аңламай. 29 йәшлек ҡатыны Зәйнәб, моғайын, үҙен "Был ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡ, һорау алырҙар ҙа ҡайтарырҙар", тип йыуатҡандыр. Ә ҡулға алыныусы үҙенең бер ҡасан да кире әйләнеп ҡайтмаясағын аңлай. Уның артынан килгән НКВД хеҙмәткәрҙәре күрһәткән ордерға аҡҡа ҡара менән: "1-се категория буйынса тотҡон", тип яҙылған. 1-се категория, тимәк, Мортазинды Совет иле өсөн ҙур ҡурҡыныс тыуҙырған етәкселәр иҫәбенә индергәндәр. Уның яҙмышы хәл ителгән. Береһенән-береһе бәләкәй ике улына, ай ярымлыҡ ҡына ҡыҙына һуңғы тапҡыр ынтылып ҡараған атай кеше ғәзиз балалары һәм ҡатыны менән бәхилләшеп, ҡулға алыусылар менән сығып китергә мәжбүр була.

Вәлиулла Мортазин ҡулға алынғас, теүәл бер тәүлектән улы хеҙмәт иткән хәрби часҡа телеграмма китәсәк: **"Нами подозревается в контрреволюционной деятельности курсант ШМАС (Школа младших авиаспециалистов - Авт.) Муртазин Узбек Валиуллович, 1914 года рождения, призванный в РККА из г.Уфы. Отец - Муртазин Валиулла Гайназарович. Срочно сообщить все имеющиеся у вас компрометирующие материалы на Муртазина У. В. и его родных".**

Вәлиулла Мортазинды тәүге допросҡа 22 октябрь алып баралар. Допроста ул 1917 йылда Башҡорт Милли хәрәкәте ағзалары менән бәйләнештә булыуын таный, сөнки был ваҡиғаларҙы яҡшы иҫләгән шаһиттарҙың күп булыуын аңлай һәм баш тартыуҙың файҙаһыҙ икәнен белә.

Теүәл 7 көндән, 29 октябрҙә, уның улы Үзбәк Мортазин хеҙмәт иткән Нерчинск ҡалаһының 2 взводында ВЛКСМ ағзаларының ябыҡ йыйылышы үтә. Йыйылыш халыҡ дошманы улы Үзбәк Мортазинды ВЛКСМ ағзаһы составынан сығара. Ү. Мортазин 10 көндән үҙен ҡабат комсомол сафына ҡайтарыуҙарын һорап, үтенес менән

мөрәжәғәт итә. Үтенестә: "17 сентябрь көнө мин атайымдан хат алдым. Ул хатында, мин 1-се Милли йыйылышта ҡатнаштым, шуның өсөн яуапҡа тарттырыуҙары бик ихтимал, тигән борсолоуын белдергәйне. Мин бөтә нәмәне аңлатып ҡабат хат яҙыуын үтендем. Практиканан ҡайтҡас, "Известия" газетаһының 23 сентябрь һанының кисәгенән Башҡортостандағы милләтселәр төркөмө тураһында ұҡыным һәм исемлектәр араһында Мортазин фамилияһын осраттым. Инициалдары юҡ ине. Күпмелер ваҡыт үткәс, курсант Садыҡовҡа минең атайым түгелме икән, тигән шикләнеүемде белдерҙем", - тиелә. Әммә үтенес яуапһыҙ ҡала, киреһенсә, башҡаларҙан "үтә аҡыллы" тип һаналған Үзбәк Мортазиндың башҡа "гәйептәре" табыла. "Үзбәк Мортазин политучеба ваҡытында беҙҙең техника насар кимәлдә, беҙ бөтә техниканы сит илдән алабыҙ", - тип әйтте. "Үзбәк Мортазин флагтың төҫөнән көлдө. Әллә ҡайҙан күренеп торһон өсөн ҡыҙыл төҫкә буяйҙар бит ул уны", тип әйтте һ.б. 26 ноябрь көнө Нерчинск гарнизоны Дәүләт именлек идараһының махсус бүлеге Мортазин Үзбәк Вәлиулла улын ҡулға алырға, тигән ҡарар сығара.

Ҡулға алынған Үзбәк Мортазиндың еңәйәт эшендә тыуған йылы - 1914 йылдың 16 марты тип күрһәтелгән. "Тыуған ҡалаһы - Ҡаҙан. Милләте - башҡорт. Махсус урта белемле. 1935 йылда Өфөнөң механиктар техникумын тамамлай. Һөнәре - металды һалҡын ысул менән эшкәртеүсе. Хеҙмәт иткән урыны - Нерчинск ҡалаһы. Атаһы НКВД органдары тарафынан халыҡ дошманы булараҡ ҡулға алынған. Ү. Мортазин 1937 йылдың икенсе яртыһынан асыҡтан-асыҡ контрреволюцион агитация эшен алып бара. Партия һәм Хөкүмәт етәкселәрен хурлап, ялған хәбәрҙәр тарата. РСФСР Енәйәт кодексының 58-8, 58-11 статьяларына ярашлы Нерчинск ҡалаһының төрмәһенә ябырға" .

Үзбәк Мортазин һорау алыу протоколдарының береһенә лә ҡул ҡуймай. Допростар ваҡытында тик ике кешене генә телгә ала. Атаһын һәм яҙыусы Афзал Таһировты. "Афзал Таһиров менән беҙ күршеләр булдыҡ. 1936 йылдың йәйендә хеҙмәткә китер алдынан мин уларға хушлашырға индем. Һөйләшеп ултырҙыҡ. Ул үҙенең яңы романын тамамлаған ине. Һөйләшеү ваҡытында Совет һәм батша армияһы тураһында бер аҙ фекер алыштыҡ. Ул "Батша армияһында ла тәртип насар ине, хәҙер Ҡыҙыл Армияла ла тәртип яҡшы түгел", - тине. Мин ризалаштым", тип яуап бирә. "Минең атайым ысын совет гражданы. Уның бер ниндәй ҙә гәйебе юҡ!" тип йыш ҡабатлай Үзбәк Мортазин допростарҙа. Үҙенең хәле ҡыл өҫтөндә булғанда ла атаһының гәйепһеҙ булыуына ышаныуы уға көс биргән, әлбиттә. 8 ай самаһы барған һорау алыуҙар, һорау алыу ваҡытында ҡултамға ҡуйыуын талап иткән ҡаты "һөйләшеүҙәр" һәм сираттағы допроста, 1938 йылдың 5 июлендә, йән биреүе - Үзбәк Мортазин яҙмышының аяуһыҙ ысынбарлығы. Ә атаһы Вәлиулла Мортазин теүәл биш көндән Өфө төрмәһендә атыла. Нерчинск ҡалаһы менән Өфө ҡалаһын биш мең километр ара бүлә. Аталы-уллы Мортазиндарҙы айырған биш мең километр һәм июль айының биш көнө...

Вәлиулла Мортазиндың ғаилә хәле тураһында белергә тырышып эҙләнеүҙәр алып барғанда мин 24 йәшлек егеттең аяныслы яҙмышы менән танышырмын тип һис тә уйламағайным. Әгәр ҙә бәхетле осраҡ менән был енәйәт эше Башҡортостанға ҡайтарылмаһа, бөйөк шәхес Вәлиулла Мортазиндың лайыҡлы улы, ҡот осҡос шарттарҙа атаһының исемен һаҡлап ҡорбан булған Үзбәк Мортазин хаҡында белмәҫ инем.

Вәлиулла Мортазиндың ҡатыны Зәйнәб 1938 йылда өс балаһы менән Ҡаҙанға күсә. 1948 йылда ҡаты ауырыуҙан вафат була. Ике улы һәм ҡыҙы Роза тома һуҡыр булған 80 йәшлек өләсәләре, Зәйнәбтең әсәһе ҡарамағында ҡала. Ул балаларҙың яҙмышы ла айырым бер тарих.

*P. S Мәҡәләлә Рәсәй Федерацияһы Федераль именлек хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы архивы материалдары файҙаланылды.*

**Гөлсәсәк САЛАМАТОВА,**
**З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Нисек итеп үҙеңдең ижади ҡеүәтең менән бәйләнеш тоторға?

Мөхәббәттә һәм байлыҡта сикләүҙәр булмаһын, тиһәгеҙ, үҙегеҙҙең ижади ҡеүәтегеҙ менән бәйләнеш тотоу - тормошоғоҙҙоң мотлаҡ бер шарты. Беҙ Илаһ менән бәйләнеш булдырыуҙың бер нисә ысулын тәҡдим иттек. Улар:

- Башҡаларға ҡарата изге эштәр.
- Үҙеңдең Юғары минеңде күҙ алдына килтереү һәм уға яҡын булыу.
- Ике бармаҡ ысулын программалау һәм ҡулланыу.
- Уйҙа ғына донъяуи проблемаларҙы хәл итеү.
- Башҡа кешеләрҙең проблемаларын хәл итеү.

Ижадсы менән бәйләнеш был процедураларҙың барыһын да күҙаллай. Кеше ни тиклем нығыраҡ көсәргәнештән арына ала, ул шул тиклем ыңғайыраҡ картиналарҙы күҙ алдына килтерә, шул тиклем уңышлы була. Бындай кеше мотлаҡ үҙ яртыһын, ауыр саҡта ярҙам итер дуҫын табыр, хөкөмдар ҡарарҙы уның файҙаһына сығарыр, ул аҡсаларын дөрөҫ итеп урынлаштырыр һәм артабан уның емештәрен тирер. Былар барыһы ла тәү ҡарашҡа үҙ фекерләүеңдең һөҙөмтәһе кеүек күренер, әммә ул Юғары сығанаҡтан килә.

Илаһ менән ни тиклем нығыраҡ бәйләнештә булһағыҙ, тормошоғоҙ шул тиклем һөҙөмтәлерәк, тулыраҡ булыр. Был уңайлылыҡҡа ла, сәләмәтлеккә лә, күңел тыныслығына ла ҡағыла.

Быны Америкаға ҡарағанда Азияла нығыраҡ аңлайҙар. Японияла, мәсәлән, меңдәрсә Аллаһ йорто бар. Таиландта һәр өйҙә тиерлек доға ҡылыу өсөн махсус урын эшләнгән. Һиндостанда изге кешеләр һәр ерҙә осрай, хатта йорт хайуандары ла Илаһтың вәкилдәре тип, уларға хөрмәт күрһәтелә.

Көнбайышта иһә, бигерәк тә Европала һәм Америкала, Илаһ тураһында уйлар өсөн ваҡыт таба алмайҙар. Бары тик аҙна ахырында, эш бөткәс кенә уның барлығы хаҡында иҫтәренә төшөрәләр. Шул ваҡытта ғына улар Аллаһ йортона бара, әммә унда ла күптәр килеүселәргә, руханиҙың һүҙҙәренә иғтибар йүнәлтеп, үҙ уйҙарына, доға ҡылыуға, ултырыуға һәм тороуға иғтибар итмәй. Бик һирәктәр генә автоматик рәүештә түгел, ә ихлас уҡына.

Мин һеҙҙе Аллаһ йортона йөрөмәгеҙ, тип өндәмәйем. Йөрөгөҙ, әммә ул аңлы рәүештә булырға тейеш. Бындай аңлау һеҙ теге йәки был ритуалды үтәр алдынан Илаһ менән уйығыҙҙа ғына бәйләнешкә ингәндән һуң башлана.

Доғаларығыҙҙы Ижадсыға булған аңлы һөйөү сағылышына әйләндерегеҙ. Әгәр һеҙ Илаһ булһағыҙ, үҙегеҙгә иғтибар булған доға ҡылыусыларға иғтибар бүлмәҫ инегеҙме ни?

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

*ТАМЫРҘАРЫБЫҘҘЫ БАРЛАЙБЫҘ*

# БЕҘ - БАЛЫҠСЫ ЫРЫУЫ БАШҠОРТТАРЫ




**Һәр ваҡыт күтәренке рухлы, асыҡ йөҙлө булған Наил Ғаян улы Хәйруллин Асҡын районының өлкән педагогтарына ғына түгел, йәштәргә лә яҡшы таныш. Ул бар ғүмерен балаларға белем һәм тәрбиә биреүгә бағышлаған. География уҡытыусыһы булып эшләгән, күп йылдар мәктәп директоры булған, шулай уҡ Башҡортостан мәҙәниәте, тарих фәндәренән дә уҡытҡан. Беренселәрҙән булып уҡыусылар менән шәжәрәләр ҙә төҙөй башлаған. "Балалар тамырҙарын, ата-бабалары хаҡында мәғлүмәт эҙләп, нәҫел ептәрен барлауға ҡыҙығып ылығып китә торғайны", - ти Наил ағай. Тора-бара үҙе лә шәжәрә төҙөү эшенә ныҡлап тотона ул. Архивтарҙа эҙләнеүҙәр, ололарҙан һорашып яҙып алыуҙар һөҙөмтәһендә ул атаһы яҡлап Атналы нәҫелен - 15-се быуынға, әсәһе яҡлап Төлкө нәҫелен 14-се быуынға тиклем өйрәнеп, шәжәрәләр төҙөй. Түбәндә ул ошо эҙләнеүҙәре тураһында һөйләй.**

- 1960 йылда мин беренсе класҡа уҡырға барҙым. "Беҙ Балыҡсы ырыуына ҡарайбыҙ, беҙ - башҡорттар, ғорур халыҡ", - тип гел әйтә торғайны атайым, - ти Наил Ғаян улы. - Ул саҡтарҙа мәктәптә уҡығанда шәжәрә һүҙе ҡулланылмай ине. Дәрестәрҙә ғаилә, үҙ нәҫелең һәм тыуған ауыл тураһында инша яҙа торғайныҡ. 7-се класта уҡығанда уҡытыусыбыҙ Тәслимә Ғәлимйән ҡыҙы Нурмиеваның ата-бабаларыбыҙ - Балыҡсы ырыуы вәкилдәренең беҙҙең яҡтарға ҡайҙан килеп сығыуын һөйләгәне әле лә иҫемдә. Балыҡсы ырыуы беҙҙең төбәктәргә 12-се быуатта Алтай яғынан килгән. Ул ваҡытта татар-монголдар хакимлыҡ итеүе билдәле. Нәҡ улар балыҡсыларға Йайыҡ (Урал) йылғаһына тиклем ерҙәрҙең ундырышлы булыуын әйткән. Балыҡ төрөк теленән тәржемә иткәндә "кала һаҡсыһы" тигәнде аңлата. Нәҡ Тәслимә апай нәҫелептәрен өйрәнергә ҡыҙыҡһыныу уятты. Мин юғары белем алып, Ҡашҡа мәктәбенә эшкә ҡайтҡас та, нәҫелебеҙгә ҡағылышлы мәғлүмәттәрҙе гел теркәй барҙым. Ауылдашым, Әхмәтзыя ағай Ғәлиәхмәтов, бик ныҡ ярҙам итте. Ул 14 йәшендә атаһы Ғәлиәхмәт ағай менән минең Хәйрулла олатайыма мөрәжәғәт итеп, үҙебеҙҙең Атналы нәҫеле тураһында бай мәғлүмәт яҙып алған булған. Шәжәрә төҙөй башлағас, мин Әхмәтзыя ағайға барып, нәҡ ошо мәғлүмәттәрҙе алып, уларға таянып, 15-се быуынға тиклем асыҡлап, архив материалдары менән дәлилләп, шәжәрә төҙөнөм. "Атналы - ҡырҡ ҡатналы", - тип атайым йыш әйтә торғайны. Хәҙер был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлайым, сөнки Атналы нәҫеле - бик ҡалын нәҫел. Ҡашҡа ауылының яртыһы нәҡ ошо нәҫелгә ҡарай булып сыҡты.

Әсәйем Миңлефрүз Ғәлләметдин ҡыҙы - Сөйөш ауылы ҡыҙы. Ул Төлкө нәҫеленә ҡарай. Бөгөн әсәйем яҡлап та шәжәрә төҙөнөк. Ғәлләметдин олатайымдың бер туған һеңлеһе Миңйыһан Латипова ошо нәҫелде яҡшы белә ине. Данис туғаным менән Төлкө нәҫеле шәжәрәһен төҙөй башлағас, уның ейәнсәре, бөгөн инде хаҡлы ялда булған Зәйнәп апай, бик күп мәғлүмәт бирҙе беҙгә. 1700 йылдан Илембәт тигән кешенән башланған Төлкө нәҫелен 14-се быуынға тиклем асыҡланыҡ. Ул ер эшкәртеүсе булған. Ерҙәре Болмозоға, ә Солтанбәк яғында Урман арты тигән ергә тиклем барып еткән.

Ҡатыным Вәрисә Хәмзә ҡыҙы яҡлап та шәжәрәбеҙ бар. Ул Ҡолсоҡай нәҫеленә ҡарай. Был шәжәрәне төҙөргә Солтанбәк ауылында тыуып үҫеп, артабан Бөгөлмә ҡалаһында йәшәгән ғалим, бөгөн инде мәрхүм, Мөхәмәтнур Ғәзимов ярҙам итте. Ул күп йылдар шәжәрә төҙөү менән шөғөлләнгән булған. Быңа шулай, Балыҡсы ырыуының Атналы, Төлкө, Ҡолсоҡай нәҫелдәренең шәжәрәләрен барланыҡ. Алда бик күп эштәр көтә. Бөгөн йыйылған мәғлүмәттәрҙе тағы ла тулыландырып, китап яҙырға ла теләк бар. Һәр нәҫелдең күренекле шәхестәрен асыҡлап сыҡһаҡ, бик яҡшы булыр ине. Быңа, мәҫәлән, Закирйән Нигмәтйәнов нәҫелебеҙҙәге Бөйөк Ватан һуғышы ветераны. Ул Хәйрулла улы. Ә Ғата Хәйруллин "ҡара генерал" Даян Мурзин отрядында партизан булған. Беҙ уның менән ике тапҡыр осраштыҡ. Ҡыҫҡаһы, башҡараһы эштәр күп...

Шулай тип киләсәккә ҡорған пландары менән бүлеште Балыҡсы ырыуының ҡор башы, тыуған яҡ тарихын өйрәнеүсе мәғариф ветераны Наил Ғаян улы.

**Наилә ИМАЕВА.**
**Асҡын районы.**



**15 НОЯБРЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00, 2.20, 3.10 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Стенограмма судьбы". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**17.30 Наши годы. [12+]**
**17.45, 20.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 Памяти Ратмира Бадретдинова... [12+]**
**0.00 Х/ф "Точка невозврата". [12+]**
**3.30 "Прости меня". [12+]**
**5.15 Мы дети войны. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

**16 НОЯБРЯ**
**ВТОРНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00, 2.20, 3.10 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Стенограмма судьбы". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**11.00, 16.00, 20.15 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 23.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Наши годы. [12+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Хазина". [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.50 Хоккей. "Торпедо" (Нижний Новгород) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.00 Х/ф "Кромовъ". [16+]**
**3.15 Спектакль "Перед свадьбой". [12+]**
**5.15 Мы дети войны. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

**17 НОЯБРЯ**
**СРЕДА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00, 2.20, 3.10 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Стенограмма судьбы". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 14.30 Наши годы. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "На свете живут добрые и хорошие люди". [16+]**
**3.00 Спектакль "Сумерки". [12+]**
**4.30 "Алтын тирмә". [0+]**
**5.15 "100 шагов на войне..." Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

**18 НОЯБРЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00, 2.20, 3.10 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Стенограмма судьбы". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**11.00, 16.00, 20.45 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Наши годы. [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә.Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Педиатрическому факультету БГМУ - 60 лет. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Этно-краса". [12+]**
**21.20 Хоккей. "Витязь" (Московская область) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.30 Х/ф "Никто, кроме нас". [16+]**
**3.30 Спектакль "Гильмияза". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

**19 НОЯБРЯ**
**ПЯТНИЦА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Юморина-2021. [16+]
23.00 Веселья час. [16+]
0.50 Х/ф "Смягчающие обстоятельства". [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.53 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Д/ф "Время". [12+]**
**10.30, 14.30, 17.00 Наши годы. [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 21.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Когда душа мелодии полна. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**19.45, 20.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 "Мой Бурзян". [12+]**
**0.30 Х/ф "Орел и решка". [12+]**
**2.00 Спектакль "Голубушки мои". [12+]**
**3.45 Автограф. [12+]**
**4.15 Әлләсе... [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

**20 НОЯБРЯ**
**СУББОТА**
**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 К 75-летию. Большое интервью Святейшего Патриарха Московского и всея Руси Кирилла.
12.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
13.35 Х/ф "Родственные связи". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Роковая женщина". [16+]
1.05 Х/ф "Украденное счастье". [12+]
4.31 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Ете егет". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 Преград. Net. [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30, 17.45 Наши годы. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.15 Колесо времени. [12+]**
**17.15 "Дорога к храму". [0+]**
**18.15 День жертв ДТП. [16+]**
**18.50 Хоккей. "Динамо" (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.00 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.15 Х/ф "Паспорт". [6+]**
**2.45 Спектакль "Галиябану". [12+]**
**4.45 Башҡорттар. [12+]**
**5.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**6.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

**21 НОЯБРЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**РОССИЯ 1**

5.25, 3.10 Х/ф "Муж счастливой женщины". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Большая переделка.
12.00 Аншлаг и Компания. [16+]
13.55 Х/ф "Родственные связи. Продолжение". [12+]
18.40 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.30 Х/ф "Он, Она и Я". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [6+]**
**9.00, 13.00, 16.30, 18.00 "20 лет вместе!" [12+]**
**12.15 Д/ф "Косуля". [6+]**
**16.00 Теге өсәү! [12+]**
**17.30 "ВасСәләм!" [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 Наши годы. [12+]**
**4.15 Х/ф "Воры в законе". [16+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**17 ноябрь "Джут (һуңғы йәйләү)"** (О. Жанайдаров), драма. 16+
**18 ноябрь "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим), трагедия. 14.00, 19.00 12+
**19 ноябрь "Йәш ғаилә фатир эҙләй"** (М. Рощин), мөхәббәт story. 16+
**20 ноябрь "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Я. Пулинович, Г. Яхина). 18.00 16+
**21 ноябрь "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**16 ноябрь "Үлмәҫбай"** (М. Кәрим). 12+
**17 ноябрь "Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н. Саймон), трагикомедия. 16+
**18 ноябрь "Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбаев), музыкаль комедия. 14+
**19 ноябрь "Капитанская дочка"** (А. Пушкин). 12+
**21 ноябрь "Приключения Тома Сойера"** (М. Твен). 12.00, 19.00 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**20-21 ноябрь "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 11.00, 13.00, 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**17 ноябрь** Радик Вәлмөхәтовтың юбилей кисәһе. 6+
**19 ноябрь "Ғүмер ике килмәй..."** Б. Азаматованың хәтер кисәһе. 6+
**"Барокко forever"** филармонияның камерный оркестры концерты. 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**18 ноябрь "Хушығыҙ, хыялдарым!"** (Ә. Атнабаев), драма. 12+
**19 ноябрь Премьера! "Быуаттарҙы быуаттарға ялғап..."** бейеү театры тамашаһы. 18.00 6+
**20 ноябрь "Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Сәлихов), комедия. 18.00 16+
**21 ноябрь "Алдар и царевна Несмеяна"** (З. Сөләймәнов), әкиәт. 12.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Ноябрь (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 15 (10) дүшәмбе | 7:19 | 8:49 | 13:30 | 15:41 | 17:11 | 18:41 |
| 16 (11) шишәмбе | 7:21 | 8:51 | 13:30 | 15:39 | 17:09 | 18:39 |
| 17 (12) шаршамбы | 7:23 | 8:53 | 13:30 | 15:38 | 17:08 | 18:38 |
| 18 (13) кесе йома | 7:24 | 8:54 | 13:30 | 15:36 | 17:06 | 18:36 |
| 19 (14) йома | 7:26 | 8:56 | 13:30 | 15:35 | 17:05 | 18:35 |
| 20 (15) шәмбе | 7:28 | 8:58 | 13:30 | 15:33 | 17:03 | 18:33 |
| 21 (16) йәкшәмбе | 7:30 | 9:00 | 13:30 | 15:32 | 17:02 | 18:32 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 19 НОЯБРЬ - ХАЛЫҠ-АРА ИРҘӘР КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**45-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тағараҡ. Нәҫер. Әҙәбиәт. Хыял. Ҡурғаш. Мусин. Ил. Сари. Ай. Мәрәкә. Емеля. Андыҙ. Победа. Автодело. Чванов. Алҡа. Убыр. Реал. Курс. Раса. "Нерв".

**Вертикаль буйынса:** Мәмерйә. Хөсәйенов. Яра. Әле. Әй. Аврора. Ант. Ғиниәтуллин. Вулкан. Ихата. Ел. Ҡороҡос. Поварисов. Рабиға. Ғаилә. Шелтә. Аҡса.

ШУНДАЙ ЯҢЫЛЫҠ

# ОНЛАЙН ТӘРЖЕМӘСЕ

**Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды Bashkortsoft проектын башлап ебәрҙе. Ул тотош һөйләмдәрҙе башҡорт теленән руссаға, руссанан башҡортсаға тәржемәләй. Проект танылған алып барыусы Наил Юнысовтың тауышы менән һөйләй. Башҡорт-рус һәм рус-башҡорт тәржемәсеһе - https://bashkortsoft.ru/ веб-сервисында.**




"Проект башҡорт телендәге текстар, тәржемәләр менән эшләгәндәрҙең барыһы өсөн дә файҙалы. Онлайн тәржемәсе ҙур текстарҙы тәржемәләй, һүҙлек, тәржемәне тауышландырыу бүлеге бар. Хәҙерге ваҡытта онлайн тәржемәсе һынау режимында эшләй, асыҡланған хаталар төҙәтелә бара. Әлегә тәржемәсенең сифаты яҡынса 70 процент тәшкил итә. Параллель текстар ни тиклем күберәк, тәржемәсе лә сифатлыраҡ буласаҡ", - тине фонд етәксеһе Гөлназ Йосопова.

Башҡорт һәм рус телдәрендәге бер төрлө материалдарҙы йыйып эшкәртеү дауам итә. Йәмғеһе 14 меңдән ашыу интернет бит эшкәртелгән. "Башҡорт телендәге теләһә ниндәй тексты яңғыратырға һәләтле компьютер программаһын bashkortsoft.ru рус-башҡорт тәржемәсеһе сайтында һынап ҡарарға мөмкин. Сайтҡа инеүселәргә тексттың башҡорт телендәге тәржемәһе нисек яңғырауын тыңлау мөмкинлеге бар", - ти сайтты төҙөүселәрҙең береһе Айҙар Хөсәйенов.

Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды был проектты тормошҡа ашырыуҙың Башҡортостанда мәғлүмәти технологияларҙы, республиканың дәүләт телдәрен үҫтереүгә булышлыҡ итәсәгенә ышана.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ӨС ТАМЫР



**Картуфты һаҡларға, ҡый үләндәрен йолҡоп ташларға күнеккәнбеҙ. Ә улар картуфтан ҡимммәтлерәк булыуы ихтимал һәм бер көн килеп, кешегә дауа өсөн тап шулар кәрәгеүе бар. Бөтә был төбө-тамыры менән юҡ итеүе ауыр булған ҡый үләндәре Ерҙәге тереклек өсөн мөһим булыуҙарын иҫбат иткәндәр.**

Бер ауырыуға ла бирешергә теләмәһәң, өс тамыр - дегәнәк, аҡтамыр һәм бәпембәне ҡаҙып алығыҙ. Ошо тамырҙарҙан әҙерләнгән дауаларҙы эсеү файҙалы. Ғөмүмән, билдәле үлән менән дауалаусылар 25 тамырҙы ҡаҙып алыуҙары тураһында һөйләй, әммә иң мөһим өсәүһе лә күп ауырыуҙарҙан һаҡланыу өсөн етә.

**Аҡтамыр -** был йолҡоп бөтөргөһөҙ ҡый үләнен Хоҙай үҙе аяҡ аҫтыбыҙға түшәп үҫтергән. Ул үҫмәгән бер ырҙын да юҡтыр. Ул дауаламаған бер ауырыу ҙа юҡ, күҙҙән башлап яман шешкә тиклем шифалы аҡтамыр. Был үләнде хайуандар ҙа урап үтмәй хатта. Ә кеше өсөн ул матдәләр алмашыныуын яйға һалырға ярҙам итеүе менән файҙалы. Тамырһабаҡ төнәтмәһен һәм ҡайнатмаһын һары һыу ауырыуы (водянка), төрлө сәбәптән шешенгәндә, цистит, бәүел тотмағанда, бөйөрҙәрҙә һәм үт ҡыуығында таштар булғанда, үпкә, бөйөр, ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары, шәкәр диабеты, дауамлы бронхит, гипертония сирҙәренән дауаланғанда эсәләр. Был үләндең тамыры подагра, ревматизм, люмбаго, төрлө артрит ауырыуҙарынан һыҙланыуҙарҙы баҫыу өсөн ҡулланыла. Йәш үләндең һуты һәм ҡайнатмаһын йәй дауамында эсергә мөмкин, ул өлөшләтә күҙ күреү һәләтен юғалтҡанда ярҙам итә. Тамыры остеохондроз, ҡатын-ҡыҙҙарҙың түллек биҙе эшмәкәрлеге боҙолғанда, үпкә туберкулезы, экссудатив диатез, сиҡан сыҡҡанда дауа. Был үләнде ҡулланырға ярамаған осраҡ юҡ, шулай ҙа һәр кемдең организмы үҙенсә ҡабул итеүе бар.

**Бәпембә** лә ҡый үләне. Иртә яҙҙан бәпембә япрағын йыйырға һәм әселеге бөтһөн өсөн тоҙло һыуҙа 2 сәғәт ебетеп, салат эшләп ашау файҙалы. Урыҫтар унның япрағынан аш бешергән, ә тамырҙарын ҡыҙҙырып ашаған. Бәпембә тамыры аҙҡанлылыҡ, ашҡаҙан һәм бауыр яман шештәре, лимфа төйөрҙәре шеше, диатез, остеоартроз, артрит, остеохондроз, быуындарҙы дауалай. Көҙгөһөн сәскә атып өлгөрмәгән бәпембә күрһәгеҙ, шуны ҡаҙып алығыҙ.

Бөтә ауырыуҙарҙы ла дауалай алған академик бар. Был - **дегәнәк**, һәм ул кеше килеп ҡаҙып алып, дауалана башлауын көтөп ултыра. Хәҙерге көндә бөтә кешеләр ҙә тиерлек сырхау. Яман шеш бик күптәрҙең йәнен ҡыя. Ә дегәнәк барлыҡ онкология ауырыуҙарын дауалай. Шәкәр диабеты, бронхит, гайморит, ревматизм, подагра, артрит, остеохондроз, умыртҡа араһы бөҫөре, атеросклероз, ҡолаҡ сирҙәрен, оҙайлы коронар етешмәүсәнлек булғанда, һынған һөйәктәрҙе уңалтыу өсөн төп ярҙамсы. Дегәнәк хатта гепатит сирен дә дауалай. Унын ярҙамында бауыр шештәрен, хатта бауыр циррозын, холецистит, бөйөр ауырыуҙарын, үт ҡыуығында таштарҙы бөтөрөргә була. Дегәнәкте тире ауырыуҙарын: яндырғанда, оҙаҡ ятыуҙан елһенгәндә, экзема, эренле яралар, псориаз булғанда ҡулланалар. Хатта сәсе күп ҡойолған оҙон толомло һылыуҙарға ла дегәнәк төп ярҙамсы.

Был тамырҙарҙан төнәтмә әҙерләү серҙәре түбәндәгесә. Иң ҡимммәтле тамырҙар иртә яҙ алына, әммә көҙгөһөн ҡаҙып алғанда ла була. Дегәнәк - ике йыллыҡ үҫемлек. Бер йыллыҡ дегәнәкте ҡаҙып алыу кәрәк, унның япраҡтары йәш, тамыры көслө була. Ә япраҡтары ҡороған һәм йәбешкәктәре булған дегәнәк файҙаһыҙ, был үлән бөтә көсөн сәскә атыуға сарыф иткән. Шулай ҙа унның йәбешкәктәрен йыйып алырға, төнәтергә һәм тештәрҙе сайҡарға була - һыҙлауҙы баҫа. Тамырҙарҙы ҡаҙып алып йыуырға һәм киптерергә. Дегәнәк тамыры йыуан була, шуға уны турарға кәрәк. Шунан бер ҡалаҡ ваҡлап киптерелгән тамырға 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минут ҡайнатырға, 2 сәғәт төнәтергә. Шунан һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 10-15 минут алда яртышар стакан эсергә. Шифалы төнәтмәне ашарҙан алда эсеү мөһим, сөнки ул шунда уҡ организм буйлап тарала. Дегәнәк, аҡтамыр һәм бәпембә тамыры йыйылмаһын бер тигеҙ итеп алып эсергә, йәки һәр үлән менән айырым дауаланырға була: бер аҙна - дегәнәк, бер аҙна - бәпембә, бер аҙна - аҡтамыр.

*ЙОЛА ТОТҠАН - ЯҘЛЫҠМАҪ*

**Башҡорт халҡында байлыҡ, муллыҡ һәм уңғанлыҡты, матурлыҡты һүрәтләгән, күркәм ғәҙәттәрҙе һәм йолаларҙы берләштергән халыҡ байрамдары бик күп, шөкөр. Ҡаҙ өмәһе - шундайҙарҙың береһе.**

**Беҙ бәләкәй саҡта ул көҙҙөң һуңғы айында, йәғни ноябрҙә, ер-һыу туңып, ҡар яҡҡас үткәрелә торғайны. Ул мәлдә хәҙерге кеүек һәр төрлө туңдырғыс шкафтар йәки һандыҡтар булмағанға, ҡош-ҡорт өмәләре башлыса көндәр һалҡынайтҡас ҡына ойошторолдо. Еңгәләрҙең, апайҙарҙың көйәнтәгә ҡаҙҙарҙы аҫып йылғаға алып төшөп, мәкелә сайыуҙары, сайғас, ярҙа бер аҙ йырлап-бейеп күңел асыуҙары әле лә күңелле бала саҡ хәтирәһе булып күҙ алдында тора. Беҙгә, бәләкәйҙәргә лә, эш эләгә торғайны. Күберәк тегене-быны алып бирер, ҡул араһында ғына йөрөйбөҙ. Ҡайһы берҙә ҡауырһындарҙы һыпырырға ҡуша торғайнылар. Ул йөндө, мендәрҙәргә күпертеп, ҡупшы итеп күрһәтә тип, башҡа йөнгә ҡушалар ине. Ә ҡаты ҡауырһындың ҡалғанын ауылдан ситтәрәк, әммә кеше йөрөгән урынға түгәләр ине. Шулай итһәң, икенсе йыл ҡаҙ тағы ла уңа, имеш. Хәҙер күптәр ҡош-ҡортон көн йылы саҡта рәхәтләнеп урамда эшкәртеп ҡалырға тырыша. Әммә ҡасан йолкоуға ҡарамаҫтан, ҡайһы бер этаптары төшөп ҡалһа ла, ҡаҙ өмәһенең төп йолалары үтәлә. Әлбиттә, һәр төбәктә үҙенә генә хас тәртип һаҡланған.**

**Был юлы Көйөргәҙе районы Яңы Муса ауылында йәшәгән хужабикә - Ильвира ЗАҺИҘУЛЛИНАнан Ҡаҙ өмәһе йолаһы үткәреү тураһында һөйләттек.**

# ҠАҘ ӨМӘЛӘРЕ БАШЛАНДЫ



- Беҙҙең ауылыбыҙ ҡаҙ-өйрәк тотоу өсөн бигерәк уңайлы урында урынлашҡан. Эргәнән генә Мәләүез йылғаһы аға, - тип һөйләп китте Ильвира. - Тик хәҙер күптәр элекке кеүек оя-оя ҡаҙ үстермәй. Иртә яҙҙан бәпкә көйө һатып алалар ҙа, йәй буйы тәрбиәләп, көҙгә һуялар. Элек ноябрь айы гөрләп тора торғайны. Күрше-тирәһен, туғандарын саҡырып, һәр кем өмә үткәрҙе. Әйткәндәй, элек тә, әле лә уны бер кем дә эш һымаҡ күрмәй. Киреһенсә, уңған хужабикәләр был эште байрам һымаҡ көтөп ала. Кистән ҡаҙҙы салыу, эшкәртеү өсөн кәрәкле һауыт-һаба, бау, бысаҡ кеүек әйберҙәр әҙерләнә. Өмәселәрҙе һыйларға бәлеш, бауырһаҡ, сәк-сәк, ҡоймаҡ ҡойола.

Салыр алдынан кискелеккә ҡоштарҙы ашатмайһың. Эште иртәләп кенә башларға кәрәк. Ҡаҙҙарҙы нығ ҡыуырға ярамай. Артыҡ тауышланмай, шауламай, ҡурҡытмай ғына, ҡанаттарын имгәтмәй генә тотоп, тәпәйҙәрен бәйләргә ҡуша ине ололар. Һәр эштә һәләт кәрәккән кеүек, ҡош тотоуҙа ла етеҙлек тә, таһыллыҡ та кәрәк. Ҡаҙ, айырыуса ата ҡаҙ көслө була, дөрөҫөрәк тотмаһаң, ҡанаты менән нык ҡына һуғыуы ла ихтимал. Ҡаты ғына эләгергә мөмкин.

Беҙҙең ауылда ҡошто салғандан һуң рәшәткәгә элеп сығалар. Был ысул ҡоштоң эре ҡауырһындарын йолҡоп алыу, муйынынан ҡан тамсылап тормаһын өсөн бәйләп ҡуйыу өсөн уңайлы. Ҡанат аҫтынан харам йөндәрен, улар ғәҙәттә ете бөртөк була, шунан ҡойроғонон эре ҡауырыйҙарын йолҡоп алғас, ҡанатын бер быуынан киҫеп алаһың, башын ҡырҡып, муйынын бәйләйһең.

Борон ҡоро көйө генә йолҡоп алырға тырыша инек. Айҙың фазаһына ҡарапмы, әллә нисек ашауына бәйле булдымы, һүкталы булһа, марляны еүешләп, үтекләп мәшәҡәтләнә инек. Хәҙер еңелгә һалыштыҡ, ҡайнар һыуҙа бешекләп алабыҙ ҙа, берәй иҫке кейемгәмә, юрғанғамы төрөп торабыҙ. Уны бешекләүҙең дә үҙ тәртибе бар. Эҫе һыу мамыҡ аша тиреһенә үтергә тейеш түгел, юғиһә, майы бешеүе бар. Йылы әйбергә төрөп һалһаң, тиҙ генә йолҡола. Беҙҙә, ғәҙәттә, берәү бешекләп тора. Теләгән кеше булмаһа, хужабикә үҙе был яуаплы эште атҡара.

Йолҡҡан ваҡытта шаян һүҙҙәр һөйләшеп, көләшеп, йырлашып ултырабыҙ. Йолҡоуы тиҙ унын, уңғандар ярыша-ярыша эшләй. Йолҡоп бөткәс, өтәһең. Элек газ, сыра менән өтөп этләнә инек, хәҙер магазинда бәләкәй генә өткөстәр бар. Ҡыйбат та түгел үҙе, бик йәтеш нәмә.

Эсен алыуҙың да үҙ тәртибе бар. Үтен һытып ҡуймай ғына алырға кәрәк. Эс майын алып, һыуыҡ һыуға, ҡар булһа, ҡарға һалабыҙ. Шулай итһәң, эсәктән айырып алыу еңел. Ошо ваҡытта яҡшы тәрбиәләгәне өсөн хужабикәне маҡтау башлана. Элегерәк "май өсөн" тип, йөҙ грамм эселә ине. Шөкөр, хәҙер был йола яйлап юғалды. Бүтәгәһе, тәпәйе, бауыры, йөрәге айырым-айырым йыуыла, һауыттарға һалына. Эргәлә генә йылға аҡһа ла, хәҙер өйҙә йыуабыҙ ҙа ҡуябыҙ. Бында ла йыр-моң яңғырап тора. Тәү сиратта иң яҡшы, иң һимеҙ, иң ҙур тип табылған бер-ике ҡаҙҙы йыуып, хужабикә бешерергә һала. Өмәселәр бөтә эште эшләп, тотоноп, һауыт-һабаһы йыуышып, йыйыштырып ҡайтып китәләр.

Кисенә өмәлә ҡатнашыусылар үҙҙәренең ирҙәре, балалары менән ашҡа килә. Аштан алда теләгән кеше йыуынып сыға. Беҙҙә өмәселәр өсөн мотлаҡ мунса яғылар. Ҡаҙ майына ҡоймаҡ майлана. Һәр береһенә өләшләп ит һалына. Элегерәк эсәген яҡшылап йыуып, ағартып, тәпәйҙәргә урап бешерә торғайныҡ. Шулай, уйын-көлкө, йыр-бейеү, изге теләктәр һәм ҡаҙҙы үҫтергән ғаиләне маҡтау һүҙҙәре менән өмә ашы үткәрелә.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Көҙгө эштәр тамамланғас үткәрелә торған ҡаҙ өмәһе матур, етеш көнитмешебеҙ билдәһе ул. Әлбиттә, быйыл ҡош киҙеүе Башҡортостанға килде, тигән хәбәр нык ҡына борсоуға һалғайны ауыл халҡын. Әммә ул бик нык таралып өлгөрмәне. Артабан да ошондай күркәм йолаларыбыҙ дауам итһен.**

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠЫЛ АҒАСЫНДАҒЫ ЕМЕШ...

## өлгөрмәгән килеш ҡала

Ике баланы бергә иҫәплә, бер баланы юҡҡа иҫәплә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Мөхәббәт менән өйләнгән ир ҡоҙоҡҡа һикергән тәлмәрйен кеүек: һыу мул, әммә ҡоҙоҡтан ҡабат һикереп сығып булмай.

**(Самюэл Кольридж).**

Кешенең аҡылы тураһында ҡайтарған яуабына ҡарап түгел, биргән һорауына ҡарап баһаларға була.

**(Гастон де Левис).**

Балаларҙы кәнфит менән, ололарҙы вәғәҙәләр менән алдаштыралар.

**(Фрэнсис Бэкон).**

Артыҡ һуңлап аҡылға ултырған артыҡ иртә ҡыйыулыҡ күрһәткән.

**(Маркиз Галифакс).**

Ахмаҡтарҙы таный белмәгән - ахмаҡ, танып та уларҙан ҡотолорға теләмәгән - тағы ла ахмағыраҡ.

**(Бальтасар Грасиан).**

Кеше тормошонда бары тик өс кенә ваҡиға: тыуыу, йәшәү, үлем. Ул үҙенең тыуғанын һиҙмәй, үлемен көтөп йөрөп, йәшәргә онота.

**(Жан Лабрюйер).**

Йомартлыҡ нигеҙендә барыбер ҙә ниндәйҙер ниәт ята һәм ул ниәт бүләк ителгән әйберҙән ҡәҙерлерәк.

**(Франсуа де Ларошфуко).**

Әҙәм өлгөрмәгән емештәрҙе өҙә һәм ожмахтан ҡыуыла. Шунан алып аҡыл ағасындағы емештәр өлгөрмәгән килеш ҡала килә.

**(Карел Чапек).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер уҡыусы суфый остазынан һорай икән: "Остазым, әгәр ҙә мин йығылһам, һин ниндәй һүҙҙәр әйтер инең икән?" "Тор!" тип әйтер инем", - тигән остаз. "Әгәр икенсегә йығылһам?" "Икенсегә йығылһаң да "Тор!" тиер инем..." "Йығылыу һәм яңынан аяҡҡа баҫыу күпме дауам итә һуң?" - тип һорай тағы ла уҡыусы. "Һин тере икәнһең - йығылаһың да яңынан тораһың. Йығылып та яңынан аяҡҡа баҫмайһың икән, тимәк, һин үле", - тип яуаплаған остаз..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 21046

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
12 ноябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3250
Заказ - 1363